ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

20-26 май (һабанай)

2023

№ 19 (1061)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклe

*Иғтибар! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2023 йылдың икенсе яртыһы өсөн баҫмабыҙға 842 һум 28 тингә яҙылырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Карта сигәбеҙ... 2

Имтихандар, имтихандар... 5

Беҙ - егерменселәр, беҙ йондоҙҙар тоҡандырабыҙ! 8-9

Башҡорт телен... ҡаҙаҡ егетенең уҡытҡаны 10










@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### "Атайсал - кесе ватаным" проекты сиктәрендә ниндәй ғәмәлдәр башҡараһығыҙ?

***Данир ҒӘЙНУЛЛИН, БР Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса фәнни-етештереү үҙәге директоры:*** Ике йыл ғына ғәмәлдә булыуына ҡарамаҫтан, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тәҡдиме һәм шәхси өлгөһө менән башланып киткән "Атайсал - кесе Ватаным" проекты республика халҡы тарафынан дәррәү күтәрмәләп алынды һәм һәр кемдең изге бурысына әйләнде. Был проектҡа тыуған төбәгендә көн күреүселәр генә түгел, ауылынан ситтә йәшәп-эшләһә лә, күңелдәре менән тыуған яҡтарын, уның кешеләрен йөрәк түрендә йөрөтөүсе яҡташтары ла кесе ватанын тағы ла көслөрәк, гүзәлерәк, уңайлыраҡ итеү өсөн ярҙам акцияһына ихлас ҡушылды. Тәүге йылында был проект 2 меңдән ашыу кешене берләштерһә, бөгөн яҡташтар тарафынан тыуған төбәктәргә 1,2 млрд һумлыҡ изгелек ғәмәлдәре башҡарылған. Шуныһы һөйөнөслө: был проектҡа ҡушылырға теләүселәр һаны арта бара.

"Изгелек эшлә лә һыуға һал - халыҡ белер, халыҡ белмәһә, балыҡ белер" тигәндәй, тыуған төйәгенә өнһөҙ-тынһыҙ ғына ярҙам күрһәтеүсе кешеләр күпме! Тыуған районым Стәрлебаш буйынса ғына ла, мәҫәлән, ошо проект сиктәрендә 100-ҙән ашыу изгелек ғәмәле атҡарылды. Был эштәр иҫәбенә ауылдарыбыҙҙы төҙөкләндереү, шишмәләрҙе тергеҙеп, матур итеп кәртәләп алыу, социаль объекттар өсөн - мебель, мәктәптәргә уҡыу кәрәк-яраҡтары һатып алыу, күп халыҡ ҡатнашлығында мәҙәни саралар ойоштороу, өлкән йәштәге ветерандарға ярҙам күрһәтеү һәм башҡа бик күп эштәрҙе индерергә була.

Шәхсән үҙемә килгәндә, тыуған төйәгем Түбәнге Аллағыуат ауылы менән бәйләнеште өҙгән юҡ. Бәләкәйҙән үк ҡартатайым Исламғол Рәжәповтың ауылыбыҙ тарихы, боронғо ҡурғандар, ер-һыу атамалары хаҡында һөйләгәндәрен тыңлап үҫтем. Тыуған төйәгемә һөйөү миндә тарихҡа һөйөү тәрбиәләне.

**Ауылдан сығып китһәм дә мин унда йыш ҡайтам, яҡташтарым менән аралашам. 2005 йылда уҡ әле ауыл клубына төҫлө музыка аппаратураһы, милли кейемдәр комплекты бүләк иттем, клубҡа йомшаҡ ултырғыстар алдым һәм, әлбиттә, клуб бинаһына капиталь ремонт документтарын һәм сметаһын әҙерләшеп бирҙем. Шул уҡ ваҡытта туғандарым, дуҫтарымды йәлеп итеп, үҙ иҫәбемә ауылда мәсет төҙөү ҙә яҡташтарым алдында күңел ихтыяжымды бойомға ашырыусы бер йәдкәрем булды, тип әйтергә баҙнат итә алам.**

Туған мәктәбебеҙҙе лә ҡарапхәстәрләп торабыҙ. Көслө елдауыл бер мәл уның ҡыйығын алып ташлағас, ошо мәктәпте тамамлаусылар йыйылышып, профнастил һатып алдыҡ һәм ауылдаштарым менән өмә яһап, ярты көн эсендә мәктәп ҡыйығын яңыртып та ҡуйҙыҡ. Мәктәбебеҙ эстән дә яңыртылды: мөмкинлек табып, уға капиталь ремонт үткәреү эшен федераль программаға индерҙек, аҙаҡ был уҡыу йортона яңы ҡорамалдар алынды, уның тирә-яғы кәртәләнеп, биләмәһенә асфальт түшәтелде.

Бының менән нимә әйтергә теләйем? Тыуып үҫкән еренә һәр кем ҡулынан килгәнсә ярҙам итһә, урында байтаҡ мәсьәләләр хәл ителә, социаль объекттар төҙөкләндерелә, ауылға йән керә. Быйыл 31 мартта Мәләүездә үткән бишенсе район-ара "Атайсал - кесе Ватаным" форумында ошо хаҡта һүҙ барҙы. Майҙан хужалары Мәләүез ерендә тормошҡа ашырылған бихисап изге ғәмәлдәр тураһында һөйләне. Тыуған ауылдан сығып китһәң дә, Ватанға һөйөү һәр ваҡыт үҙең менән. Олоғая килә тыуған ергә һөйөүҙе ярҙам ғәмәле менән күрһәтеп булыуын да аңлай кеше. Форумда мин дә тыуған ерем - Стәрлебаш районы Түбәнге Аллағыуат ауылына ярҙамым, район хакимиәте менән бергәләп эшләүебеҙ тураһында һөйләнем, тәжрибә уртаҡлаштым. Төрлө спикерҙарҙың сығыштарын тыңлап, фекер алыштыҡ.

**Ғөмүмән, тыуған еренә нисек файҙалы булырға, тигән һорау һәр кемдең аҡылына килһен ул. Сөнки ауылдар киләсәге - үҙебеҙҙең ҡулда! Һәм ярҙамдың мотлаҡ матди булыуы ла шарт түгел. Шишмәләрҙе таҙартыу, ауылды төҙөкләндереүгә бәйле өмәләрҙә ҡатнашыу, мәҫәлән, һәр кемдең ҡулынан килә торған эш. Шулай уҡ социаль инфраструктура үҫешенә бәйле программаларға инеү өсөн проекттар әҙерләү, мөрәжәғәттәр яҙыу өсөн дә мотлаҡ вазифалы кеше булырға кәрәкмәй.**

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ЯҘМЫШЫБЫҘ...

## тыуған ер һәм туған тел

**Ҡайһылыр бер "аҡыллы баш"тың фаразлауынса, 2037 йылдың декабрендә, имеш, Рәсәйҙә һуңғы гәзит һаны донъя күрәсәк. Тағы ла дүрт йылдан, тип дауам итә әлеге "күрәҙәсе", "Гәзиттәр ҡасан юҡҡа сығасаҡ" тигән китап ишараты авторы Андрей Мирошниченко, телевидение ла юҡҡа сығасаҡ. Үҙенең был фаразын ул ошо ваҡытҡа "гәзит уҡыусы һуңғы быуын"дың был донъянан китәсәген күҙаллай. Был быуын, ти ул, бала саҡтан уҡ "Мурзилка", унан "Пионерская правда", артабан "Комсомольская правда", өлкәнәйә биргәс, "Правда", "Труд" гәзиттәрен уҡып ғәҙәтләнгән. Баҡса һәм мәктәп йәшендә сағынан уҡ әлеге балалар социалләшеп үҫкәндәр, ә инде 90-сы йылдарҙан һуң тыуған быуындың социалләшеүе интернет эраһының башланыуына тап килә һәм улар гәзиттең ни икәнен дә белмәй үҫте, тимәксе әлеге автор.**




(Дауамы 2-се биттә).

12+

✓ "Башҡортостандың сигелгән картаһы" республика проекты Башҡортостан Башлығы грантына бойомға ашырыла. 26-28 майҙа Өфөлә "Китап байрамы" халыҡ-ара китап йәрминкәһендә ошо проекттың презентацияһы була.



УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ЯҘМЫШЫБЫҘ...

## тыуған ер һәм туған тел

(Башы 1-се биттә).

Мин был кеше менән бәхәскә инергә йыйынмайым, һәр кем үҙ манараһынан тороп ҡарай. Ә уның манараһының әллә ни юғарынан түгеллеген баҫма матбуғатҡа булған мөнәсәбәте лә асыҡ күрһәтеп тора бит. Һәр хәлдә, йәше иллегә етеп барған был әфәнденең гәзит-журнал баҫмалары менән дуҫ түгеллеге уның мәҙәниәҙәп кимәлен яҡшы фашлай. Дөрөҫ, совет, аҙаҡ Рәсәй халҡы ваҡытлы матбуғат менән дуҫ булды - быны ни яҙығы бар? Уның ҡарауы, гәзит-журнал уҡып йәшәгән быуындың социаль мөхиткә шул йәмғиәттең социаль һәм әхлаҡи тәртип нормаларына яраҡлашып, шул йәмғиәт ҡағиҙәләре, ҡиммәттәре, белем тәрәнлеге һәм донъяға ҡараш кимәле менән инеп китеүе, шәхес булараҡ өлгөрөп етеүе күп йәһәттән ваҡытлы матбуғат баҫмаларының шәхес тәрбиәләүҙәге әһәмиәтенә ныҡлы дәлил булып торҙо. Беҙҙең гәзит-журналдар күп һанлы уҡыусыларын илде, ватанды һәм хеҙмәтте һөйөргә, кешелекле һәм кеселекле булырға, белем алырға, сәләмәт тормош рәүеше менән йәшәргә һәм башҡа шундай тормошсан, көн дә кәрәкле сифаттарға эйә булырға өйрәтте; уҡыусыларының яҡын дуҫы, кәңәшсеһенә, серҙәшенә әүерелде.

Ә интернет бөгөн үҙ ҡулланыусыларын нимәгә өйрәтә, нимәгә саҡыра, ниндәй яңылыҡтар менән таныштыра? Дөрөҫөн әйткәндә, унда бөтәһе лә бар: хәҡиҡәте-ялғаны, кәрәге-кәрәкмәгәне, файҙалыһы-зыянлыһы... Бөгөн гәзит-журнал уҡымаған, ҡибла тарафын белмәгән уртаса статистик берәмек өсөн - барыбер, ул бөтәһен дә үҙенә һеңдерә, ялғанды ысын менән бутарға ла күп һорамай. Интернет ресурсы материалдарын "һөҙөп" файҙалана белеү өсөн дә бит кимәл, белем кәрәк. Ә бәғзе берәүҙәр ундағы "бутҡа"ны бик тә разый булып ҡабул итә, ваҡытын исрафлай. Шунда соҡсоноп ултырғансы, берәй гәзит алып, күҙ һалһа, файҙалыраҡ мәғлүмәттәр алыр ине ул кеше.

Дөрөҫ, яңылыҡтар төрлө сығанаҡтарҙа ла бер төрлө булыуы бар, ә бына гәзит рәсми хәбәрҙәрҙән генә тормай. Үҙем хәҙер нисә йылдар алдырып уҡыған "Киске Өфө" гәзитен генә алайыҡ, булмаһа. Был баҫмала бирелә килгән халҡыбыҙҙың рухиәт хазиналары, шанлы тарих биттәре, кесе ватаныбыҙҙың бөгөнгөһө, арҙаҡлы шәхестәребеҙ, хеҙмәт карьераһы һәм ижад үрҙәрен яулаусы, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүсе заман башҡорттары хаҡындағы мәҡәлә һәм интервьюларҙы һеҙ күпме соҡонһағыҙ ҙа интернетта таба алыуығыҙ икеле, сөнки үҙебеҙ хаҡында үҙебеҙҙең матбуғат баҫмалары ғорурланып, күтәрмәләп, ентекле өйрәнеп, яратып, ә инде йыш ҡына проблемалар айҡанлы хәсрәтләнеп тә яҙа; сөнки беҙҙең өсөн башҡалар ҡайғырмаҫ, башҡалар беҙҙе күтәрмәҫ; үҙебеҙҙе үҙебеҙ күтәрер, бер-беребеҙҙең күңелдәрен күрер, дәртләндерер, хатта ул-был айҡанлы иҫкәртер өсөн дә әсә телебеҙҙә сыҡҡан матбуғат баҫмаларын уҡырға тейешбеҙ. Әсә телебеҙҙе рәсми йәшәтеп килеүсе гәзит-журналдарыбыҙға рәхмәтле булайыҡ, йәмәғәт, һәм шуның өсөн генә булһа ла алдырайыҡ, уҡыйыҡ гәзиттәребеҙҙе. Халҡыбыҙ, милләтебеҙ яҙмышының иң тәү сиратта тыуған еребеҙ менән туған телебеҙгә бәйле булыуын онотмайыҡ!

**Мөхәмәт ИМАНҒОЛОВ,**
**хеҙмәт ветераны.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# КАРТА СИГӘБЕҘ...



**Республикабыҙҙа "Башҡортостандың сигелгән картаһы" проектының эше дауам итә. Салауат районының сигелгән картаһында башҡорттарҙың милли батыры Салауат Юлаев төшөрөлгән, тип хәбәр иттеләр Республика халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәтенән.**

Композицияның уртаһында муниципалитет гербы һәм Салауат Юлаев һыны урынлашҡан. Картала райондың ынйыһы булған "Янғантау" шифаханаһы ла һүрәтләнгән. Күк төҫ - Ҡорғаҙаҡ минераль һыу сығанағы, һул яҡтағы өҫкө мөйөштә - Бейектау, уң яҡта аҫта - Таштирмә, Салауат Юлаевтың тыуған төйәге Тәкәй ауылы урынында урынлашҡан, ул декоратив тәңкәләрҙән эшләнгән.

- Беҙҙең райондың картаһы тамбур менән ҡайылған. Миңә был техника бик оҡшай, эшем сағыу, үҙенсәлекле килеп сыға. Таштирмә декоратив тәңкәләрҙән эшләнгән. Улар районыбыҙҙың ҡаялы, таулы урындарының символы итеп картаның ситтәренә тегеп сығылған, - ти Салауат районының Комсомол ауылында йәшәгән оҫта сигеүсе Гөлдәр Шәбиева.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Башҡортостандың сигелгән картаһы" республика проекты Башҡортостан Башлығы грантына бойомға ашырыла. 26-28 майҙа Өфөлә "Китап байрамы" халыҡ-ара китап йәрминкәһендә ошо проекттың презентацияһы була.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? "Атайсал - кесе ватаным" проекты сиктәрендә ниндәй ғәмәлдәр башҡараһығыҙ?

***Фәнис ҒИЛУАНОВ, БР "Муниципалитет берәмектәре берлеге " ассоциацияһының башҡарыусы директоры:*** Диңгеҙселәр араһында шундай бер лаҡап бар: "Карапҡа ниндәй исем ҡушаһың, артабан ул шулай йөҙәсәк". Беҙҙең әлеге проектты ла "Атайсал" тип исемләү күп йәһәттән уның яҙмышын хәл итте, сөнки был һүҙ һәр кем йөрәгенә барып етерлек, тыуған яҡ хәтирәләрен ҡумшытып, ата-әсә йортон, бала саҡ һуҡмаҡтарын иҫкә төшөрөп, һағындырып, хисләндереп тора һәм был тойғо кеше күңелен бер ҡасан да, бер минутҡа ла ташлап китмәй; ул иң изге, иң ҡайнар һәм иң яҡын иҫтәлектәр донъяһы.

"Һәр кемдең яҡты донъяға тыуып, тәүге аҙымдарын яһаған, тәүге мөһим һүҙҙәрҙе башлап әйткән йөрәгенә ҡәҙерле урыны була..."- тигәйне Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Атайсал" проектына бәйле быйылғы йылды "Атайсалаға - изге ғәмәлдәр" йылы тип иғлан иткән инеш һүҙендә. "Беҙҙә бәләкәй ауыл һәм ҡалаларҙан сыҡҡан уңышлы кешеләр бик күп һәм уларҙың һәр береһе кесе ватанына ярҙам ҡулы һуҙһа, урындарҙа тормош тағы ла йәмләнеп китер ине",- тигәйне ул. Һәм, ысынлап та, йәмәғәтселек, эшлекле даирәләр вәкилдәре, эшҡыуарҙар һәм ситтә йәшәүсе башҡа бик күп яҡташтарыбыҙ был башланғысты күтәрмәләп алды. Радий Хәбиров 2018 йылда уҡ әле тыуған ауылы Һайранда булып, ауылдаштарына ярҙам ҡулы һуҙҙы һәм шуның менән "Атайсал" проектында ҡатнашыусыларға өлгө күрһәтте. Уның ярҙамы менән Ишембай районының Һайран ауылында яңы ФАП төҙөлдө, һыу һурҙырғыс башня ипкә килтерелде, урамдарға яҡтылыҡ үткәрелде, асфальт юл түшәлде. Тиҙҙән бында янғын һағы хеҙмәте эш башлаясаҡ, яңы эш урындары асыласаҡ.

Башлыҡ өлгөһөнә эйәреп, тыуған төйәктәренә ярҙам итеүселәрҙең иҫәбе-һаны юҡ. Мәҫәлән, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев та "Атайсал" проектына ҡушылып, үҙ иҫәбенә 200 мең һум аҡсаға Яңауыл районы Орловка ауылындағы "Һалҡын шишмә" һыу сығанағын төҙөкләндереүҙә ҡатнашты һәм Борай районы үҙәгендә йәйәүлеләр өсөн 320 метр юлға асфальт түшәтте. БР премьер-министр урынбаҫары Ирек Сәғитов Ауырғазы районы Мостафа ауылында йәшәүсе яҡташтарына заманса йыһазландырылған спорт майҙаны, мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова Бөрйән районы Ырғыҙлы ауыл клубына сәхнә милли кейемдәре, тауыш һәм видео аппаратураһы, теген машинаһы бүләк итһә, премьер-министр урынбаҫары, хәҙерге ваҡытта Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы Азат Бадранов Бөйөк Ватан һуғышында баштарын һалған Архангел районы Оҙонлар ауылы яугирҙары иҫтәлегенә һәйкәлде яңыртыу эшендә ҡатнашты. Бында шулай уҡ 1812 йылғы Ватан һуғышы батырҙарына һәйкәл дә А.Бадранов тырышлығы менән асылды.

Былар "Атайсал" проекты буйынса бик күп файҙалы эштәрҙең бер нисәүһе генә. Проект операторы вазифаһын башҡарыусы "Муниципаль берәмектәр берлеге" ассоциацияһының төп бурысы ана шундай яҡташлыҡ ярҙамын системаға һалыу, яңынан-яңы меценаттар йәлеп итеү, изге ғәмәлдәрҙе теркәү, тыуған төйәгенә ярҙам итергә теләк белдереүселәрҙең проекттарын ҡарау һәм сайтҡа урынлаштырыу, шулай уҡ мәрхәмәтлек ирекмәндәренә ойоштороу ярҙамы күрһәтеүҙән ғибәрәт.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Азат Рәхмәтуллин коронавирус буйынса һуңғы яңылыҡтар менән таныштырҙы. Һуңғы аҙнала сир 926 кешелә асыҡланған, был алдағы аҙна менән сағыштырғанда 14 процентҡа әҙерәк. Ковид-госпиталдәрҙә коронавирусты дауалау өсөн 265 урын әҙерләнгән, уларҙың 12 проценты буш. Әлеге ваҡытта 118 кеше дауаханала, 1325 кеше өйөндә дауалана.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә Ҡаҙағстан, Үзбәкстан һәм Төркиә менән иҡтисад һәм мәҙәни алмашыу өлкәһендә үҙ-ара эш итеүҙе көсәйтергә ҡушты. Быға тиклем әлеге пландар тикшерелгәйне, был мәсьәләгә кире ҡайтырға кәрәк, тип билдәләне ул. Хәбәр ителеүенсә, Башҡортостан көҙгә тиклем Ҡаҙағстанға өс бизнес-миссия ойошторорға йыйына.

✓Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге үткәргән һорау алыу мәғлүмәттәренә ярашлы, Рәсәй президенты эшмәкәрлеген хуплау күрһәткесе 77,1 процент тәшкил итә. Рәсәй премьер-министрының һәм хөкүмәттең эшенә ыңғай баһаның кимәлдәре - 56 процент һәм 53,5 процент. Владимир Путинға ышаныс тураһында тура һорауға респонденттарҙың 80,9 проценты (+1,1 процент) ыңғай яуап биргән, Михаил Мишустинға иһә 64,5 процент (0,5 процент) ышаныс белдергән.

✓Өфөлә Таһир Күсимов исемендәге башҡорт ирекле батальонын оҙатыу тантанаһы булды. Тантанала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты. Башҡортостандың яңы батальоны республиканың ирекле батальондарын ойоштороуҙың үҙәк штабында тупланған. Әйткәндәй, Таһир Күсимов исемендәге батальон - башҡорт мотоуҡсылар полкы составындағы икенсе подразделение һәм республикала ойошторолған бишенсе башҡорт батальоны.

✓Республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Фәрит Ғүмәров Башҡортостанда янғынға ҡаршы махсус режимды оҙайтырға тәҡдим итте. Ул махсус ҡарар булғансы дауам итәсәк. Комитет рәйесе белдереүенсә, уҙған аҙнала республиканың Белорет районында бер урман янғыны сыҡҡан. Ут ялмап алған майҙан 3,2 гектар тәшкил иткән. Бынан тыш, дөйөм алғанда 9,8 гектар майҙанда ҡоро үлән яныуҙың 14 осрағы теркәлгән.

✓ ***Баланың ҡулынан "һыйпафон"ын тартып алып, урынына китап тотторроу ҙа ыңғай һөҙөмтә бирмәйәсәк. Был осраҡта, киреһенсә, баланың күңелендә китапҡа ҡарата кире тойғолар ғына уянасаҡ.***



*САҠЫРЫУ*

# КИТАП БАЙРАМЫНА КИЛЕГЕҘ!

**26-28 майҙа Өфөлә беренсе тапҡыр Халыҡ-ара "Китап-байрам" китап йәрминкәһе уҙасаҡ, артабан ул йыл һайын үткәреләсәк. Был турала Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров "Арт-Ҡоролтай" III мәҙәни форумы барышында иғлан иткәйне. Йәрминкәне ойоштороу тәҡдиме менән Башҡортостан Яҙыусылар берлеге сығыш яһаған һәм уны бай йөкмәткеле итеүҙе һораған.**




Француз яҙыусыһы Фелиция Жанлистың "Киләсәктә китап уҡыусылар телевизор ҡараусылар менән идара итәсәк", тигән ҡанатлы һүҙҙәрен иҫкә төшөргәндә, күпкә һуңлап булһа ла, китапты иҫкә төшөрөүебеҙ һәр яҡлап маҡтауға лайыҡ. "Һуңлап булһа ла" тигән һүҙбәйләнеште юҡҡа ғына килтермәйем. Сөнки күптән инде кешенең иғтибары китаптан айырылып, телевизор экранына, компьютер мониторына, смартфон дисплейына йүнәлеп өлгөрҙө инде. Улай ғына ла түгел, кеше иғтибары һуңғы йылдарҙа китаптан ғына түгел, телевизор экранынан да айырыла бара. Тикшеренеүҙәр буйынса, хәҙер телевизорҙы күберәген "һыйпафон" менән эш итә белмәгән оло йәштәгеләр ҡарай.

Шулай итеп, үткән быуаттың аҙағында китапҡа иғтибарҙы ситкәрәк этәргән телевизор хәҙер килеп үҙе үк иғтибарҙан ситтәге китап хәленә тороп ҡала бара. Артабан компьютерҙар менән смартфондар ҙа китап һәм телевизор хәленә ҡалмаҫ тип кем әйтә ала! Аҡыллы баштар артабанғы аҙым ИИ-ға (яһалма интеллектҡа) табан яһаласаҡ, тип белдерә. Ярар, кешелек быға ла өлгәште икән ти, тик барыбер кеше зиһенен, тойғоһон, зауыҡын тәрбиәләүсе иң ябай ҡағыҙ китапты юҡһынмаҫ тип кем гарантия бирә ала?

Ошо урында шағир, яҙыусы Дамир Шәрәфетдиновтың "Бөйрәкәй" тигән фантастик хикәйәһе иҫкә төшә. Әҫәр "Шоңҡар" журналында донъя күргәйне. Бер заман ғалимдар һөт биреүсе робот һыйыр уйлап таба. Роботҡа бесән, ем, төрлөсә эшкәртелгән йәшел масса, һыу биреп торалар, уның яһалма ашҡаҙаны ризыҡты эшкәртеп, һөткә әйләндерә. Әммә йәмле яҙҙар еткәс, Бөйрәкәй үгеҙ эҙләп, ҡоролмаларҙы емереп, далаға сығып сапмаһынмы! Тәбиғәткә ҡаршы килеп булмай шул. "Атом заманында ла ат кәрәк" ти халыҡ мәҡәле. Кешелек ниндәй генә ИИ-ларға өлгәшмәһен, һәр ваҡытта ла китап кәрәк буласаҡ!

Шул уҡ ваҡытта баланың, үҫмерҙең ҡулынан "һыйпафон"ын тартып алып, урынына китап тотторроу ҙа ыңғай һөҙөмтә бирмәйәсәк. Был осраҡта, киреһенсә, баланың, үҫмерҙең күңелендә китапҡа ҡарата кире тойғолар ғына уянасаҡ. Бында берҙән-бер генә юл ҡалалыр: китаптың йөкмәткеһен "һыйпафон" эсенә индереү. Нимә тиһәр әле: "Әгәр ҙә Мөхәммәт тауға килмәһә, тау Мөхәммәткә бара".

Һуңғы йылдарҙа Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә башҡортса әҙәби китаптарҙың аҙ баҫылыуы хаҡында йыш һөйләнеү. Баҫылып сыҡҡан китаптарҙы һатыу мәсьәләһен дә нигеҙҙә хәл итеү күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә. Әгәр ҙә Халыҡ-ара "Китап-байрам" йәрминкәһе беҙҙә йыл һайын үткәрелә башлаһа, юғарыла атап киткән көнүҙәк мәсьәләләр ҙә ыңғай хәл ителер тигән өмөт уяна.

26-28 майҙа уҙасаҡ сара баш ҡаланың бер нисә майҙансығында - Совет майҙанында, республика Милли музейында, Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты биналарында, шулай уҡ нәшриәттең һәм уның магазиндарының күргәҙмә майҙансыҡтарында уҙасаҡ. Өс көн дауамында йәрминкә сиктәрендә төрлө йүнәлештәр буйынса китап сауҙа-күргәҙмәләре, оҫталыҡ дәрестәре, уҡыусылар конкурстары, моноспектаклдәр, иң яҡшы әҫәрҙәрҙе экранлаштырыу буласаҡ. Майҙансыҡтар 12.00 сәғәттән 22.00 сәғәткә ҡәҙәр эшләйәсәк. Китап байрамына рәхим итегеҙ!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? "Атайсал - кесе ватаным" проекты сиктәрендә ниндәй ғәмәлдәр башҡараһығыҙ?

***Зөлфирә ВӘЛИУЛЛИНА, Салауат районы Әлкә ауыл хакимиәтенең эштәр идарасыһы:***

"Атайсал - кесе ватаным" проекты беҙҙең төбәк халҡы - Салауат батырыбыҙ ерҙәштәре өсөн икеләтә мөһим әһәмиәткә эйә. Беҙ үҙебеҙҙең данлы азатлыҡ көрәшсеһе ерендә йәшәүебеҙ менән бәхетле, ләкин был ифрат яуаплы бурыс та ул. Салауат батыр төйәге һәр замандa ла өлгөлө ауылдары, таҙа, матур тәбиғәте, хеҙмәт һөйөүсе кешеләре менән данлыҡлы булырға тейеш. Беҙҙең Әлкә ауылы батырыбыҙ тыуған төйәккә терәлеп тигәндәй урынлашҡан. Тиҙҙән, Аллаһ бойорһа, Тәкәйҙә "Салауат ере" паркы - мемориаль паркы, музейы һәм "йәшел театры" булған тарихи-мемориаль комплекс ҡалҡып сығасаҡ. Ошо унайҙан беҙҙең ауылға ла асфальт юл түшәлер һәм тағы ҡайһы бер инфраструктура үҙгәрештәре, унайлыҡтары килер, транспорт мәсьәләһе яҡшырыр, тип өмөт итәбеҙ. Ә әлегә беҙ ситтән ярҙам көтөп ултыра торғандарҙан түгел, үҙ көсөбөҙ менән берәй проект өсөн тиҙ генә аҡса йыйып, атайсалыбыҙҙы йәштәргә, матурларға, йәштәрҙе, балаларҙы илһөйәрлек рухында тәрбиәләргә бөтөн көсөбөҙҙө биреп эшләйбеҙ һәм йәшәйбеҙ.

Әйтеүемсә, беҙҙең яҡтарға ситтән туристар ҙа күп килә, шуға ла беҙ дөйөм көс менән ауылыбыҙҙа этномузей төҙөнөк. Ләлә апай Кәримова бының өсөн үҙенең өйөн биреп ҡуйҙы, ауыл халҡы бергәләшеп, өйҙө һипләп, мейесен яңыртып, экспозициялар өсөн кәштәләр, махсус урындар эшләп, боронғо әйберҙәрҙе туплай ҙа башланыҡ. Был эштә бөтөн ауыл халҡы берҙәм ҡатнашты, шул иҫәптән ағинәйҙәр айырыуса тырышлыҡ күрһәтте. Барлығы 300-ҙән ашыу экспонат тупланды. Мәктәп уҡыусылары өсөн был музей ысын мәғәнәһендә тарих һөйләүсе әсбапҡа әйләнде, тиергә лә була.

Тағы ла бер музей астыҡ Әлкәлә. Мәшһүр ауылдашыбыҙ, боронғо башҡорт музыка ҡоралдарын тергеҙеүсе оҫта, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Вәкил ағай Шоғайыповтың музейы эшләй башланы. Был хаҡта быйыл 14 февралдә Әлкә ауыл хакимиәтендә "Яҡташлыҡ - изге эштәр хаҡына" тигән девиз менән үткәрелгән төбәк-ара форумда ҡарар сығарылғайны. Ауыл хакимиәте бының өсөн үҙ бинаһынан бер бүлмә бирҙе, оҫтаның улы Әли Вәкил улы Шоғайыпов атаһының шәхси әйберҙәрен, үҙ ҡулдары менән яһаған музыка ҡоралдары: ҡурай, ҡумыҙ, думбыра һәм башҡа экспонаттар тапшырҙы.

Ҡыҫҡаһы, "Атайсал - кесе ватаным" проекты иғлан ителгәндән алып, Әлкә ауыл хакимиәте буйынса 40-тан ашыу проект теркәлде һәм улар бойомға ашырыла килә. Яҡташыбыҙ Франгиза Илбәкова башланғысы менән Юлай ауылында мәсет төҙөлдә, Иҙристә шулай уҡ дөйөм көс менән зыярат кәртәләп алынды. Әлкәнән хәрби хәрәкәт ветераны Владик Шәмсетдинов үҙе генә лә 9 проект авторы. Шуларҙың береһе - Хәрби хәрәкәт ветерандары иҫтәлегенә стела.

**Яҡташлыҡ ярҙамы һәйбәт, әлбиттә, ләкин был ерҙә беҙ йәшәйбеҙ, шуға ла атайсалыбыҙҙы хәстәрләү өҙөк-нурыҡ ярҙам күрһәтеүҙәргә ымһынып торорға тейеш түгелдер. Бында беҙ хужа, шуға ла тыуған төйәгебеҙҙе үҙ ҡулдарыбыҙ, үҙ көсөбөҙ менән матурларға, төҙөкләндерергә, тәбиғәтебеҙҙе һаҡлап-хәстәрләп йәшәргә, балаларыбыҙҙы ла шуға өйрәтергә тейешбеҙ, тип уйлайым.**

Фәүзиә **МӨХӘМӘТШИНА** яҙып алды.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса, Башҡортостандың рәсми делегацияһы Ҡаҙағстанға Kazakhstan Machinery Fair машина эшләү һәм металл эшкәртеү буйынса халыҡ-ара махсуслаштырылған күргәҙмәгә барҙы. Ҡаҙағстан яғы Башҡортостанға тармаҡтар буйынса бизнес-миссияны әүҙемләштерергә тәҡдим итте. Һөҙөмтәлә ағымдағы йылдың сентябренә тиклем өс бизнес-миссия үткәреү тураһында ҡарар ҡабул ителгән.

✓Радий Хәбиров Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Граждандарҙың йәшәү сифатын күтәреү мәсьәләләре буйынса совет составына үҙгәрештәр индергән указға ҡул ҡуйҙы. Советҡа Республика йәмғәт сәләмәтлеге һәм медицина профилактикаһы үҙәгенең баш табибы Алиса Мамаева, Башҡортостандың Сауҙа-сәнәғәт палатаһы президенты Тимур Хәкимов һәм Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Биохимия һәм генетика институты директоры Эльза Хөснөтдинова инде.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин федераль судьялар тәғәйенләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Раил Шәйҙуллин Башҡортостандың Юғары суды рәйесе итеп тәғәйенләнде. Айҙар Хәйруллин - Илеш районы суды, Фәрғәт Хәлитов - Күмертау район-ара суды рәйесе. Юғары суд судьялары вазифаһын Галина Ғиндуллина, Ирина Маркелова һәм Людмила Решетникова алды. Хәйҙәр Әхмәтғәлин - Бәләбәй ҡала суды, Яна Иткулова - Янаул район-ара суды, Эльвира Вәхитова, Ольга Лаврентьева - Өфө ҡалаһының Киров районы, Зарина Усманова Стәрлетамаҡ ҡала суды судьялары итеп тәғәйенләнде.

✓Башҡортостанда "Туризм өсөн ер" дәүләт реестры проектына индерелгән өс туристик объект билдәләнде. Был хаҡта социаль селтәрҙә республика Премьер-министры Андрей Назаров хәбәр итте. "Һүҙ Күмертауҙағы карьер, Ағиҙел йылғаһы (Өфө янында) һәм Баймаҡ районындағы Талҡаҫ күле тураһында бара. Бынан тыш, был маҡсаттарҙа объекттарға яҡын буш урындарҙы ла файҙаланырға мөмкин", - тип яҙа ул.

✓Башҡортостанда "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы дауам итә. Был аҙнала күсмә бригадалар эшен Шишмә, Архангел, Ҡариҙел, Аҫҡын, Стәрлетамаҡ, Дыуан, Шаран һәм Учалы райондарында дауам итте. Күсмә бригадаларҙа Республика клиник дауаханаһының, республика кардиология үҙәгенең медицина модулдәре, күсмә комплекстар һәм медицина ойошмаларының фельдшер-акушерлыҡ пункттары эшләй.

✓ "Йоғошло сирҙең беҙҙең республика биләмәһенә үтеп инеү ихтималлығы ҙур", - тип белдерҙеләр республиканың ветеринария идаралығында. Белгестәр әйтеүенсә, ауырыу бик тиҙ тарала.



ҠЫҪҠАСА

# ТӨП ХӘСТӘРЛЕК...

**Башҡортостан Башлығы махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаиләләре тураһында хәстәрлек күреүҙе мөһим бурыс тип билдәләне.** Уҙған йылдан республика Хөкүмәте федераль кимәлдәгеләргә өҫтәп 33 ярҙам сараһын индерҙе, тине Радий Хәбиров Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 78 йыллығына арналған тантаналы йыйылышта. "Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам итеү өсөн "Башҡортостан" республика үҙәге эшләй башланы. Стәрлетамаҡ, Сибай, Нефтекама ҡалаларында ла ошондай үҙәктәр асылды. Оҙаҡламай Өфөлә асырға йыйынабыҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Ул шулай уҡ Еңеү көнө алдынан махсус хәрби операция зонаһына барып ҡайтыуы хаҡында һөйләне, яугирҙарҙан республика халҡына ҡайнар сәләм еткерҙе. Республика етәксеһе махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға, көс структуралары вәкилдәренә генерал Шайморатов ордендарын һәм миҙалдарын тапшырҙы.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә муниципалитет башлыҡтарын үҙ биләмәләрендә тәртип урынлаштырырға ҡушты.** "Минә халыҡты борсоған проблемалар хаҡында даими рәүештә еткереп торалар. Шуныһы ғәжәп: мөрәжәғәттәрҙең күбеһе биләмәләрҙе таҙартыуға бәйле, ҡайҙалыр һыныл төшкән бораҡтар ята, ҡайҙалыр сүп-сарҙы йыймайҙар. Быны күҙәтеп барыуығыҙҙы һорайым. Башҡортостан - таҙа республика, беҙҙең мәҙәнилек юғары, беҙ шул йүнәлештә эшләйбеҙ. Һеҙҙең бурыс - биләмәләрҙе тәртиптә тотоу", - тине ул ҡала һәм район башлыҡтарына мөрәжәғәт итеп. Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, киләһе аҙнанан контроль төркөм биләмәләрҙе тикшереү менән сыға. "Күсмә төркөмдөң эш йомғаҡтары буйынса иң сағыу һүрәттәрҙе ВКС-та күрһәтербеҙ", - тип иҫкәртте республика етәксеһе.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Таһир Күсимов исемендәге бишенсе ирекмәндәр батальонын хәрби әҙерлек үтеү урынына оҙатыу сараһында республиканың әле төҙөлә башлаған ирекле мотоуксылар полкын "Башҡортостан" тип атарға тәҡдим итте.** "Республикабыҙ исеменән һеҙҙең ҡарарығыҙға тәрән ихтирамымды һәм рәхмәт һүҙҙәрен еткерергә теләйем. Был бик ҡатмарлы, әммә бик ҡыйыу һәм илебеҙгә кәрәкле аҙым. Тотош республика менән ошо ҡарарығыҙҙы хуплап һәм аңлап ҡабул иткән туғандарығыҙ, яҡындарығыҙ алдында баш эйәбеҙ, рәхмәт белдерәбеҙ. Мобилизацияланғандар, Рәсәйҙең Оборона министрлығы һәм дүрт батальон яугирҙары һәр саҡ иғтибар үҙәгендә, беҙ туғандарығыҙ, яҡындарығыҙ, атаәсәләрегеҙ, хәләл ефеттәрегеҙ һәм балаларығыҙ хаҡында ла хәстәрлек күрербеҙ. Иң мөһиме, иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуығыҙҙы һорайым. Эшләгеҙ, туғандар", - тип мөрәжәғәт итте Радий Хәбиров хәрбиҙәргә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## КАМИЛЛАШТЫРА

**Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институтының 90 йыллығы айҡанлы ойошторолған байрам сараһы Өфөнөң "Торатау" Конгресс-холында үтте.**

Туҡһан йыл элек, 1933 йылда, республикабыҙҙың мәғариф өлкәһендә иҫтәлекле ваҡиға була: уҡытыусыларҙың һөнәри белемен һәм педагогик мәҙәниәтен камиллаштыра торған уҡыу йорто - халыҡ мәғарифы кадрҙарының квалификацияһын үҫтереү институты айырым берәмеккә әйләнә. Бына нисә йылдар инде бай тарихлы институт республиканың белем биреү өлкәһендә төп көс, алдынғы ойоштороу, методик һәм фәнни үҙәк булып һанала. Ул белем биреүҙең иң яҡшы традицияларын дауам итеп, заман менән бергә атлап, яңылыҡтарҙы яҡшы үҙләштереп кенә ҡалмай, ә ошо өлкәлә заман килтереп ҡуйған ҡатмарлы бурыстарҙы, һәр төрлө мәсьәләләрҙе хәл итә.

Дәүләт Думаһы депутаты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова әлеге көндә бындай учреждениеларҙың илдең бөтә төбәктәрендә лә булмауы, әммә Башҡортостанда уны һаҡлап алып ҡалыуға өлгәшеүҙәрен айырым билдәләп китте. "Рәсәйҙәге иң ҙур белем биреү системаһының береһен методик яҡтан хәстәрләү - мөһим стратегик бурыс, һәм һеҙ уны уңышлы атҡараһығыҙ", - тине ул һәм институт коллективына рәхмәт белдерҙе. Тантанаға килгән башҡа мәртәбәле ҡунаҡтар ҙа институт коллективына ҙур юбилейы айҡанлы ҡотлау-теләктәрен еткерҙе. Институт директоры Азат Йәнгировты фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн педуниверситет ректоры Салауат Сәғитов Сухомлинский исемендәге миҙал менән бүләкләне. Ғалим-методистар Мөнирә Абдуллина, Наилә Исҡужина, Зөбәржәт Шәйхисламова, Эльвира Рәхимова, Роза Аҡъюлова һәм башҡалар юғары исемдәргә, төрлө маҡтау грамоталарына эйә булды.

## ҠЫҘЫҠҺЫНДЫРАЛАР

**25-27 майҙа Сибайҙа "Урал арьяғы" V Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйында Башҡортостандың Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығы 2 миллиард һумдан ашыу суммаға хеҙмәттәшлек тураһында 7 килешеүгә ҡул ҡуйырға йыйына. Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итә.**

"Документтар юл буйы сервисын, шулай уҡ тиҙ хеҙмәтләндереүсе йәмәғәт туҡланыуы предприятиелары селтәрен үҫтереү өлкәһендәге хеҙмәттәшлеккә ҡағыла. Нуғай ауылы эргәһендәге "Өфө - Охлебинин" автомобиль юлы буйында комплекс төҙөү тураһында килешеүҙе иң күләмлеһе тип иҫәпләргә мөмкин. Инвестор проектҡа 254 миллион һум аҡса бүлергә ниәтләй", - тине Башҡортостандың сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Алексей Гусев.

Бынан тыш, инвестиция һабантуйында министрлыҡ "Етештереүселәр һәм ритейл. Көштәгә сығарыу" темаһына түңәрәк өҫтәл үткәрә. Унда урындағы етештереүселәрҙең тауарҙарын һатыу өсөн инфраструктура булдырыу мәсьәләләре тикшерелә. Федераль һәм төбәк селтәрҙәренең Башҡортостан етештереүселәренә ҡыҙыҡһыныуы арта, ә тегеләр уларға лайыҡлы тәҡдим тәҡдим төҙөргә әҙер. Инвестиция һабантуйында ҡатнашыусыларҙың эшлекле мәсьәләләрҙе тикшереүҙән тыш, республиканың мәҙәни һәм гастрономик традициялары менән танышыу мөмкинлеге бар. Бынан алдараҡ "Урал арьяғы" инвестиция һабантуйы барышында бизнес-шерифтарҙың төбәк-ара форумы ойошторолаһағы ла хәбәр ителгәйне.

## ТАҒЫ ҠОШ КИҘЕҮЕ



**Рәсәйҙә юғары патогенлы ҡош киҙеүе буйынса эпизоотик хәл ҡатмарлаша, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан ветеринария идаралығының матбуғат хеҙмәтенән.**

"Быйыл май башынан Волга буйы федераль округындағы 16 сығанаҡта ҡырағай ҡоштарҙың (аҡсарлаҡтарҙы) киҙеү менән сирләүе асыҡланған. Марий Эл һәм Удмурт республикаларының һыу яҡтылыҡтарында - дүртешәр, Киров өлкәһендә һигеҙ сығанаҡ табылған. Йоғошло сирҙең беҙҙең республика биләмәһенә үтеп инеү ихтималлығы ҙур", - тип белдерҙеләр республиканың ветеринария идаралығында. Белгестәр әйтеүенсә, ауырыу бик тиҙ тарала, 100 процент үлем осрағына, шулай уҡ агросәнәғәт комплексында ҙур иҡтисади зыян килтерергә һәләтле. Ҡош киҙеүен Башҡортостандың ҡошсолоҡ хужалыҡтарына индермәү өсөн барлыҡ сараларҙы күрергә кәрәк. "Ҡош-ҡортоғоҙ ҡырыла башлаһа йәки инфекцияға шик булһа, тиҙ арала дәүләт ветеринария хеҙмәтенә йәки 8-800-77-55-828 номерына (ҡыҙыу бәйләнеш) шылтыратығыҙ. Беҙҙең ветеринария лабораторияларында материалдарҙы тикшереүгә ҡабул итәләр", - тип өҫтәнеләр Башҡортостандың ветеринария идаралығында.

## ЯҢЫ БАЙРАМ



**БР Дәүләт Йыйылышы депутаттары яңы байрам булдырҙы - 25 майҙа республикала Төньяҡ юнгаларын иҫкә алыу көнө билдәләнә.**

Республика парламентының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, был дата яҡташтарыбыҙҙың - Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙе яҡынайтыуға тос өлөш индергән Соловецк юнга мәктәбен тамамлаусыларҙың хәтерен мәңгеләштерә. 1942 йылдың 25 майында СССР Хәрби-диңгеҙ флотының халыҡ комиссариаты бойороғо менән Соловецк юнга мәктәбе - Хәрби-диңгеҙ флоты өсөн квалификациялы белгестәр әҙерләнгән уникаль уҡыу йорто асыла. "Мәктәптә 4111 үсмер әҙерлек үткән, уларҙың 143-ө - беҙҙең республиканан, - тип билдәләне Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Соловецк мәктәбен тамамлаусылар Еңеү эшенә тос өлөш индергән. Мәктәптең күп кенә тәрбиләнеүселәре күрһәткән батырлығы өсөн дәүләт наградалары менән билдәләнгән. Башҡортостанда геройҙарҙы онотмайҙар. Өфөнөң "Беренсе май " паркында Соловки юнгалары аллеяһы бар. 1980 йылдарҙа элекке юнгаларҙың инициативаһы төркөмө менән Өфөнөң 106-сы мәктәбе етәкселеге булышлығында уларға арналған музей асылған, һуңынан ул контр-адмирал Михаил Бакаев исемендәге Өфө ҡала балалар диңгеҙ үҙәгенә тапшырылған".

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Әлеге көндә Өфө үҙәгендә төҙөлгән Башҡортостандың вуз-ара кампусында төбәктең иң алдынғы лабораториялары һәм үҙәктәре урынлашасаҡ. Уларҙың береһе Өфө дәүләт нефть техник университетының реверсия инжиниринғы үҙәге буласаҡ. Уның төп маҡсаты - предприятиеларҙы запас частар һәм деталдәр менән тәьмин итеү. Реверсия инжинирингын үҙләштергән предприятиелар Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта урынлашҡан, төбәктәрҙә улар юҡ. Шуға ла был үҙәк һорау менән файҙаланасаҡ.

✓Рәсәй Гидрометүҙәге мәғлүмәттәре буйынса, июндә Башҡортостанда уртаса температура күп йыллыҡ күрһәткестәргә ярашлы +16, +18 градус була. Шулай уҡ синоптиктар 50-70 миллиметр яуым-төшөм тип фаразлай. Өфөлә һауа температураһының төндә +11,2, көндөҙ иһә 23,8 градус. Июндә Башҡортостандың баш ҡалаһында 61 миллиметр яуым-төшөм көтөлә. Уртаса алғанда, июндә Башҡортостанда 11 ямғырлы, 10 аяҙ, 8 аяҙлы-болотло һәм 1 болотло көн күҙәтелә.

✓Ял көндәрендә ойошторолған рейдтар барышында Дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре хоҡуҡ боҙоусыларға биш мендән ашыу административ материал төҙөгән. Шул иҫәптән 197 тапҡыр юлдың ҡаршы һыҙатына сығыу факты теркәлгән. 105 водитель балаларын хәүеф аҫтына ҡуйған - уларҙы креслоһыҙ йөрөткән. 143 иҫерек водитель транспорт саралары менән идара итеүҙән ситләтелгән.

✓Федераль һауа транспорты агентлығы авиакомпанияларға халыҡ-ара һауа аша йөк һәм пассажирҙар ташыуға рөхсәт биреү тураһында бойороҡ сығарҙы. Атап әйткәндә, "Ред Вингс" авиакомпанияһы аҙнаһына өс тапҡыр Өфөнән Тегеранға рейстар башҡарыуға рөхсәт алды. Ошо уҡ авиакомпания Башҡортостандың баш ҡалаһынан Матталаға (Шри-Ланка), ә "Азур-Эйр" Өфөнән Шри-Ланканың рәсми булмаған баш ҡалаһы Коломбоға осош яһай.

✓20 майҙа Өфөлә унынсы "Йәшел марафон" ойошторола. Старт "Башҡортостан" лайфстайл үҙәге майҙанынан (Менделеев урамы, 205А) иртәнге сәғәт 10-да башлана. Балалар араһында иң етеҙҙәре билдәләнә, ә көндөҙгө сәғәт 12-лә 4,2 саҡрымға күмәк старт башлана. "Йәшел марафон" Рәсәйҙең 180 ҡалаһында үткәрелә. Өфөлә иһә был сарала йыл һайын 7 мендән ашыу кеше ҡатнаша. Ярышта һәр кем ҡатнаша ала, ләкин табиптың рөхсәте кәрәк.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

КӨНАУАЗ

**Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин 9-сы һәм 11-се класс уҡыусыларын көткән имтихандарҙың үҙенсәлеге тураһында һөйләне. "2023 йылда дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын уҙғарыуҙың ойоштороу-технологик тәьминәте һөҙөмтәлелеген арттырыу буйынса республика тарафынан ҡабул ителгән барлыҡ сараларҙы һәм санитар-эпидемиологик ҡағиҙәләрҙе күҙ уңында тотоп, имтихандарҙы штаттағы режимда уҙғарыу ҡарала, бының өсөн барлыҡ шарттар тыуҙырылған", - тип билдәләне министр.**

# ИМТИХАНДАР, ИМТИХАНДАР...




### БДИ-2023

Быйыл Берҙәм дәүләт имтиханының төп осоро 26 майҙан башлана. Ул география, әҙәбиәт һәм химия буйынса һынауҙар менән асыла. Тәүге мотлаҡ тапшырыла торған предмет - рус теле буйынса уҡыусылар 29 майҙа һынау тотасаҡ. БДИ-ның икенсе мотлаҡ предметынан, нигеҙ һәм профилле математиканан имтихан 1 июндә үтә. Рус теленән имтихан 3,5 сәғәт, профиль математиканан - 3 сәғәт 55 минут, нигеҙ математиканан - 3 сәғәт дауамында барасаҡ. Тарих һәм физика буйынса имтихандар 5 июндә, йәмғиәтте өйрәнеү - 8 июнь, биология һәм сит телдәрҙең яҙма өлөшө буйынса - 13 июнь көнө уҙғарыла. Ғәҙәттәгесә, информатика һәм ИКТ, шулай уҡ сит телдәрҙең "Һөйләү" өлөшө буйынса һынауҙарға икешәр көн бирелә. БДИ-ның сит телдәрҙән "Һөйләү" өлөшө 16 һәм 17 июндә, информатика һәм ИКТ - 19 һәм 20 июндә үтә. Былтырғы кеүек үк, ун беренсе синыф уҡыусыларына ҡулдарына аттестат алыу өсөн 2 мотлаҡ предмет буйынса имтихан тапшырыу ҙа етә.

БДИ тапшырыусылар араһында иң популяр предметтар профиль математика һәм йәмғиәтте өйрәнеү. Шулай уҡ информатика һәм ИКТ, биология, физика, химия һәм тарих күптәрҙә ҡыҙыҡһындыра. Айбулат Хажин әйтеүенсә, быйыл республикала урта дөйөм белем биреү программалары буйынса дәүләт имтихандарында (11-се кластар) 16183 кеше ҡатнашырға теләк белдергән. Шулар араһында быйыл уҡыуҙы тамамлаусылар - 15020, алдағы йылдарҙа уҡып бөткәндәр - 1017, колледж студенттары - 132 һәм 10 унынсы класс уҡыусыһы, 20 үткән йылдарҙа дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын тамамлап бөтмәгән, 1 сит ил гражданы. Донецк һәм Луганск халыҡ республикаларынан Башҡортостанға күсеп килгән өс 11-се класс уҡыусыһы һәм ете 9-сы класс уҡыусыһы өсөн дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы теләк буйынса аралаш аттестация формаһында уҙғарылаҫаҡ. 2023 йылда барлығы 157 БДИ ҡабул итеү урыны әҙерләнгән.

### ТДИ-2023

9-сы класты тамамлаусылар 24 майҙан уҡ Төп дәүләт имтихандары тапшыра башлаясаҡ. Имтихандар ғәҙәттәгесә уҙғарыла, йәғни уҡыусыларға аттестат алыу өсөн 4 имтихан тапшырыу кәрәк: рус теле, математика һәм үҙе һайлаған ике предмет буйынса. Дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын тапшырырға теләгән 42411 уҡыусы теркәлеү үткән, шулар араһынан Төп дәүләт имтиханын 39226 уҡыусы бирәсәк, ә ҡалғандар дәүләт сығарылыш имтиханы һынауҙарын үтә. Төп дәүләт имтиханында йәмғиәтте өйрәнеүҙе уҡыусыларҙың 47 проценты, информатиканы - 42, географияны - 32, биологияны - 19, физиканы - 11, химияны - 9,9, тарихты 2,7 проценты һайлаған. 9-сы кластар өсөн дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын уҙғарыу маҡсатында барлығы 391 имтихан ҡабул итеү урыны әҙерләнгән.

### БДИ-2023 яңылыҡтары

Буласаҡ имтихан кампанияһының яңылығы - имтихандар тапшырыу пункттарына дискыларҙа тикшереү-үлсәү материалдарын тапшырыуҙан баш тартыу. Быйылдан башлап барлыҡ имтихан материалдары имтихан тапшырыу урындарына Тест буйынса һынау федераль үҙәгенән һаҡланған бәйләнеш каналдары буйынса имтихан көнөндә ебәреләсәк. "Был мәғлүмәттәрҙе интернет селтәренә эләгеүҙән һаҡлаясаҡ", - тип билдәләне Айбулат Хажин. Ул шулай уҡ имтихандар барышын контролдә тотоу өсөн республикала 100 урынлыҡ өс ситуация үҙәге эше ойоштороулоуы, 300-ҙән ашыу йәмәғәт онлайн-күҙәтеүсеһе уҡытылыуы, 1500 мең тирәһе кеше аккредитация үтеүен телгә алды.

### Имтихандарға үҙең менән нимә алырға ярай һәм ярамай

БДИ тапшырғанда үҙең менән мотлаҡ алырға кәрәк әйберҙәр исемлегенә ҡара төҫлө ҡараламалы ручка һәм паспорт ҡына инә. Шулай уҡ ярлыҡһыҙ шешәләге һыу, тәғәмләп алырға ризыҡ - мәсәлән, шоколад алырға мөмкин. Һаулыҡҡа кәрәкле дарыуҙарҙы үҙең менән алыу ҙа рөхсәт ителә. География, химия, физика буйынса имтихан тапшырғанда калькулятор, математика, география һәм физикаға - линейка индерергә була. Дәүләт имтихандарына уҡыусыларға үҙе менән ниндәй ҙә булһа ҡағыҙға яҙылған иҫкәрмәләр, смартфондар, фото-, аудио- һәм видеоаппаратура, флешка, белешмәләр һәм китаптар, шулай уҡ программалап булған калькуляторҙар алыу тыйыла. Шулай уҡ БДИ тапшырыған осорҙа урындан урынға күсеп ултырыу, башҡа ҡатнашыусылар менән аралашыу рөхсәт ителмәй.

### БДИ һөҙөмтәләрен ҡайҙан белергә?

Башҡортостанда Мәғлүмәтте эшкәртеү төбәк үҙәге тарафынан федераль системаға өҫкәтеп эшләнгән ГИА-11 һөҙөмтәләре менән танышыу мәғлүмәти сервисы бар. Сервистың ҡулланыусылары үҙенең имтихан эштәре өлгөләрен БДИ тапшырған йылда ғына түгел, унан һуң тағы 4 йыл дауамында асып ҡарай ала. Бынан тыш, ГИА-11 сервисы дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы-11 һөҙөмтәләре менән риза булмаған осраҡта шәхси кабинет аша электрон форматта апелляция йүнәлтеү мөмкинлеген дә бирә. Апелляцияларҙы ҡарау һәм республика конфликт комиссияһы ағзалары эшмәкәрлеге БДИ ҡатнашыусылары менән дистанцион бәйләнеш булдырып уҙғарыла.

### Сығарылыш кисәләре ҡасан үтә?

Сығарылыш уҡыусылары өсөн Һуңғы ҡыңғырауҙар быйыл 22 йәки 23 май көндәрендә яңғыраясаҡ. Туғыҙынсы класс уҡыусыларына аттестаттар тапшырыу тантанаһы 23 июнгә, ун беренсе синыфтарға - 24 июнгә тәғәйенләнгән.

### Бюджет урындар

2023 йылда төбәк вуздары абитуриенттарына 13541 бюджет урын бүленгән. Тимәк, республиканың 11-се класс уҡыусыларының 90 проценты бюджет урынға дәғүә итә ала. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, былтыр Башҡортостандың юғары уҡыу йорттары өҫтәлмә квоталарҙы иҫәпләмәгәндә 13465 абитуриент ҡабул итте.

### 100 балл йыйыусыларға түләүҙәр

Республика Башлығы Радий Хәбиров указына ярашлы, 2021 йылдан Башҡортостанда Берҙәм дәүләт имтихандарында 100 балл йыйыуға өлгәшкән һәм донъя кимәлендәге Евразия фәнни-мәғариф үҙәге ҡатнашыусыһы булған республика вуздарына уҡырға ингәндәргә 150 мең һум күләмендә премия түләнә. 2022 йылда бындай түләүҙәрҙе 25 сығарылыш уҡыусыһы алған. БДИ һөҙөмтәләре буйынса 100 балл алған уҡыусыларҙы әҙерләгән уҡытыусыларға ла 50 мең һум күләмендә премия түләнә. 2022 йылда бындай өҫтәлмә аҡсаны 65 уҡытыусы алған.

Сығарылыш уҡыусыларының дәүләт аттестацияларына ҡағылышлы барлыҡ һорауҙар буйынса ҡыҙыу линия: +7 (347) 218-03-81 һәм 218-03-28 (эш ваҡыты - иртәнге 9-ҙан киске 6-ға тиклем).

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Күҙ ҡабағы

❖ Күҙ ҡабағына дауалы крем әҙерләү өсөн ниндәй ҙә булһа 25 грамм майлы крем йәки аҡ майға ромашка менән йүкә сәскәһенең 10-ар мл һыуҙағы төнәтмәһе менән 5 мл кастор майы ҡушып, яҡшы иҙергә. Ромашка һәм йүкә сәскәһе төнәтмәләренә сылатылған мамыҡ тампон менән иртәле-кисле еңелсә генә һуҡҡылап һөртөргә. Кремды һыуытҡыста һаҡларға.

❖ 1 ҡалаҡ ланолин, 1,5 ҡалаҡ миндаль майы, 1 балғалаҡ лецитин онтағы, 2 ҡалаҡ һыуыҡ һыу алып, күҙ ҡабағын дымландырыусы крем яһарға мөмкин. Ланолинды һыу парында иретеп, миндаль майын ҡушырға. Утын һүндереп, әҙләп кенә лецитин, шунан тамсылатып һыуыҡ һыу өҫтәргә. Кремды ағас ҡалаҡ менән болғатырға. Ҡулланырҙан алда аллергияға тикшереп ҡарарға.

### Ҡан тамыры

❖ Веналарҙың варикозлы киңәйеүе осрағында ауырыу зарарлаған бөтә урындарҙы иртәле-кисле алма һеркәһе менән ыуырға кәрәк. Бер үк ваҡытта алма һеркәһен көнөнә 2-3 стакан эсергә: 1 стакан һыуға 2 балғалаҡ ҡушырға.

❖ Аяҡтарҙың шешенеүен, һыҙланыуын баҫыр өсөн 200 мл зәйтүн майы, 100 грамм бал ҡорто балауыҙы, 100 грамм ылыҫлы ағастарҙың (ҡарағай, шыршы, кедр) ыҫмалаһын алып, кәстрүлгә һалырға һәм һыу парында 10 минут ҡайнатырға. Ыҫмала кипкән булһа, онтаҡларға. Шунан 2 ҡалаҡ бал ҡушырға һәм тағы ла 10 минут ҡайнатырға. 1-2 грамм прополис өҫтәп, болғата-болғата тағы 10 минут ҡайнатырға. Утын һүндереп, һыуытырға һәм быяла һауытҡа ҡойоп алырға. Уны һыуытҡыста һаҡларға. Веналар шешенеп торған урындарға йәлләмәй һөртөргә.

### Һырҙар

❖ 3 лимон ҡабығын ваҡлап, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 8-10 сәғәт төнәтергә һәм марля аша һығып алырға. Шуға 1-әр балғалаҡ бал һәм үҫемлек майы, 3 лимон һуты, 2 ҡалаҡ һөт өҫтө йәки һөт, 3 ҡалаҡ одеколон, ярты стакан алдан әҙерләп һыуытылған рауза, йәсмин, аҡ ләлә төнәтмәһе ҡушырға. Кремды һыуытҡыста һаҡларға. Олоғайыуҙан һырланған тирене яҙыу өсөн файҙалы.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Мулдаҡай ауылы. Оҙонлоғо 34 см, өҫкө киңлеге 26 см, аҫҡы киңлеге 38 см, ауырлығы 1166,0 г. Биҙәүестә барлығы 264 элемент. Шуларҙың 136-һы - көмөш.



**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны билдәһеҙ. Оҙонлоғо 37 см, өҫкө киңлеге 22 см, аҫҡы киңлеге 32 см. Биҙәүестә барлығы 276 элемент. Шуларҙың 97-һе - көмөш.



**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны билдәһеҙ. Оҙонлоғо 42 см, өҫкө киңлеге 19 см, аҫҡы киңлеге 29 см, ауырлығы 1439,2г. Биҙәүестә барлығы 313 элемент. Шуларҙың 12-һе - көмөш.



**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

АЛДАЙҘАР!

# МУТЛАШЫУСЫ ТОҘАҒЫНА ҠАПМА!




**Башҡортостан Республикаһы буйынса Милли банк белгестәре кибермутлашыусыларҙың аҡса урлау маҡсатында нисек эш итеүе хаҡында таныштыра. Мутлашыусы тоҙағына ҡапмаҫ өсөн, быны белеп ҡуйыу кәрәк.**

QR-код һорайҙар - банк хеҙмәткәрҙәре исеменән шылтыраталар һәм иҫәптән рөхсәтһеҙ аҡса алырға запрос килеүе тураһында хәбәр итәләр. Операцияны кире ҡағыу өсөн QR-код ебәреүегеҙҙе һорайҙар. Кодты белгәндән һуң, алданған клиенттың аҡсаһын банкоматтан алалар. Шуға күрә, иҫегеҙҙә тотоғоҙ, бер кемгә лә QR-кодты әйтергә ярамай.

Эш биреүсе исеменән шылтыраталар - ылыҡтырғыс эш шарттары: юғары эш хаҡы, тулы булмаған эш көнө тәҡдим итеп, электрон почтаға хат ебәрәләр. Банк картаһы мәғлүмәттәрен, телефон номерын һорауҙары ихтимал. Һуңынан, йәнәһе лә, аккаунтты теркәү һәм әүҙемләштереү өсөн иғәнә индереүҙе һорайҙар. Алдан түләү индерергә мәжбүр итеп, эш тәҡдим иткән хаттарға ышанмағыҙ.

Хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре исеменән эш итәләр. Ялған полиция банкы мәғлүмәттәренең күпләп ситкә китеүе тураһындағы эште тикшереүен хәбәр итә һәм ундағы мәғлүмәттәрҙе урланғандары менән сағыштырырға тәҡдим итә. Белеп ҡуйығыҙ: банк хеҙмәткәрҙәре лә, хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре лә бер ваҡытта ла банк картаһы мәғлүмәттәрен һорай алмай. Был мәғлүмәттәр мутлашыусыларға кәрәк.

Рәсәй банкыһы йәки Үҙәк банк хеҙмәткәрҙәре исеменән эш итәләр - төүҙә иҫәп йәки карта буйынса шикле операциялар алып барыуҙары тураһында хәбәр итәләр, артабан үҙ ғәмәлдәренең дөрөҫлөгөнә ышандырыу һәм иҫәптән аҡса алыу йәки кредит юллау өсөн ялған таныҡлыҡ ебәрәләр. Ошондай шылтыратыу булған икән, артабан нимә эшләргә? Һөйләшеүҙе шунда уҡ өҙөгөҙ. Рәсәй банкыһы клиенттар менән эшләгән кеүек физик берәмектәр менән эш итмәй, уларҙың иҫәбен ҡарамай, уларға шылтыратмай, ә хеҙмәткәрҙәре бер кемгә лә документтарының фотоһын ебәрмәй.

Кәрәҙле элемтә операторы исеменән шылтыратып, тиҙҙән абонент номерының эшләүҙән туктаясағы тураһында хәбәр итәләр. Һүндермәһендәр өсөн мобиль телефонда һандар комбинацияһын йыйырға ҡушалар. Һөҙөмтәлә абонент шылтыратыуҙарҙың һәм текст хәбәрҙәренең, шул иҫәптән банктан килгән СМС-кодтарҙың адресын мутлашыусыларҙың номерына күсерә. Был уларға банк иҫәбе менән дистанцион идара итеүгә юл аса һәм аҡса урларға мөмкинлек бирә. Нимә эшләргә? Әңгәмәне шунда уҡ туктатығыҙ. Әгәр һеҙ аралашыуҙы дауам итһәгеҙ һәм шәхси кабинеттан СМС-код килһә, уны бер кемгә лә әйтмәгеҙ.

Мутлашыусылар, йәнәһе лә, урланған аҡсаны зыян күреүсегә кире ҡайтарыу маҡсатында махсус сайттар булдыра. Уларҙың һылтанмаларын мессенджерҙар, СМС аша йәки электрон почта аша ебәрәләр. Ҡайны берҙә урланған аҡса өсөн компенсация юллау тәҡдиме менән шылтыратып, йәнәһе, кире ҡайтарыласаҡ сумманы тикшереү һәм уны рәсмиләштереү өсөн шәхси һәм финанс мәғлүмәттәрен индереп форма тултырыуҙы һорайҙар. Мәғлүмәттәрҙе ҡулға төшөргәс, кешенең аҡсаһын урлайҙар.

Аҡсаны үҙаллы мутлашыусыларҙың иҫәбенә күсермәгән һәм енәйәтселәргә үҙенең шәхси һәм финанс мәғлүмәттәрен хәбәр итмәгән осраҡта ғына банк клиенты урланған сумманы кире ҡайтарыуға иҫәп тоторға хоҡуҡлы. Әгәр аҡсаны һеҙҙең рөхсәтһеҙ алһалар, уны кире ҡайтарыуҙың берҙән-бер законлы механизмы шундай: картаны тиҙ арала блокировкалау һәм ваҡиғанан һуң бер тәүлек эсендә банк бүлексәһендә операция менән килешмәү тураһында ғариза яҙыу. Аҡса урлау тураһында ғариза менән полицияның ниндәй ҙә булһа бүлексәһенә мөрәжәғәт итеү.

Банк хеҙмәткәрҙәре исеменән шылтыратып, йыйылған кешбэкты һәм башҡа бонустарҙы аҡсаға алмаштырырға мөмкин булыуын хәбәр итәләр. Бының өсөн, йәнәһе лә, операцияны раҫлау һәм комиссия түләү өсөн банк мәғлүмәттәрен һәм банктан килгән СМС-кодты һорайҙар. Ысынында иһә, был мәғлүмәттәр мутлашыусыларға аҡса урлау өсөн кәрәк. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ, банк хеҙмәткәрҙәре бер ҡасан да телефон аша финанс мәғлүмәттәрен, шул иҫәптән картаның икенсе яғындағы өс һанлы кодты йәки СМС-кодты һорамай.

Мәғлүмәттәрҙең ситкә китеү осрағын тикшерергә тәҡдим итәләр - бының өсөн сайтҡа һылтанма ебәрәләр. Кеше был сайтта үҙенең банк мәғлүмәттәрен индереү менән ул мутлашыусыларға эләгә. Банк мәғлүмәттәренең юғалыу фактын тикшерерҙәй сайттар юҡ! Бер ҡасан да шикле сайттарҙа үҙегеҙҙең иҫәп йәки карта мәғлүмәттәрен индермәгеҙ, шикле электрон хаттарҙағы йәки СМС-хәбәрҙәге һылтанмалар буйынса күсмәгеҙ.

Үҙәк банктың махсус иҫәбенә аҡса күсерергә тәҡдим итәләр - йәнәһе лә, билдәһеҙ кешеләр һеҙҙең иҫәптән аҡса урларға маташа һәм сумманы һаҡлап ҡалыу өсөн уны Үҙәк банктағы "хәүефһеҙ" иҫәпкә күсерергә кәрәк. Ысынында иһә, "хәүефһеҙ" иҫәп реквизиттары енәйәтселәрҙеке. Потенциаль ҡорбанды ышандырыу өсөн мутлашыусылар Рәсәй банкыһын телгә ала.

Кредит алырға өгөтләйҙәр - йәнәһе лә, кредиттар тарихы бюроһы хеҙмәткәре шылтырата, мутлашыусыларҙың һеҙҙең йәки туғанығыҙҙың исеменә кредит алырға маташыуын хәбәр итә. Бер аҙҙан һеҙгә банктың, хоҡуҡ һаҡлау органдары йәки Рәсәй банкыһының хәүефһеҙлек хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре шылтыратып, шул мәғлүмәтте раҫлай. Быға юл ҡуймаҫ өсөн үҙ аллы онлайн йәки банк офисында мөмкин тиклем тиҙерәк "каршы" кредит юлларға кәрәк. Кредиттың суммаһы билдәһеҙ кешеләр юллаған аҡса менән тап килергә тейеш. Кешене ышандырыр өсөн енәйәтселәр тиҙ арала эш итеүҙе һәм кредит тураһында бер кемгә лә һөйләмәүегеҙҙе һорай, сөнки банк хеҙмәткәрҙәре араһында мутлашыусыны табыу буйынса йәшерен операция үткәрелә. Бындай шылтыратыу булғанда шунда уҡ әңгәмәне туктатығыҙ.

Рәсәй банкыһының ҡыҙыу бәйләнеш телефоны: 8 (800) 300 3000 йәки кәрәҙле телефондан шылтыратыу өсөн - 300.

ҺОРАУ-ЯУАП

# ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫНА - ТОРЛАҠ



**Торлаҡты, Әсәлек капиталы аҡсаһын файҙаланып, ата-әсәнең береһенең исеменә милеккә алыу буйынса алыш-биреш килешеүен рәсмиләштереүҙең ниндәй үҙенсәлектәре бар? Был турала "Росреестр"ҙың Башҡортостан буйынса идаралығы белгестәре аңлата:**

Социаль фонд ата-әсәнең береһенә әсәлек капиталы аҡсаһын күсергәндән һуң капиталдағы өлөштәргә ярашлы иренә (ҡатынына) һәм балаларына өлөш бүлеү тураһында килешеү төҙөргә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта, ир менән ҡатындың берлектәге аҡсаһы иҫәбенә һатып алынған торлаҡ өлөшө берлектәге милектә ҡалырға тейеш. Юғиһә, никах осоронда йыйған мөлкәтте бүлеү тураһында айырым килешеү һәм нотариаль таныҡлыҡ талап ителә.

Хәүефһеҙлек маҡсатында күсемһеҙ милектән тәүҙән уҡ Әсәлек капиталы аҡсаһына һатып алыныуын нисек белергә?

"Росреестр"ҙың әсәлек капиталы аҡсаһын файҙаланыу шарттарын контролдә тотоу вәкәләттәре юҡ - был һатып алыусыларҙың шәхси бурысы. Бындай мәғлүмәттәр Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрына индерелмәй һәм Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрынан күсермәләр составында бирелмәй.

Әсәлек капиталын файҙаланыу тураһындағы мәғлүмәт Социаль фондта була. Әгәр һатыусы фатирын һатырға ниәтләһә һәм йәшерерлек мәғлүмәттәре булмаһа, ул талап ителгән бөтә документтарҙы күрһәтәсәк һәм килешеүҙә дөрөҫ мәғлүмәттәр сағылдырасаҡ. Шуға күрә, һатып алыу-һатыу килешеүенә, торлаҡ һатып алғанда әсәлек капиталы аҡсаһы файҙаланылманы, тигән пунктты индереү урынлы булыр. Шул саҡта, һатыусы дөрөҫ мәғлүмәт күрһәтмәһә, ул законһыҙ эш иткән булып сыға һәм быны өсөн яуап тотасаҡ.

"Росреестр"ҙың Башҡортостан буйынса идаралығы белгестәренән онлайн-сервис йәки 8 (800) 100-34-34 телефоны аша консультация алырға мөмкин

4

# Мәғариф

"Киске Өфө"гәзитенең махсус бите

20 - 26 май (һабанай) 2023 йыл

№19 (1061)

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## БАШҠАЛАРҒА ӨЛГӨ УЛАР



**Оҙаҡламай уҡыу йылы тамамлана. Мәктәп коллективтарының күптәре үҙҙәренең быйылғы эшмәкәрлегенә йомғаҡ яһай башланы ла инде. Белем алыу барышында, спорт һәм ижад, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашҡан "шайморатовсылар" менән, мәҫәлән, күп белем усаҡтары ғорурлана. Бөгөн улар - башҡалар өсөн өлгө.**

2022 йылда, мәҫәлән, Мәләүездәге Кинйә Арыҫланов исемендәге 9-сы башҡорт гимназияһының 6-сы класы, Башҡортостандың 500 мәктәп уҡыусыһы менән бергә, тантаналы рәүештә Ватаныбыҙға тоғро булырға ант итте, махсус кластың гимны - "Шайморатов генерал"ды башҡарҙы. Легендар генералдың исемен йөрөтөүселәр бөгөн дә үҙ һүҙенә тоғро. Уларҙың икәүһе менән ҡыҫҡа ғына әңгәмә ҡороп алдыҡ:

- Бик тулҡынландырғыс ул мәлдә һәр ҡайһыбыҙ ғорурлыҡ хисе кисергәндер, - тип иҫкә алды был кластың командиры Арыҫлан Баязитов. - Ант биреү икеләтә яуаплылыҡ өҫтәне. Рәсәй Геройы исемен йөрөткәс, беҙ тиңдәштәр өсөн өлгө, атай-әсәй, уҡытыусылар өсөн ғорурлыҡ булырға тейеш, тигән фекер нығынды күңелдәрҙә. Беҙҙең өсөн генерал Шайморатов Ватаныбыҙҙы һөйөүҙә һәм уны һаҡлауҙа ысын өлгө булып тора. Гимназиябыҙҙа балалар өсөн үткәрелгән илһөйәрлек дәрестәре, тарих тураһында һөйләшеүҙәр, әңгәмәләр артыуын бик ҡыуанып ҡаршы алдыҡ...

**➔ Илһөйәрлек тигәндә нисек аңлайһығыҙ?**

- Атай-әсәйеңде, өләсәй-олатайыңды яратыу, тыуған телең, халҡыңдың тарихы менән ҡыҙыҡһыныу, Ватаның өсөн ҡалҡан булып торорға әҙер булыу ул, - тип яуап ҡайтарҙы командир.

**➔ Йәшегеҙ еткәс, тыуған ил алдындағы бурысты үтәргә әҙерһегеҙме?**

- Әлбиттә. Хәрби хеҙмәт - үҙен ирмен тип һанаған һәр ир-егеттең төп бурысы. Етди батырлыҡ һәм тормош мәктәбе, заманса ҡорал менән эш итә белеү - быларҙың барыһы ла мөһим. Тыныслыҡ һәм Башҡортостаныбыҙҙың сәскә атыуы өсөн барыһын да эшләргә әҙербеҙ, Бөйөк Ватан һуғышында илебеҙ намыҫын һәм азатлығын һаҡлап ҡалған олатайҙар данына лайыҡлы булырға тейешбеҙ, - тип ҡушылып китте Дамир Сарбалеев. - Мәктәпте тамамлағас, ҡайҙа уҡырға барыу әлегә минең өсөн билдәһеҙ, әммә әрмелә хеҙмәт итергә хыялым бар. Ир-егеттең ғүмерендәге иң мөһим этап - хәрби хеҙмәт.

**➔ Бөгөн Махсус хәрби операцияла үҙ хәрби бурыстарын намыҫ менән үтәгән ир-егеттәр тураһында һеҙҙең фекерегеҙ ниндәй?**

- Луганск Халыҡ Республикаһында атайым хеҙмәт итә, ул хеҙмәттәштәре араһында ихтирам һәм абруй яуланы. Атайым менән ғорурланам, - ти Дамир. - Мобилизация иғлан ителгәс, ул ситтә ҡалманы, бөгөн енеүгә үҙ өлөшөн индерергә тырыша. Атай менән элемтәгә инә алмаған саҡтар ҙа була. Ауыр булыуға ҡарамаҫтан, илебеҙҙе һаҡларға тейешбеҙ, ти ул шылтыратҡан сағында. Тиҙерәк тыныслыҡ урынлашып, бөтә яугирҙарҙың иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуҙарын теләйем. Уларҙың иңенә тыныслыҡ өсөн яуаплы һәм ҙур миссия һалынғанын беләм...

**Гөлназ САЛАУАТОВА.**

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

## БАЛАНЫ ЙӘЙГЕЛЕККӘ...

### кемгә ебәрергә

**Ҡыҙыҡ, әммә беҙҙең йәмғиәттә балаһын каникулға ебәрер ере булған кешеләр иң бәхетлеһе иҫәпләнә. Аныҡырағы - ебәрер кешеһе булған. Һәм бында, тәү сиратта, олатайҙар менән өләсәйҙәр күҙ уңында тотола. Хатта был берҙән-бер вариант тигәндә лә була. Баланың ата-әсәһенән оҙайлы айырылып тороуы дөрөҫмө? Ошолай оҙайлы айырылышып тороу кем өсөн кәрәгерәк - бала өсөнмө, әллә атай һәм әсәй өсөнмө? Ошолар тураһында психолог Гөлнара МОСТАФИНА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**➔ Мәктәптәрҙә уҡыу йылы аҙағына яҡынлашып килә, тиҙҙән йәйге каникулдар етәсәк. Әсәй һәм психолог булараҡ, баланы ауылға ҡайтарып тороуға нисек ҡарайһығыҙ?**

- Бер ваҡиға иҫкә төшә. Оло ғына бер апай менән һөйләшәбеҙ. "Йәй етә, каникулда ни эшләргә уйлайһығыҙ?" - ти. Уның балаларҙы һорауы аңлашылып тора бит инде. "Уҡыуҙың тамамланыуын түҙемһеҙлек менән көтөп йөрөйҙәр, ауылға, өләсәйгә китәбеҙ", - тейем. "Ыҫта! - тип аптырап китте апай кеше. - Әсәйеңде йонсотоп, нимә тип балаларыңды унда алып барып ташлайһың?"

Өләсәләренең әле йәш булыуын, ейәнсәрҙәрен һағынып көтөп тороуын, балаларҙың да "өләсәйгә барабыҙ" тип атлығып тороуын, ике үҫмер һеңлемдең уларға күҙ-ҡолаҡ икәнен, үзебеҙҙең дә бесән ваҡытында унда барырыбыҙҙы һөйләп-һөйләп тә, бер нисек тә аңлата алманым. Ул үҙенең фекерендә ҡалды, мин - үҙемдекендә. Хәҙер уйлайым, әгәр балаларымдың өләсәһе ошо апай булһа, моғайын, йәй буйына түгел, бер аҙнаға ла ҡалдырмаҫ инем. Уның һалҡынлығын тойоп, балаларҙың да ҡалғыһы килмәҫ ине...

Йәйге каникулдарға, ысынлап та, аҙ ғына ваҡыт ҡалды. Күп атай-әсәйҙәр борсола башлағандыр ҙа инде. Ни тиһәң дә, йылдың иң матур, иң көтөп алынған миҙгеле оҙон, ә отпуск бер ай ғына. Баланы ҡала йортонон дүрт стенаһына бикләп ултыртып ҡуйып булмай бит. Күптәр өйрәнелгән ғәҙәт буйынса ауылды, өләсәһе менән олатаһын күҙ алдына килтерәләр. Эйе ла баһа! Көнө буйы саф һауала уйнау, тәбиғәткә яҡын булыу, тәмле тәбиғи ризыҡ менән туҡланыу, ҡош-ҡорт, мал-тыуар, бесәй-эт менән булыу... Ауылға ебәргеһе килеп тә, икеләнеп ҡалғандар ҙа барҙыр.

Ысынлап та, баланы йәйгелеккә ауылға ебәрергәме, юҡмы? Әлбиттә, ебәрергә! Тик, башта әйтеп үтеүемсә, өләсәй бәләкәстәр менән ваҡыт уҙғарырға, уларҙы ҡарарға, тәрбиәләргә әҙер булһа ғына. Шулай уҡ, әлбиттә, баланың теләген дә иҫәпкә алырға кәрәк. Сөнки ул өйрәнелгән мөхиттән, дуҫтарынан, ата-әсәһенән айырылып, оло кеше янында йәшәргә атлығып



тормаҫҡа ла мөмкин. Шуға ла был мәсьәлә атай-әсәйҙең генә теләгенән тормай, ике яҡты ла тыңлау мөһим.

**➔ Йәйҙе ауылда үткәреүҙең ыңғай яҡтары ниндәй?**

- Улар бик күп. Тәү сиратта, бала ышанып бала ышаныслы ҡулдарҙа буласаҡ. Ейәндәре тураһында хәстәрлек күреүҙе өләсәй бурысы һанаясаҡ, иңендә яуаплылыҡ тоясаҡ, шуға ла бәләкәстең тамағы туҡ, йылы кейенгән, һәр аҙымы контроль аҫтында буласаҡ. Бала үҙенең тиҫтерҙәре, ата-әсәһе, уҡытыусылар менән генә түгел, төрлө йәштәге кешеләр менән дә аралаша белергә тейеш. Ә өләсәй менән олатайҙың тормош тәжрибәһе бик ҙур, шуға ла үҙҙәре янында йөрөгән ейән-ейәнсәрҙәренә бирәһе кәңәштәре лә, өйрәтәһе шөғөлдәре лә күп уларҙың. Атай-әсәйҙән айырылып тороу баланы үҙаллылыҡҡа ла өйрәтәсәк. Күптәргә ошолай атай менән әсәйҙән айырым йәшәп тороу оҡшай ҙа. Торғас, урынынды йыйыштырып ҡуйыу, өҫ-башыңды ҡарап йөрөү, олатай-өләсәйгә ярҙам итеү һ.б. - балаларға үҙҙәрен өлкән итеп хис итергә мөмкинлек бирә.

Балалар - һеҙҙән, һеҙ уларҙан бер аҙ ял итеп алыу ҙа файҙаға ғына. Бер-берегеҙҙе һағыныу, ҡәҙерләргә өйрәнеү хистәре айырылып торғанда барлыҡҡа килә.

**➔ Кире яҡтарына күҙ һалғанда?**

- Күп ваҡытта өләсәйҙәр ейән-ейәнсәрҙәрен артыҡ иркәләтеп ташлай. Ваҡытында үҙ балаларына биреп еткермәгән һөйөүҙе, иғтибарҙы хәҙер өләшергә теләй улар. Теләгәненсә йоҡларға рөхсәт итеү, тәмле-татлынан өҙмәү, "һайт" тигәненә "тайт" тип тороу, әлбиттә, яҡшы, әммә быны кире яҡтары ла бар бит әле. Шулай уҡ үҙҙәре лә аңламайынса бала алдында атаһы менән әсәһенең абруйына хилафлыҡ килтерергә мөмкин. Әйтәйек, һәр ғаиләнең үҙ ҡағиҙәләре бар: сәғәт 10-дан да ҡалмай йоҡларға ятырға, көнөнә нисәләр сәғәт китап уҡып, шөғөлләнеп алырға, чипсы кеүек зарарлы аҙыҡтарҙы ашамаҫҡа. Бәләкәстәр бик оҫта манипуляторҙар. Ул йәһәт кенә өләсәһенең ышанысын яулап аласаҡ һәм үҙенсә эшләтәсәк. Тиҙҙән өләсәй кеше лә унынса уйлай башлай. Ысынлап та, 12-лә йоҡларға ятһа, ни булған? Йәйгеһен бала ял итергә тейеш, уҡыуҙар башланғас та дәрестәр менән баш ҡатырырға өлгөрөр әле! Чипсыны ни, бөтәһе лә ашай инде. Унда-һанда алғандан ни булыр тиһең һ.б.

Ауылдарҙа хәҙер балалар әҙ, шуға ла бәләкәс кешегә күңелһеҙ булырға мөмкин. Өлкәндәрҙең, эш мәшәҡәттәренән арынып, улар ыңғайына уйнап ултырырға ваҡыттары ла юҡ.

**➔ Бала нисә йәштән бындай оҙайлы айырылышыуға әҙер?**

- Алты йәштән һуң баланы ҡайҙалыр айырым ебәрергә кәңәш итә психологтар. Әгәр өләсәй менән олатай йәш икән, күбеләрен өйҙә торһалар, бала ыңғайына йөрөргә ваҡыттары бар икән, әлбиттә, бөтөн каникулға ҡалдыра алаһығыҙ. Шулай ҙа, әгәр әсәй-атайығыҙ оло йәштә булһа, баланы йәй буйына уларҙың елкәһенә һалып ҡуйыу бик үк дөрөҫ түгел. Ни өсөн тигәндә, бала ҡарау ул үҙе бер эш, ҙур яуаплылыҡ, йөкләмә. Ауылда донъя мәшәҡәттәре лә етерлек бит әле. Был осраҡта иң оҙағы бер айға ҡалдырыу һәйбәтерәк. Ул ваҡыт эсендә бала үҙе лә әсә-атаһын, дуҫтарын, тыуған өйөн һағынып өлгөрә, өләсәй менән олатай ҙа ейәндәрен яратып танһығы ҡана.

Ауылға ебәрер булһағыҙ, әлбиттә, бала үҙенең эштәрен аныҡ белергә тейеш: өләсәй менән олатайға йорт эштәрендә, әйтәйек, һауыт-һаба йыуырға, өй йыйыштырырға, ҡош-ҡорт ҡарашырға, мал-тыуар алып ҡайтышырға ярҙам итергә, уларҙы тыңларға, ҡаршы һүҙ көрәштермәҫкә, ял итергә ҡамасауламаҫҡа һ.б.

Өләсәй һәм олатай менән дә баланың ашауы, көн режимы тураһында һөйләшеп-фекерләшеү ҡамасауламай. Әйтәйек, баланың ниндәйҙер аҙыҡҡа аллергияһы булырға мөмкин. Ул саҡта ниндәй дарыуҙар бирергә улар алдан белеп торһа яҡшы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баланың йәйҙе ауылда үткәреүенән бер зыян да юҡ, бында тик бер шартты онотмаҫҡа кәрәк - өләсәй менән олатай быға ысынлап та шат булырға тейеш. Был ҡарар баланың һәм өләсәй менән олатайҙың йәшен, йәш һәм оло кешенең теләген, һаулығын, хәлен иҫәпкә алып, шәхсән хәл ителһен. Сөнки балағыҙҙы ла, атайығыҙ менән әсәйегеҙҙе лә үҙегеҙ яҡшыраҡ беләһегеҙ. Матур миҙгел барыһының да хәтерендә йылы тойғолар менән иҫкә төшөрөрлөк булһын һәм, әлбиттә, киләһе йәйҙә таңы ла ҡабатларға кәрәк тигән теләктәрҙә ҡалыуын.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ Ниңәлер башҡорттарҙың менталитетына милли мәҙәниәт ныҡ һеңдерелгән, ә бына теүәл фәндәргә, сит телдәргә бик иғтибар итмәйенсә, һаман да ижад, мәҙәниәт яғын ғына үҫтерергә тырышабыҙ.



БЕЛЕМ УСАҒЫ

# БЕҘ - беҙ йондоҙҙар

**Баш ҡалабыҙ Өфөлә һигеҙ башҡорт милли белем усағы бар. Әммә улар бер-береһенә һис оҡшамаған: һәр береһенең үҙенсәлеге, үҙ традицияһы, үҙенең мөхите, үҙенә генә хас булған айырмалығы бар. Милли мәктәптәрҙең эшмәкәрлеге, уларға йөкмәтелгән бурыс күпкә киңерәк һәм ҙурыраҡ. Улар милли йәш быуынды тәрбиәләй, милли кадрҙар үҫтерә. Шуға ла милли мәктәптәрҙә белем кимәле лә, шул уҡ ваҡытта тәрбиә эше лә юғары булырға тейеш, сөнки республиканың киләсәге тап ошонда тәрбиәләнә. Башҡорт мәктәптәре күпләп үҙгәртеп ҡороу йылдарында асылһа, үҙенең алтын юбилейын билдәләүсе белем усағы - әлегә берҙән-бер. Редакциябыҙ ҡунағы - Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы директоры Булат ЗИНУРОВ менән бергәләп баш ҡалалағы иң беренсе башҡорт мәктәбе булараҡ асылған уҡыу йортона экскурсия ҡылабыҙ.**

**Һеҙ етәкләгән Башҡорт гимназияһы бынан ярты быуаттан ашыу йыл элек асылып, ошо ваҡыт эсендә үҙенең асылына тоғро ҡалып, башлаған юлын лайыҡлы дауам итә. Башҡа милли белем усаҡтарына өлгө булып торған ниндәй ҡаҙаныштарығыҙ, уңыштарығыҙ менән уртаҡлаша алаһығыҙ?**

- Ғөмүмән, баш ҡаланың беренсе Башҡорт гимназияһы булараҡ, беҙҙең белем усағына иң юғары талаптар, иң юғары маҡсаттар ҡуйыла, сөнки беренселәр һәр ваҡыт беренсе булып ҡалырға тейеш. Һуңғы йылдарҙа башланған проекттар гимназияның үҫешен, алға ынтылышын тағы бер тапҡыр раҫлап тора.

Гимназия, башҡа белем усаҡтары менән сағыштырғанда, тәү сиратта, үҙенең составы - 100 процент башҡорт балалары уҡыуы менән айырылып тора. Башҡорт телле мөхит тупһанан башлана, тиһәк тә хата булмаҫ, сөнки ишектән ингәс тә нисәмә йылдар буйына үҙенә генә хас булған милли мөхит һаҡланып килә, "Һаумыһығыҙ!" тип һаулыҡ һорашыу ғәҙәти күренеш бында.

Тормошҡа ашырылған проекттарҙың күбеһе заман талаптарына ярашлы эшләнә һәм, милли мәктәптәр башҡа мәктәптәрҙән һис ҡалышмаҫҡа тейеш, тигән ҡараштан сығып, инженер, IT белеме биреү, республиканың эре предприятиелары, юғары уҡыу йорттары менән тығыҙ бәйләнештә эшләүҙе күҙ уңында тота. Мәҫәлән, бынан ике йыл элек "Ағиҙел" башҡорт художество кәсептәре предприятиеһы менән моделдәр мәктәбе астыҡ. Был, ысынлап та, беҙҙең гимназияға ғына хас булған проект, сөнки башҡа мәктәптәрҙә модель мәктәптәре булһа ла, тик үҙ көстәре менән асылған, ә беҙ предприятие, уның директоры Гүзәл Кәримова менән берлектә проектты башлап ебәргәйнек һәм әлеге ваҡытта артабан да үҫтереп, ҡыҙҙарыбыҙҙы милли орнаментлы кейемдәрҙә дефилегә өйрәтәбеҙ, киләсәктә "Бәләкәй леди" мәктәбен дә асырға ниәтләйбеҙ. Был проектта гендер сикләүҙәре юҡ.

Шулай уҡ ҙур проектыбыҙҙың береһе - ул АСТ яуаплылығы сикләнгән ширҡәт (территориаль электр селтәрҙәре компанияһы) менән электроэнергетика класын асыу булды. Компания беҙгә ике миллион һумдан ашыу бағыусылыҡ ярҙамы күрһәтте, уларҙың ярҙамы менән физика, инженерия буйынса белем биреүҙе нығытырға ниәтләйбеҙ. Ниңәлер башҡорттарҙың менталитетына милли мәҙәниәт ныҡ һеңдерелгән, уны беҙ гендарыбыҙҙа һаҡлап алып киләбеҙ, ә бына теүәл фәндәргә, сит телдәргә бик иғтибар итмәйенсә, һаман да ижад, мәҙәниәт яғын ғына үҫтерергә тырышабыҙ. Был, минеңсә, дөрөҫ түгел, башҡорт балаһы инженер ҙа, табип та булырға, фән өлкәһендә ниндәйҙер асыштар эшләргә лә тейеш. Программист булһа - тағы ла шәп. Эшҡыуар булһа - бик яҡшы. Һәм был йүнәлеште күҙ уңында тотоп, быйылғы уҡыу йылында бизнес мәктәбе астыҡ. Йыл әйләнәһендә бизнес өлкәһе белгестәре, үҙҙәренең шәхси эштәре булған кешеләр балаларға бизнес серҙәрен асты. Хатта үҙем дә яңыраҡ ҡына белеп ҡалдым -11-се класс уҡыусыһының үҙенең бизнесы бар икән. Ләкин ул фәнгә нығыраҡ ынтыла, "математиканы яратам, мин уҡытыусы булырға теләйем", тиеүе мине берсә аптыратты, икенсе яҡтан, ҡыуандырҙы.

**Ни өсөн бизнес түгел, ә уҡытыусылыҡ уны нығыраҡ ылыҡтыра - сәбәбен әйтмәнеме?**

- Һөйләштек. "Бизнес бик күп ваҡыт талап итә, мин юғары уҡыу йортона инһәм, Алла бойорһа, йәштәргә математика өлкәһендә репетитор булараҡ ярҙам итергә теләйем, бәлки, һуңынан бизнесҡа кире ҡайтырмын, әммә әлеге ваҡытта күберәк уҡытыу эше менән мауығып киттем, сөнки туғандарым дәрес әҙерләү буйынса ярҙам һорай, улар теге йәки был теманы аңламаһа, эргәләрендә ултырып, төбөнә төшөп аңлатыу оҡшап ҡалды", тине. Бында мәктәптең балаларға үҙ юлын табыу мөмкинлеге асыуы ла сағыла, сөнки мәктәп йылдарында уҡыусылар үҙен төрлө тармаҡта һынап ҡарарға тейеш. Юғары уҡыу йортона ингәс, улар билдәле бер юл менән генә бара, йәиһә ғаилә ҡора, йә башкөлләй эшкә сума. Ә бына мәктәптә ижад яғынан да, төрлө олимпиадаларҙа-конференцияларҙа ҡатнашып, фән яғынан да, спорт яғынан да, ирекмәнлектә лә үҙҙәрен һынай ала. Улар үҙҙәре ниндәйҙер проекттар яҙып, гранттар ота. Шуға ла мәктәп тик белем биреү усағы ғына түгел, ә белем, тәрбиә, үҫеш үҙәге булып торорға тейеш.

Был йәһәттән беҙ ошо йүнәлештә эштәрҙе әүҙемләштерҙек. Түңәрәктәр һанына килгәндә, улар хәҙер 20-нән ашты. Хатта робот техникаһы түңәрәге лә бар. Инглиз теле түңәрәге асып, унда 100-гә яҡын бала йөрөүе лә ҡыуаныслы. Сит телдәргә иғтибар артыуы ата-әсәләр яғынан да юғары баһалана. Беҙҙең сит телдәрҙе өйрәтеү, уҡытыу буйынса ҙур тәжрибәбеҙ, инглиз теленән олимпиадаларҙа ҡатнашҡан, сит илдәрҙә эшләп йөрөгән сығарылыш уҡыусыларыбыҙ ҙа бар, шуға күрә был йүнәлеште түңәрәк форматында асып, киләсәктә уны сит телдәр мәктәбе проектынаса үҫтереп, унда инглиз, немец, ҡытай һәм төрөк телен уҡытырға ниәтләйбеҙ. Әйткәндәй, гимназиябыҙҙың инглиз теле уҡытыусыларының методик берекмәһе был йәһәттән әүҙем һәм тәжрибәле кадрҙарҙан тупланған.

Мәктәптәрҙең дуҫтары күберәк булған һайын, уның мөмкинлектәре лә арта. Мәҫәлән, Республика балалар технопаркы юл аша ғына булғас, егеттәр технология дәрестәрен шунда үтә. Унда 3D-принтерҙа эшләү, коворкинг-центр, картинг, моделләштереү, ҡул аҫтындағы материалдарҙан прототип эшләү (прототипирование) кеүек заман талаптарына ярашлы һөнәрҙәр буйынса белем алалар, сөнки егеттәр үҙенең тәбиғәте буйынса техникаға тартыла һәм беҙ уларҙың ынтылышын тағы ла үҫтерәбеҙ. Былтыр бер уҡыусыбыҙ Ташкент ҡалаһында уҙған Бөтә донъя уйлап табыусылар олимпиадаһында ҡатнашты һәм үҙенең проекты менән Башҡортостанды, беҙҙең гимназияны күрһәтте.

Шулай уҡ "Өфө" футбол клубы менән берлектә футбол мәктәбе астыҡ, футбол майҙансығы төҙөнөк, газон сәстек. Башҡа мәктәптәрҙә футбол майҙанында яһалма газон булһа, беҙҙә ысын үлән. Әле, Алла бойорһа, футбол буйынса турнир ҙа ойоштороорға планлаштырабыҙ. Башҡортостан юлдаш телевидениеһы менән дуҫлыҡ һөҙөмтәһендә йәш журналистар-ораторҙар мәктәбе астыҡ. Әлеге ваҡытта унда шөғөлләнгән балалар матур һөйләргә, төрлө репортаждар эшләргә, бөгөн көнүҙәк булған подкастар эшләргә өйрәнә. Был проектты майҙа гимназия радиоҡоролмаһы аша үҙ көсөбөҙ менән генә башлап ҡарарға ниәтләйбеҙ. Һуңынан, бәлки, был проект грантҡа ла әүерелер тип ышанам, сөнки гранттарға килгәндә, былтыр 2 600 000 һумдан ашыу федераль грант оттоҡ. Грант аҡсаһына уҡыусылар менән ата-әсәләре мөнәсәбәтендә ниндәйҙер ауырлыҡтар, ҡаршылыҡтар, аңлашмаусылыҡтар килеп тыуһа, уларға ярҙам итеү маҡсатында консультация үҙәге асырға ниәтләйбеҙ.

**Гранттар отабыҙ, тинегеҙ, был барлыҡ ойошмалар өсөн дә мөмкин булған ысул. Әммә балалар баҡсаларынан алып һәр ерҙә ата-әсәләрҙән ремонт өсөнмө, башҡа кәрәк-яраҡ өсөнмө аҡса йыйыу күҙәтелә. Һеҙҙең мәктәптә бындай күренеш бармы, сөнки ҡануниәт буйынса белем усаҡтарында аҡса йыйыу тыйыла түгелме?**




- Тулыһынса килешәм. Мин директор вазифаһында икенсе йыл эшләйем һәм икенсе йыл ата-әсәләрҙән ниндәйҙер фонд тулыландырыу тигән нәмә юҡ. Класс фондына аҡса йыйыуҙы уҡыусылар үҙҙәре хәл итә һәм ул театрға, музейға, башҡа сараларға барыу, экскурсиялар өсөн тотонола. Бының йәшерен-батырыны юҡ - класс фондтары элек-электән бар һәм уны булдырыу-булдырмауҙы атай-әсәйҙәр үҙҙәре хәл итә. Ә бына мәктәп фонды, йәиһә мәктәпкә уныһын, быныһын алайыҡ, тип, ремонт йә башҡа эштәргә аҡса йыйыу юҡ. Беҙ ата-әсәләр менән саҡ ҡына икенсерәк форматта эшләйбеҙ: балаларға кәрәкле бер проект алабыҙ ҙа, шул проектҡа смета эшләп, краудфандинг форматында аҡса йыябыҙ. Унда уҡытыусылар ҙа, атай-әсәйҙәр ҙә ҡушыла ала. Кәрәкле сумма йыйылғас, ул проектты тормошҡа ашырабыҙ. Был алым отошлораҡ һәм атай-әсәйҙәр аныҡ нимәгәлер ярҙам итергә теләй икән - ундайҙар күп - ярҙам итә алалар.

Икенсе яҡтан, белем усаҡтарының төрлө түләүле түңәрәктәр ойоштороу мөмкинлектәре, быға рөхсәт биргән лицензиялары бар. Беҙ ҙә, атай-әсәйҙәрҙең һорауы буйынса түләүле түңәрәктәр асып, аҡса эшләйбеҙ һәм уны гимназияны матурлауға, матди-техник базаны нығытыуға тотонабыҙ. Һәм, әлбиттә, гранттарға өмөтләнәбеҙ. Әле тағы бер грантҡа яҙҙыҡ, көтәбеҙ. Шулай уҡ бағыусыларҙы йәлеп итәбеҙ. "Әлеге ваҡытта спонсорҙар табыуы ауыр, аҡса биреп бармайҙар, мәктәптәргә ярҙам итмәйҙәр",- тиеүҙәре менән килешмәйем. Һорарға һәм ни өсөн аҡса кәрәк икәнен дөрөҫ аңлата белергә кәрәк. Әгәр аныҡ проектың, сметаң бар икән, ошо сумманы нисек тотонаһың, ниндәй һөҙөмтә килеп сығырға тейеш икәнен бағыусыларға аңлата алһаң, улар ярҙам итергә әҙер.

**АСТ компанияһы менән хеҙмәттәшлегегеҙгә ентекләберәк туҡталайыҡ әле…**

- АСТ компанияһы Ишембай, Стәрлетамаҡ, Салауат ҡалаларын хеҙмәтләндереһә лә, Өфөлә беҙҙең проектты тормошҡа ашырырға риза булдылар. Был, ысынлап та, ҡыҙыҡлы проект һәм беҙ быны беренселәрҙән булып башланыҡ. Йәғни дәрестән һуң уҡыусыларға электр-энергетика комплексы буйынса электив курстар уҡыласаҡ. Ошо өлкәлә эшләгән белгестәр балаларға үҙҙәренең һөнәр үҙенсәлектәре, ҡыҙыҡлы мәлдәре тураһында һөйләй, был тармаҡта эшләр өсөн нимә эшләргә, ҡайҙа уҡырға, нимә белергә кәрәк икәнлеген, ғөмүмән, ыңғай һәм кире яҡтары менән таныштыра. Шулай уҡ ошо өлкәләге предприятиеларға экскурсиялар ҙа буласаҡ. Һәм дә, Аллаһ бойорһа, АСТ беҙгә физика өлкәһендә цифрлы лаборатория бүләк итергә әҙер һәм беҙ киләсәктә физика буйынса 7-11-се кластар араһында олимпиада ойошторорға ниәтләйбеҙ. Олимпиаданың айырым бер өлөшө электроэнергетика буйынса һорауҙарҙан торасаҡ. Ҡатнашыусы балаларға АСТ компанияһынан бүләктәр тапшырыласаҡ, һәм, әлбиттә, улар ошо йүнәлеш буйынса уҡырға инһә, ярҙам буласаҡ, практиканы компания үҙендә үткәреү мөмкинлеге бирәсәк.

Был хеҙмәттәшлек барлыҡҡа килеүҙең сәбәбе шул: әлеге ваҡытта предприятиеларҙа, мәҫәлән, инженерҙар, IT белгестәре етешмәй, шуға ла улар кадрҙар тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуйып, мәктәптәргә килергә ризалаша.

**Башҡортостандың, Рәсәйҙең ниндәй вуздары менән хеҙмәттәшлек итәһегеҙ?**

- Өфө фән һәм технологиялар университеты менән берлектә эшләргә тигән пландар бар. Әле предуниверсарий булдырыуға заявка биреп йөрөйбөҙ. Еңһәк, тағы ла бер проектыбыҙ тормошҡа ашыр тип өмөтләнәбеҙ.

Башҡорт дәүләт медицина университеты менән медицина класын йәки медицина өлкәһендә ниндәйҙер бәйләнеш булдырырға уйлайбыҙ, сөнки уҙған уҡыу йылын тамамлаусыларҙан 6 уҡыусы БДМУ-ға уҡырға инде. Элек-электән, әгәр гимназия тарихына күҙ һалһаҡ, беҙҙең белем усағын тамамлаусыларҙың араһында күренекле табиптар, медицина фәне докторҙары ла, фән кандидаттары ла бар. Һәм был өлкәлә эшләгән белгестәрҙең балалары беҙҙә уҡый һәм, әлбиттә, улар династияларын дауам итер өсөн балаларының ошо йүнәлештә белем алыуын теләй.

Әлбиттә, республика юғары уҡыу йорттарының күбеһе менән яйлап дуҫлыҡты нығытабыҙ. Иң яҡын дуҫтарыбыҙҙың береһе - ул Мәскәү финанс университеты һәм Башҡорт дәүләт аграр университеты. Әлегә ниңәлер аграр университеттың пер-

***✓ Республикалағы барлыҡ вуздар менән хеҙмәттәшлек итергә тырышабыҙ, сөнки беҙҙең республика Башлығының да төп маҡсаты - йәштәрҙе республикала уҡытып, республикала йәшәргә-эшләргә ҡалдырыуға күберәк көс һалыу.***

# ЕГЕРМЕНСЕЛӘР, тоҡандырабыҙ!

спективаһын күреп бөтмәйҙәр, нишләптер нигеҙҙә унда ауылда эшләүсе белгестәр әҙерләйҙәр, тип хаталаналар. Ғәмәлдә, аграр университеттың мөмкинлектәрен, ундағы матди-техник базаны ҡулланып, мәктәптәр менән берлектә ҡыҙыҡлы проекттар ойошторорға мөмкин.

Ғөмүмән, республикалағы барлыҡ вуздар менән хеҙмәттәшлек итергә тырышабыҙ, сөнки беҙҙең республика Башлығының да төп маҡсаты - йәштәрҙе республикала уҡытып, республикала йәшәргә-эшләргә ҡалдырыуға күберәк көс һалыу, һәм, әгәр ситкә уҡырға китә икән, кире республикаға ҡайтарыу. Үҙемдән алып әйтәм - сит төбәктәргә эшкә сығып китеү мөмкинлеге лә бар ине, әммә үҙемде Өфөнән, ғөмүмән, Башҡортостандан ситтә күрмәйем һәм нишләптер икенсе төбәктә үҙ урынымды табырмын тип уйламайым, сөнки беҙ бында тыуып үҫкәнбеҙ, бында кәрәк буласаҡбыҙ.

**▸ Мәктәптәрҙең кимәлен белем сифаты менән баһалайҙар. Һеҙҙең гимназияла белем сифаты ниндәй кимәлдә?**

- Шул уҡ ваҡытта мәктәптәрҙең тәрбиә, мөхит, ижади йәһәттән үҫешеү кимәлен, мөмкинлектәрен күрмәҫкә тырышалар. Белем сифатын Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре менән бәйләү, БДИ һөҙөмтәләре юғары икән, тимәк, мәктәп яҡшы, тимәк, ул мәктәпкә уҡырға барырға кәрәк, тип ҡарау, минеңсә, дөрөҫ түгел. Эйе, беҙҙең дә сифат яғынан эшләйһе эштәребеҙ байтаҡ, шул уҡ олимпиадаларҙа еңеүселәребеҙ әлегә бик күп түгел. Шулай уҡ БДИ буйынса ла ҡайһы бер предметтарҙан ҡалышабыҙҙыр, шулай ҙа был йүнәлештә эште башланыҡ.

**▸ Мәғлүм булыуынса, бөгөн белем усаҡтары ир уҡытыусыларға ҡытлыҡ кисергәндә һеҙҙең гимназияла 9 ир-егет уҡытыусы эшләй. Уларҙы нисек ылыҡтырҙығыҙ, нисек йәлеп иттегеҙ?**

- Шуны ла әйтеп китергә кәрәк - ул егеттәрҙең күбеһенә 35 йәш тә юҡ. Бында, бәлки, белем усағының абруйы ла ҙур роль уйнайҙыр. Улар үҙҙәре килеп, һеҙҙә шундай эштәр башҡарыла, мине эшкә алмаҫһығыҙмы икән, тип мөрәжәғәт итә. Ысынлап та, янып торған, рухлы егеттәр икән, уларҙы нисек тә һулһа алып ҡалырға тырышам. Әйткәндәй, егеттәргә мөмкинлек, шарттар тыуҙыра, лайыҡлы эш хаҡы менән тәьмин итә, уның идеяларын тормошҡа ашыра алһаң, улар мәктәптә эшләүҙән баш тартмай. Бер генә миҫал: беҙҙең физкультура уҡытыусыһы Заһир Рәмил улын ("бегущий башкир") республикала ла яҡшы беләләр. Ул супер-ниндзя ярышында, йүгереү буйынса төрлө конкурстарҙа ҡатнаша. Үҙе генә ҡатнашып ҡалмай, уның артынан балалар ҙа эйәрә. Әгәр физкультура дәрестәрен ситтән генә ҡарап ҡуҙәтеп торһағыҙ, алдан уҡытыусы йүгерә - уның артынан балалар. Ул үҙенең ғәмәле аша балаларға өлгө күрһәтә. Беҙ гимназияла үҙебеҙгә шундай девиз ҡуйҙыҡ: беҙ йондоҙҙар тоҡандырабыҙ. Ә йондоҙҙар тоҡандырыр өсөн һин улар менән тиң булырға, уларҙың күңелендә оскон ҡабыҙырға, үҙең янырға тейешһең.

**▸ Балалар менән тиң булыр өсөн үҙең дә күңелендә бала булып ҡал, тигән күҙлектән ҡарағанда, был дөрөҫтөр ҙә, шулай ҙа субординация, тигән төшөнсә лә бар бит әле...**

- 1-се класс уҡыусыһымы, 11-се класс уҡыусыһымы - мин улар менән тиң күреп һөйләшәм. Кабинетым һәр ваҡыт асыҡ, уҡыусылар директорҙан ҡурҡмай, директор кабинетын урап үтмәй - инеп ниндәйҙер проблема буйынса һөйләшеп, кәңәшләшеп сыға ала. Ғөмүмән, беҙҙә ике йыл "Директор сәғәте" проекты эшләй, унда уҡытыусыларыһыҙ, класс етәкселәрһеҙ уҡыусылар менән осрашам. Проблемаларҙы, һорауҙарҙы уртаға һалып һөйләшәбеҙ, хәл итәбеҙ. Темалар ниндәй музыка тыңлауҙан алып нимә ашарға яратаһың - төрлө булырға мөмкин. Шулай уҡ сәйәсәткә лә иғтибар бирәбеҙ. Йәшерен-батырын түгел, ярамай, тип тыйһаң, ул бала күңелендә кире һөҙөмтә тыуҙыра. Әгәр ҙә ярамай һәм ни өсөн ярамай икәнен аңлатһаң, миҫалдар аша күрһәтһәң, улар, ысынлап та, ышана. Уҡыусылар аҡыллы, барыһын да аңлай, бары меңәрләгән юлдан дөрөҫ юлды күрһәтә белергә һәм ошо юлды һайлаһа, ҡайҙа барып етеүҙәрен аңлатырға кәрәк. Шуғыраҡ егеттәр менән ҡара-ҡаршы ултырып, егеттәрсә һөйләшеп, уларҙың энергияһын кәрәкле проекттарға йүнәлтеү осраҡтары булып тора. Уҡыусыларҙы ишетә белһәң, улар ҙа һине ишетәсәк.

**▸ "Директор сәғәте" тинегеҙ, йәғни директорҙың уҡыусылар менән серләшкән сәғәттәре. Хәҙерге балалар шул тиклем аҡыллы, уңайһыҙ һорауҙар биреп, һеҙ яуап бирә алмаған ваҡыттар булғаны бармы һәм шундай хәл-тороштан нисек сығаһығыҙ?**

- Ундай һорауҙар була. Әгәр ҙә юридик яҡтан закондарҙы белеү талап ителгән һорау икән, йәшермәйем, "Ғәфү итегеҙ, мин әле генә был һорауға яуап бирә алмайым, өйрәнеп, ҡарап, һуңынан яуап бирәсәкмен", тием. Барыһын да беләм, минән дә аҡыллыраҡ кеше юҡ, тигән образ тыуҙырмайым. Уңайһыҙ һорауҙарға килгәндә, уларҙың күбеһе сәйәсәт буйынса. Тик шулай ҙа уларҙы бик уңайһыҙ тип тә әйтмәҫ инем. Мин уҡыусыларға гел әйтә киләм: "Был минең шәхси фекерем һәм уның өсөн мин үҙем яуап бирәм. Минең ҡараш һеҙгә оҡшаймы-оҡшамаймы - белмәйем, шулай уҡ ҡабул итеүегеҙ-итмәүегеҙ ҙә мөмкин. Әгәр ҡаршы икәнһегеҙ, үҙегеҙҙең фекерегеҙҙе матур итеп әйтеп, позицияғыҙҙы аңлата белергә тейешһегеҙ". Һуңғы ике йылда уҡыусылар менән, ысынлап та, матур ғына диалог килеп сыҡты. Уҡыусылар тегеге йәки был мәлгә ҡарата үҙенең фекерен еткерергә өйрәнде, һәм мин уларҙы ишетеп, ҡабул итәм дә, эшебеҙҙе үҙгәртәбеҙ. Ябай ғына миҫал: эшкә килгәс, уҡыусылар менән беренсе осрашыу ваҡытында уҡ: "Ҡыңғырау тауышын ишетмәйбеҙ, берәй нәмә уйлағыҙ әле", - тигән үтенес белдерҙеләр. Шунан беҙ милли колоритлы музыкаль ҡыңғырау яҙҙырҙыҡ. Башҡорт милли ҡурай көйҙәре яңғырағандан һуң, "Дәрес тамам, һеҙ - атай-әсәйҙең ғорурлығы", тип әйтеп ҡуйыла. Йәки дәрес башланыуын белдереп, башҡортса көй яңғырай һәм: "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!", - тигән саҡырыу менән тамамлана. Был уҡыусыларға ла, атай-әсәйҙәргә лә оҡшаны. Әлеге ваҡытта килгән ҡунаҡтарыбыҙ беҙҙең ҡыңғырау тауышын ишетеп, хайран ҡала.

Уҡыусылар менән һөйләшеү эштә ныҡ ҡына ярҙам итә. Уларҙан сыҡҡан инициативаны шунда уҡ эләктереп алабыҙ ҙа футбол, волейбол, ҡышын хоккей ҙа уйнайбыҙ. Уларҙа директор ҡайҙалыр бейектә ултыра, тигән төшөнсә юҡ. Хоккей - контактлы уйын бит инде, шуға этешеп-төртөшәбеҙ, мине лә этеп-төртөп алалар. Беҙҙең гимназистар өсөн директор - уға барып проблемаларыңды һөйләргә, сереңде сисергә, кәңәш һорарға, тәҡдимең менән инергә, ҡайһы ваҡыт бергә уйнап та алырға мөмкин булған ошо гимназия кешеһе.

**▸ Һеҙ гимназияға яңы килгән етәксе. Ә унда оҙаҡ йылдар эшләгән абруйлы уҡытыусылар бар. Уҡыусыларҙы тиң күреп, уларҙың фекерҙәрен иҫәпкә алып индергән үҙгәрештәрҙе уҡытыусылар нисек ҡабул итте?**

- Төрлө урындарҙа эшләргә тура килде һәм минең өсөн вазифа - ул ҡағыҙҙа ғына. Тәү сиратта мин - Булат Зинуров, Өфө егете һәм эшләргә, ошо абруйлы мәктәпте тағы ла юғарыраҡ үрҙәргә сығарырға килдем. Ғөмүмән, һәр уҡытыусыға ихтирам һәм хөрмәт менән ҡарайым. Кешелеклелек тигәндә, остаздарымдың береһе Сынтимер Баязитовтың "Ҡайҙа ғына ултырһаң да, ҡайҙа ғына эшләһәң дә - кеше булып ҡал" тигәнен онотмайым. Ошо принципты һәр саҡ үҙем менән йөрөтәм. Уҡытыусылар уҡыусылар менән шулай аралашыуымды ҡабул итте, тип уйлайым һәм шуға ышанғым килә, сөнки коллегаларым менән дә бер тигеҙ аралашабыҙ. Ғөмүмән, уҡыусылар, уҡытыусылар, администрация, ата-әсәләр берҙәм команда, белем биреү процесының тиң хоҡуҡлы ағзалары булып эш иткәндә генә эштәрен дә еңел һәм уңғай бара, эшләүе лә еңелерәк. Бәлки, элек иерархия булғандыр, әммә әлеге ваҡытта ундай ҡараш менән ҙур еңеүҙәргә өлгәшеп булмай. "Беҙ егерменселәр - һәр ваҡыт беренселәр!" - был девизды ниндәйҙер бер сарала әйткәйнем, шул тиклем һеңеп ҡалды, ә беренсе булыу өсөн һин яңғыҙың түгел, ә берҙәм команда, берҙәм идея менән эш итергә тейешһең.

**▸ Гимназия Фатима Мостафина исемен йөрөтә. Уҡыу йорто уның исемен мәңгеләштереү йүнәлешендә ниндәй эштәр алып бара?**

- Үҙебеҙҙе егерменселәр тиһәк тә, 1999 йылдан алып Фатима Мостафина исемен йөрөтәбеҙ һәм һуңғы йылдарҙа күп кенә эштәрҙе уның иҫтәлегенә бағышланыҡ. Сөнки беренсе йылдарҙа уҡыусылар Фатима Мостафинаның кем икәнлеген белмәй торғайны. Хәҙер барлыҡ гимназистарҙы иртән дәрескә килгәндә фойела Фатима Мостафинаның бюсы, уның кем икәнлеге яҙылған мәғлүмәт ҡаршылай. Шулай уҡ беҙ уға арналған музей-кабинет ойошторҙоҡ. Унда шәхескә бағышланған шәхси экспонаттар, фотоархив һ.б. ҡуйылған. Шуға һәр класс уның ҡайҙа тыуғанын, кем икәнлеге һәм республика өсөн нимә эшләгәнен белә. Икенсе проектыбыҙ - ул Ф. Мостафина исемендәге фәнни-ғәмәли конференция. Быйыл уны шәхестең 110 йыллығына арнаясаҡбыҙ.

БР Мәғариф министрлығы ярҙамында Ф. Мостафина исемендәге премия булдырҙыҡ. Ул әүҙем уҡыусылар, уҡытыусылар һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәренә бирелә. Еңеүселәрҙе комиссия һайлай. Был, бер яҡтан, Ф. Мостафинаның исемен мәңгеләштереү булһа, икенсенән, ошо премияға дәғүә иткән шәхестәрҙән бер ни тиклем эштәрен баһалау ҙа. Ә иң мөһиме - уҡыусыларҙың ошо премияға лайыҡ булған гимназистарҙы күреп, "Мин дә гимназия өсөн, телем, халҡым өсөн нимәләр эшләргә тейешмен, мин дә бит лайыҡмын", тип сәмләнеүе. Былтыр премияны беренсе тапҡыр тапшырғас, бер уҡыусының әсәһенә: "Мин ошо премияны алыр өсөн тырышасаҡмын, яҡшы уҡыясаҡмын!" - тигәнен ишетеү ҙә ҡыуаныс булды.

Һәм беҙ Һамар өлкәһенә белем һуҡмағы һалдыҡ. Фатима Мостафинаның тыуған ауылындағы Дингеҙбай мәктәбенә беҙ йыл элек тәүге эш сәфәре менән барҙыҡ. 2021 йылда дуҫлыҡты рәсми рәүештә өс яҡлы: беҙҙең гимназия, Стәрлетамаҡ гимназияһы һәм Дингеҙбай мәктәбе араһында килешеү менән нығыттыҡ. Әлеге ваҡытта онлайн форматта бәйләнештә торабыҙ. Гимназияла башҡорт телен, әҙәбиәтен һәм тарихын өйрәнеү үҙгә ойошторҙоҡ, шундай уҡ стендтар менән Һамар өлкәһендә, Стәрлетамаҡ ҡалаһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеттары булдырылды. Быйыл Һамар өлкәһенән делегация: Дингеҙбай ауылы мәктәбе директоры һәм бер нисә вәкил килеп, гимназия менән танышып ҡайттылар. Был хеҙмәттәшлек артабан да оҙаҡ йылдар дауам итер тип уйлайым.

**▸ Хәҙер мәктәптәр балаларҙы территориаль тәртиптә, йәки территориаль беркетеү буйынса уҡырға ала. Һеҙ беренсе ҡала Башҡорт гимназияһы булараҡ, шул принципҡа буйһонаһығыҙмы, әллә бөтә ҡала буйынса уҡыусылар ҡабул итәһегеҙме?**

- Беҙҙә территориаль беркетеү юҡ, шуға ла Өфө ҡалаһы һәм яҡын-тирәләге ауылдарҙан туған телендә белем алырға теләүсе уҡыусыларҙы һәм туған телдә уҡытырға теләгән ата-әсәйҙәрҙең балаларын ҡабул итәбеҙ. Был үҙенсәлекте һаҡлап киләбеҙ һәм бының өсөн ҡала хакимиәтенә ҙур рәхмәтлебеҙ. Әлбиттә, был ҙур ҡаҙаныш, ҙур еңеү, сөнки гимназияла, ысынлап та, башҡорт балалары уҡый. Йәшерен-батырын юҡ, йыш ҡына территориаль беркетеү булған мәктәптәрҙә, ундайҙар менән дә эшләргә тура килде - төрлө милләт балалары килә һәм тел мөхитен һаҡлап ҡалыу, йәғни тел мөхитен булдырыу бик ҡатмарлы, сөнки башҡа милләт балаларының да ихтыяжын ҡәнәғәтләндерергә, уларҙың да талаптарына тура килтереп, тел мөхитен боҙорға, йәғни рус һәм башҡорт телдәрендә аралашыу нисбәтен һаҡларға тейешһең. Шундай мөхиттә башҡорт балалары русса һөйләшеп ала ла китә. Әгәр 10 башҡорт араһына 1 рус килһә, барыһы ла русса һөйләшә башлай. Был йәһәттән беҙ гимназияла тел мөхитен һаҡлайбыҙ. Әлбиттә, уҙған уҡыу йылы башында рус телле уҡытыусыларҙы эшкә алған өсөн мине тәнҡитләүселәр ҙә булды, әммә бер йыл үтте - рус телле уҡытыусылар әҙ-мәҙ булһа ла башҡортса һупалай башланы. Беҙ икенсе процесты күрһәттек: икенсе милләт вәкиле, башҡорт теле мөхитендә йөрөп, телде өйрәнә башлай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һөйләшеү айырым бер гимназия тураһында башланһа ла, ул үҙенән-үҙе уртаҡ, дөйөм проблемаларға барып төштө. Әммә Булат Илшад улының һәр мәсьәләгә үҙ ҡарашы, үҙ фекере бар. "Һәр милли белем усағы үҙенең микрорайонына ярашлы, алдына маҡсат ҡуйырға, йәғни ул башҡорт балаларына төрлө өлкәләрҙә үҫергә ярҙам иткән үҙәк булырға тейеш. Мәҫәлән, 122-се гимназия - Шакша биҫтәһендә милли үҙәк. Ҙур булмаһалар ҙа, улар үҙҙәренә генә хас үҙенсәлекле мөхиттә башҡорт балаларын тәрбиәләй. Милли белем усаҡтарын икенсе мәктәп-гимназия-лицейҙар менән сағыштырырға ярамай. Милли белем усаҡтары - улар рухиәт, милли кадрҙар әҙерләү үҙәктәре, мәғариф системаһының айырым йөҙөк ҡаштары. Улар бер системаға ҡарай, әммә бурыстары, маҡсаттары менән айырылып тора. Әгәр ситтән ҡунаҡтар килһә, уларҙы ҡайҙа алып баралар? Ошо милли мәктәптәргә түгелме ни? Сөнки республикаға хас этномәҙәни үҙенсәлек ошо милли белем усаҡтарында сағыла", - ти ул.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

***✓ 30 долларлыҡ сәғәт тә, 300 долларлығы ла бер үк ваҡытты күрһәтә. Аҡса янсығыбыҙҙың хаҡы 30 доллар, йә 300 доллар булыуға ҡарамаҫтан, бер үк суммалағы аҡсаны һыйҙыра ала.***



БЕР КИНӘЙӘ ФЕКЕР



# ЕРҘӘГЕ ОЖМАХ

**Балалар, уҡыусыларым, мәктәп алдында үҫеп ултырған ҡайынға текәлеп, уйға батҡан. Ҡайынға ҡарап, баштарына ниндәй уйҙар килеүе тураһында инша яҙырға ҡушҡайным…**

Ҡырҡ ата балаһы ни тураһында уйлайҙыр, әлегә мәғлүм түгел. Ниндәй зифа ҡайын, тип һоҡланалыр, бәлки, береһе. Икенсеһе, был ҡайынды тураҡлағанда дүрт-биш бағана сыға, тип фаразлайҙыр. Түмәрҙәргә бысып, ярып һатҡанда, биш мең аҡса эшләп була, тип, хаҡ ҡуйыусыһы ла барҙыр. Бәлки... Ниңә балалар өсөн уйлайым әле, улар аҡыллыраҡ, һәр хәлдә мәрхәмәтлерәк. Тормош бит һәр беребеҙҙең тәбиғәткә, эргә-тирәләребеҙгә ҡарата булған мөнәсәбәтебеҙҙән тора. Һинең ҡулыңда алтындан эшләнгән арыҫлан һыны. Ҡайһылай матур эшләнгән, тип һоҡланһаң, алтынды күрмәйәсәкһең. О, был бит алтын, тип иҫең китһә, арыҫланды күрмәйәсәкһең. Тормош шулай ҡоролған - Әлмисаҡтан алып Ахырға тиклем!

Был донъяла һәр беребеҙҙең әлмисағы һәм ахыры бар. 25 йәшендә миллионер булған, Apple компанияһына нигеҙ һалыусы Америка миллиардеры Стив Джобстың һуңғы һүҙҙәре тәрән уйға һала. Ул 56 йәшендә генә рактан ауырып үлә. Дауаханала ул ошоларҙы яҙып ҡалдырған: "Бизнеста мин ҙур уңышҡа өлгәштем. Әммә эштән башҡа артыҡ ҙур ҡыуаныстарым юҡ. Төптән уйлаһаң, байлыҡ - ул ғәҙәтемә әйләнгән факт ҡына. Әлеге мәлдә, ауырып йығылғас, үткән ғүмеремде хәтерләйем һәм аңлайым: ҡотолғоһоҙ үлем алдында байлығымдың да, билдәлелегемдең дә бер мәғәнәһе лә юҡ.

Үҙегеҙҙе иркәләгеҙ, башҡаларҙы хөрмәт итегеҙ. Олоғайған һайын аҡылға ултырабыҙ һәм яйлап аңлай башлайбыҙ: 30 долларлыҡ сәғәт тә, 300 долларлығы ла бер үк ваҡытты күрһәтә. Аҡса янсығыбыҙҙың хаҡы 30 доллар, йә 300 доллар булыуға ҡарамаҫтан, бер үк суммалағы аҡсаны һыйҙыра ала.

150 мең долларлыҡ автомобилдә лә, 30 мең долларлығында ла бер үк араны үтеп, тәғәйен урынға барып етәбеҙ.

300 квадрат метрлыҡ өйҙә лә, өс меңлегендә лә үҙеңде бер үк кимәлдә яңғыҙ тояһың.

Һеҙҙең ысын бәхетле булыуығыҙ был донъяның матди әйберҙәренә бәйле түгел.

Әгәр ҙә беренсе класлы йә эконом-класлы самолетта осһағыҙ ҙа, ул ҡолаһа, бергә ҡолайһығыҙ.

Шулай итеп... Аңларһығыҙ тип өмөт итәм, эргәгеҙҙә дуҫтарығыҙ, йә иһә һеҙҙе аңлаған кеше булһа, ысын бәхет - шул! Бәхәсһеҙ биш факт бар: балаларығыҙҙы бай бул, тип тәрбиәләмәгеҙ, бәхетле булһын, тип ниәт ҡылығыҙ. Шулай булғанда, улар, үҫеп еткәс, әйберҙәрҙең хаҡын түгел, ҡиммәтен беләсәк.

Ашаған ризығығыҙ дарыу булһын. Шулай булмаһа, дарыуҙарҙы ризыҡ урынына ашарһығыҙ.

Кемдәр һеҙҙе ярата, бер ваҡытта ла ташламаҫ, хатта 100 процент сәбәптәре булһа ла, ир кешеме ул, ҡатын кешеме, һеҙҙе яңғыҙ ҡалдырмаҫҡа көс табасаҡ. Кеше булыу һәм кешелекле булыу араһында бик ҙур айырма бар. Алға тиҙерәк барғығыҙ килһә, яңғыҙ атлағыҙ! Йыраҡҡа юл тотһағыҙ, бергәләп барығыҙ!".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡайынды күҙәткән балалар ни тураһында уйлай икән? Һеҙҙең баштан ниндәй уйҙар үтте? Тәбиғәткә, тирә-йүнгә, Аллаһы Тәғәләгә мөнәсәбәтегеҙ ниндәй? Аңлайым, бөтәбеҙ ҙә бер иш уйламайбыҙ. Сөнки, әлеге лә баяғы, мөнәсәбәттәребеҙ менән айырылабыҙ. Ҡөрьәндәге Аллаһ һүҙҙәрен күңелебеҙ менән ҡабул итеп, бөтәбеҙ ҙә бер иш аңлаһаҡ, Әлмисаҡҡа ҡайтһаҡ, ҡайын һынын бер иш ҡабул итһәк, ерҙәге ожмах кире ҡайтыр һымаҡ…**

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН...

## ҡаҙаҡ егетенең уҡытҡаны



**Күптән түгел республикала иң яҡшы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһын билдәләнеләр. Конкурстың "Педагогик өмөт" номинацияһында баш ҡаланың 9-сы мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ильяс Жарҡымбек улы Сағынбек еңеү яуланы. Балаларға телебеҙҙең бар матурлығын аңларға ярҙам итеүсе ҡаҙаҡ егетенең был ҙур уңышы барыһында ла һоҡланыу һәм уға ҡарата ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Үҙ биттәрендә милләт, тел мәсьәләһенә ҙур иғтибар бүлгән "Киске Өфө" гәзите, әлбиттә, үҙенсәлекле уҡытыусыны ситләтеп үтә алманы. Уға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

**➔ Ильяс, ҡаҙаҡ егетенең Башҡортостанға нисек килеп эләгеүе, башҡорт теле донъяһына ниндәй юлдар илтеүе тураһында гәзит уҡыусыларыбыҙға белеү үтә лә ҡыҙыҡлы буласаҡ.**

- Яҙмыш ҡайһы саҡта шундай боролоштар эшләй, ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та булыуы мөмкин. Минең тормош юлым, һис шикһеҙ, уңышлы юлдан килә, тип әйтергә кәрәк. Шулай булмаһа, Ҡаҙағстандың Алматы ҡалаһында тыуып үҫкән ҡаҙаҡ егетенең Башҡортостанға килеп, юғары уҡыу йортонда белем алып, әлеге мәлдә үҙе балаларға белем биреп йөрөүе донъяуи мөғжизәнең береһе түгелме ни! Әйтеп үткәнемсә, мин Ҡаҙағстандың Алматы ҡалаһынан. 2014 йылда М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультетына уҡырға инеп, уны уңышлы тамамланым. Бөгөнгө көндә Өфө ҡалаһының 9-сы мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләйем.

Башҡортостан тураһында Өфөгә килгәнсе бер нәмә лә белмәй инем, башҡорттар бар икәнен дә ишеткәнем юҡ ине, сөнки көньяҡ Ҡаҙағстан башҡорт ерҙәренән бик йыраҡ урынлашҡан һәм беҙҙең бәйләнештәр күбеһенсә ҡырғыҙ халҡы менән төҙөлгән.

**➔ Башҡортостан, башҡорт халҡы тураһында күреп-ишетеп белмәгән егет ни рәүешле М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты студенты булып китте һуң?**

- 11-се класты уҡып бөткән йылда М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт университеты менән К. Жубанов исемендәге Аҡтүбә төбәк дәүләт университеты араһында бәйләнеш ептәре төҙөлгән. Был хаҡта миңә ошо уҡ университетта уҡытҡан апайым әйтте һәм тап ул Өфөгә уҡырға барырға тәҡдим итте. Әлбиттә, миңә был тәҡдим бик ҡыҙыҡ тойолдо, сөнки ул, үҙ йәһәтендә, минең алдымда быға тиклем күрмәгән яңы офоҡтарға юл аса ине. Шулай уҡ оло ҡыҙыҡһыныу ҙа булды: ниндәй ул Башҡортостан, башҡорт ере, башҡорт халҡы? Туғандаш халыҡтар булараҡ беҙҙе нимә берләштерә һәм ниндәй айырмалыҡтарыбыҙ бар? Ғөмүмән, күңелемдә урғылған һорауҙар күп ине.

Шулай апайым менән Өфөгә имтихандар тапшырырға килдек, беҙҙе факультет деканы Сәмситова Луиза Хәмзә ҡыҙы ҡаршыланы. Декан һынлы декандың ҡаршы алыуы минең өсөн бик ҡыуаныслы булды һәм шул ваҡыттан алып мин башҡорт халҡының ябайлығын һәм ҡунаҡсыллығын тойоп киләм. Бөгөнгө көндә лә Луиза Хәмзә ҡыҙы менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ, унын һәр саҡ ярҙамын тоям һәм оло рәхмәтемде белдерәм. Әлеге мәлдә мин М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты аспирантураһында уҡыйым, унда беҙ башҡорт һәм ҡаҙаҡ телдәренең ҡушма һөйләм синтаксисын сағыштырма планда өйрәнәбеҙ.

**➔ Өфөгә килгәндә бер ауыҙ һүҙ башҡорт телен белмәгән кешегә уҡыу нисек бирелде?**

- Мин башҡорт теле һәм әҙәбиәте, урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы һөнәрен үҙләштерҙем университетта. "Диплом алғас, Ҡаҙағстанға кире ҡайтып, урыҫ теле уҡытыусыһы булам", тигән уй менән уҡырға ингән инем. Шулай уҡ башҡорт телен өйрәнеү ҙә ауырға төшөр, тип көйәләндем. Ләкин уҡый башлағас, тиҫтерҙәрем менән аралашҡандан һуң башҡорт теленең матурлығын тойҙом, ишеткән һүҙҙәрҙе башымда ҡаҙаҡ һүҙҙәре менән сағыштырып ятлай башланым һәм ярты йыл тигәндә башҡорт телен үҙләштерҙем. Минең был уңышымда факультет уҡытыусыларымдың, курсташтарымдың һәм студент дуҫтарымдың ярҙамы ҙур булды. Шулай уҡ, әгәр ҙә Ҡаҙағстанда йәшәп, башҡорт телен үҙләштерергә тырышһам, был ауырыраҡ булыр ине, башҡорт мөхитендә йәшәгәс, күпкә еңелерәк бирелде.

**➔ Башҡорт теле һине ниməһе менән ылыҡтырҙы?**

- Ул үҙенең талғынлығы, матур яңғырашы менән йәлеп итте. Телде өйрәнә башлағанда башҡорт һүҙҙәрен әйтеү миңә бик ҡыҙыҡ тойола торғайны, сөнки ҡаҙаҡ телендә ҡатыраҡ яңғыраған һүҙҙәр башҡортса йомшаҡ итеп ишетеләләр. Мәҫәлән: жаз/яҙ, жан/йән, шығыс/сығыш, шай/сәй һәм башҡалар. Башҡорт теле моңло тел, күңелгә ятышлы тел.

**➔ Үҙең ҡаҙаҡ милләтенән, кәләшең башҡорт ҡыҙы. Өйөгөҙҙә ниндәй телгә өҫтөнлөк бирәһегеҙ?**

- Кәләшемдең исеме Алһыу, беҙ унын менән университетта уҡыған мәлдә танышып дуҫлаштыҡ һәм ғаилә ҡорҙоҡ. Ғаиләбеҙҙә ике ҡыҙ - Йәсминә һәм Айлин үҫеп килә. Уларҙы тәрбиәләгәндә ике халыҡтың да тәрбиә алымдарын ҡулланабыҙ. Өйҙә ике телдә лә һөйләшергә тырышабыҙ: Алһыу башҡортса, мин ҡаҙаҡса аралашам. Оло ҡыҙыбыҙ ике телде лә аңлай, ләкин теле нисек асылыр инде, алдағы көндәр күрһәтер. Уларҙың ике халыҡҡа ла, телгә һәм уларҙың ғөрөф-ғәҙәтенә ихтирамлы, һәр яҡлап та ике туғандаш халыҡтың иң яҡшы сифаттарын үҙҙәренә алып, абруйлы шәхестәр булып үҫеүҙәрен теләйем.

**➔ Уҡытыусы һөнәре абруйлы, әммә ауыр эшмәкәрлек...**

- Мин башҡорт теле уҡытыусыһы булып ике йыл тирәһе эшләйем. Уҡытыусы һөнәрен дөрөҫ һайлауыңдың төп билдәһе - балаларҙы яратыу тип уйлайым. Ә балаларҙы яратҡан, улар менән эшләүҙе яратҡан кешегә уҡытыусы һөнәре ауырлыҡ тыуҙырмайҙыр, тип уйлайым. Ғөмүмән, һәр эштең дә төрлө яғы була һәм теге йәки был һөнәрҙе "еңел йәки ауыр эш", тип билдәләп булмай. Мәктәпкә килгән ошо ваҡыт эсендә һөнәремдең ауырлығын тоймайым. Миңә уҡытыусы булыу оҡшай, балалар менән эшләү күңелемә яҡын.

**➔ Балаларға башҡорт телен өйрәнеүҙе ҡыҙыҡлы итеү өсөн ниндәй алымдар ҡулланаһың?**

- Мин дәрестәремдә башҡорт телен башҡа төрки телдәре менән сағыштырып өйрәнеү алымын ҡулланам. Балалар өсөн бик ҡыҙыҡлы тема, сөнки улар сағыштырыу аша башҡорт теленең үҙенсәлектәренә төшөнә, башҡорт теленең төрки донъяһында билгән урынын асыҡлай, шулай уҡ туған телде белеүҙең ни тиклем мөһим икәнен аңлай башлай. Дәрестәр ФДББС талаптарына ярашлы төрләндереп, заманса алымдар, ысулдар ҡулланып ҡыҙыҡлы һәм фәһемле итеп үткәрелә. Әлегә тиклем уҡыусыларым араһында башҡорт телен өйрәнеүгә ҡаршы булғандарҙы осратманым, балаларҙың барыһы ла ҙур теләк менән дәрестәргә йөрөй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәктәптә эшләүсе ир-егеттәр һәр саҡ һоҡланыу тыуҙыра. Бигерәк тә хәҙерге заманда мәктәпкә эшкә барырға ынтылып тороусы йәштәр һаны бик самалы булғанда. Ә үҙенең һайлаған һөнәренә тоғро ҡалып, эштең ауырлығынан ҡурҡмайынса, балаларға белем бирергә теләүсе йәш белгестәр араһында Ильяс Жарҡымбек улы кеүек энтузиаст егеттәрҙең булыуы айырыуса ҡыуаныслы хәл.**

**Гөлназ МАНАПОВА әңгәмәләште.**

***- Күрәһеңме, ҡорҙаш, - бынаһы Йәноҙаҡ бабай тауышы, - егет булаһы кешенең атай ҡомарҡтыһын биргеһе килмәй. - Мин башымды ҡалҡытып, Йәноҙаҡ бабайға өмөт менән ҡарайым.***



Ноғман МУСИН

# АТАЙЫМДЫҢ ОС ҺӘНӘГЕ

Хикәйә



Артель эшенә һаман кеше етешмәгәс, быйыл әсәйемә өс тонна бесән эшләп бирергә задание һалдылар. Ул тиклем бесәнде нисек эшләмәк кәрәк, тип әсәйем тәүҙә бик борсолғайны, шунан, илгә килгән ауырлыҡты иң менән күтәрергә тура килә инде, тип Йәноҙаҡ бабайҙан бер бәләкәйерәк салғы һаплатып, тапатып алып ҡайтты.

- Ҡыҙым, быйыл һиңә әкренләп бесән сабып өйрәнергә тура килер инде, - тине апайыма. - Хәл ҡәҙәрлем ярҙам итерһең. Йыйышырға быйыл Кинйәбайыбыҙ ҙа ныҡлап йөрөр. Кеше ыңғайына ҡыштырҙарбыҙ әле шунда.

Тик миңә бесән сапҡан мәлдә лә өйҙә ятырға тура килмәне.

Әсәйем менән апайым тәү башлап бесәнгә китергә йыйынып йөрөгән көндө беҙгә һуҡыр Шәһит әллә ниндәй ят ҡешене эйәртеп килеп инде. Күпер аҫтында булған хәлдән һуң Шәһиткә бик үк ҡатнашып бармай инем мин. Атаһын ауыл Советына председатель итеп ҡуйғандан бирле танауын күтәреп йөрөгәнгәме, хәҙер бигерәк яратмайым. Әле лә ана, өй эсенә әллә кемдәй күҙ йүгертеп сыҡты ла, миңә әйләнеп тә ҡарамай, әсәйемә һүҙ ҡушты:

- Хәтирә апай, бынау ағайҙар ос һәнәге эҙләй. Һеҙҙең һәнәгегеҙ барыбер тик торалыр тип атайым ебәргәйне. Улар ялан яғынан бесән эшләргә килгән. Бойҙай оно биреп һатып алабыҙ, тиҙәр.

Сикәһен һаҡал баҫҡан, етек сәсле кеше, берсә әсәйемә, берсә Шәһиткә ҡарап:

- Үҙегеҙгә кәрәкмәгәс, һатһағыҙ арыу булыр ине, - тип һүҙгә ҡушылды. - Хаҡына тормаҫ инек. Синҡә кеүек бойҙай оно бирәбеҙ.

Әсәйем был көтөлмәгән тәҡдимдән тәүҙә аптырабыраҡ ҡалғайны шикелле. Шунан, эшенән туҡтап, урындыҡ ҡаҙнаһына терәлде лә, эйәген усына терәп, ауыҙын бөрөштөрҙө. Белеп бөткәнмен, ул уйланған саҡтарында гел шулай итә.

- Әлләсе, кәрәкмәгәс, тип... Аталары үлде шул... Хәҙер өй ҡыйығында тора ана... - тип һүҙҙәрен өҙә-йолҡа һөйләнде. - Кеше алып торғолай.

- Һат һин уны, ҡәрендәш. Ярты бот бойҙай оно бирәм, - ят кеше үҙ хаҡын әйтеп, ныҡлап һатыулаша башланы.

Ошонан аҙаҡ ҡына мин аңыма килгәндәй булдым. Хатта тертләп киткәндәй иттем. Әсәйем ос һәнәген һатып ебәрһә, уның менән ошо һаҡалтай, йәмһеҙ кеше кәбән ҡойоп йөрөрмө икән? Ос һәнәге тормағас, өй башы ла бушап, етемһерәп ҡалыр инде. Ә мин, ҙурайғас, шул һәнәк менән атайым кеүек үк матур итеп кәбән ҡойорға хыялланған булам тағы... Ни әйтер икән тип, әсәйемдең ауыҙына ҡарап ҡатҡанмын. Ул өҙә генә һөйләшергә ҡабаланмай. Йә, килешәйек, тигән һымаҡ миңә ҡарағас, әйтте:

- Ҡомартҡы һымаҡ итеп тота инем дә... Улым да үҫеп килә.

Эсемә йылы инеп ҡалды. Үҙем дә һиҙмәҫтән:

- Үҙебеҙгә кәрәгер, әсәй, - тип әйтеп һалдым. Ошонан аҙаҡ ҡына Шәһит миңә боролоп ҡараны, һыңар күҙе менән мыҫҡыллы йылмайғандай итте.

- Һиңәме? Һин кәбән ҡойғанса әле, сыҡмаған ағас үҫеп, һәнәк алырлыҡ булыр.

Уның был һүҙҙәре мине оторо ярһытып ебәрҙе, өйҙә ят кеше барын да онотоп:

- Ә һинең ни ҡыҫылышың бар? Ана, үҙегеҙҙекен һатығыҙ! - тип ярһыным да киттем.

- Беҙҙеке атайымдың үҙенә кәрәк, - Шәһит һаман телен бирмәй.

- Ҡуйығыҙ әле, балалар,- ти әсәйем асыуланмай ғына, - ололар һөйләшкәндә тик кенә тороғоҙ. - Шунан ят кеше яғына боролдо. - Он да кәрәк инде ул.

- Знамы кәрәк, - уның һүҙен ят кеше эләктереп алды. - Хәҙер ана баҙарҙа он хаҡы тағы ла күтәрелде.

Аҙаҡҡы ике ауыҙ һүҙ әсәйемдең икеләнеүен бөтөнләй бөтөрәр, бына хәҙер, ярар, алығыҙ инде әтеү, тип әйтер һымаҡ тойолдо. Атайымдың ос һәнәген әллә кемдәр ҡулына биреп ебәрерме? Миңә шул һәнәк менән, исмаһам, бер кәбән дә ҡойорға тура килмәҫме икән ни? Ни әйтергә лә белмәйем. Тәнемде әллә ниндәй көсөргәнеш ҡалтырата, күҙемә йәш төйөлә. Башымды күтәреп, әсәйемә ҡарағайным, күҙҙәребеҙ осрашты. Әсәйем ниҙер әйтергә йыйынған еренән тыйылды, эйәген тағы усына терәне. Шул саҡ ишектә Йәноҙаҡ бабай күренде.

- Әле иҫәнме, Хәтирә килен. - Шунан ят кешегә өндәште. - Бәй, ҡорҙаш, һин бындамы ни?

- Бына килгәйнем дә... Ҡәрендәштә ос һәнәге бар икән, шуны һатмаҫмы тигәйнем.

- Ә-әәә... - Йәноҙаҡ бабай һаҡалын һыпырҙы, әсәйемә һораулы ҡараны.- Үҙең, килен, ни тинең һуң?

- Әллә... бер ни тип тә әйтмәнем әле. Он бирәбеҙ тиҙәр ҙә...

- Он да кәрәк инде, - Йәноҙаҡ бабай әсәйемә, унан миңә һынаулы ҡараш ташлай.

- Һәнәк кәрәкмәйме ни? Атайымдың һәнәге... - Шулай тинем дә аҫҡа төбәлдем, күҙгә тағы йәш төйөлә башланы.

- Күрәһеңме, ҡорҙаш, - бынаһы Йәноҙаҡ бабай тауышы, - егет булаһы кешенең атай ҡомартҡыһын биргеһе килмәй. - Мин башымды ҡалҡытып, Йәноҙаҡ бабайға өмөт менән ҡарайым. Ул иһә: - Хәтирә килен, һатыулашып торма инде ос һәнәгеңде, улыңа кәрәк булыр, - тине, бүтәнсә һүҙ оҙайтмаҫлыҡ итеп, киҫә генә. Үҙ һүҙен нығытырға теләгәндәй, өҫтәне: - Ҡомартҡыны һатып алып булмай уны.

- Әб-бә... Беҙ ни эшләрбеҙ икән һуң? - тип етек сәсле елкәһен тырнаны Шәһит менән килгән ят кеше.

Йәноҙаҡ бабайымды ҡосаҡлап алырҙай булдым мин ошо мәлдә. Атайымдың ос һәнәген сит-ят ҡулдарҙан тәки ҡотҡарҙы бит.

- Атайым, һатырҙар, тигәйне, - бынаһы - ишек төбөндә торған Шәһит һүҙ ҡыҫтыра. Йәнәһе, атаһы сельсоветта ултырғас, уның һүҙе һүҙ булырға тейеш.

Йәноҙаҡ бабай уға аптыраған һымаҡ ҡараны. Әллә быға тиклем күрмәгән инде.

- Туҡта әле, һинең атайыңдың ул һәнәктә ниндәй ҡыҫылышы бар?

Соландан Шәһиттең: "Уныһын үҙенән һора",- тип һөйләнгәне ишетелде. Йәноҙаҡ бабай башын сайҡаны ла ят ағайға табан шыуыбыраҡ ултырҙы.

- Һин, Нажар, борсолма. Һәнәкте табырбыҙ уны, үҙем табышып бирермен, - тип ғәҙәтенсә һәр һүҙен үлсәп кенә һөйләргә тотондо ул. - Бына әле лә һеҙгә ярҙам хәстәрләп ингәйнем бында. Күбә тарттырғанда ат башында йөрөргә малай кәрәк, ти инең бит. Берәүһенә ана минең малайҙы алырһың, икенсеһенә бына Хәтирә килендең улы бар. Килен, ишетәһеңме, Кинйәбайыңды ҡоҙалап ултырам даһаң. Берәй аҙнаға ана беҙҙең Әхәт менән бына быларға күбә тарттырырға барһын. Буштан-буш түгел, ашатҡандан тыш, көнөнә бер карауай икмәк бирәбеҙ, тиҙәр.

- Әлләсе, үҙе нимә тиер икән. Кинйәбай, бараһыңмы?

Әсәйемдең һорауы ос һәнәге тураһында булған һүҙҙән аҙаҡҡы болоҡһоуымды ҡапыл баҫты. Үҙем хаҡында һүҙ барғанда ниңә иҫһеҙ кеше һымаҡ ултырам әле мин? Һис ни уйлап тормаҫтан:

- Барам, - тип ризалыҡ биреп тә ҡуйҙым.

- Әйҙә, ҡорҙаш, һиңә һәнәк табайыҡ инде, - тип Йәноҙаҡ бабай урынынан торҙо. Шунан әсәйемә ҡарап өҫтәне. - Килен, һин борсолма. Былар - минең таныштар, бик һәйбәт кешеләр.

- Ярар-ярар, ҡайнаға, әйтеүеңә рәхмәт, барыр, - тип әсәйем дә урынынан ҡуҙғалды. Ул миңә ваҡ-төйәк әҙерләргә тотондо. Йөн башалтай, апайым кейеп иҫкерткән, бер һыңарының табаны ҡуба биреп торған ботинка, таҙа күлдәк алып бирҙе.

- Барып төшкәс тә кеше күҙенә ҡарап ултырмаҫһың, - тип күкәй бешерергә ултыртты. Үҙе, мине бик оҙон юлға оҙатҡандай, аҡылын өйрәтеп өйрәтә.- Улар унда ҡыуышлап яталыр инде. Аҫтығыҙға бесәнде күберәк түшәгеҙ, йылыраҡ булыр. Төндә бишмәтеңде кейеп ят, Уҡлытау һыртында таң һыуығы һәләк ныҡ төшә торған. Яланаяҡ йөрөмә, йыланға-фәлән баҫып ҡуйырһың. Көнлөккә икмәк бирәбеҙ, тип әйтәләр, ти бит. Кәрәк таштың ауыры юҡ, бына бынау ыҡсымыраҡ тоҡто ал, икмәкте шуға һалып апҡайтырһың. Ипләп кенә йөрө инде, атыңдан ҡолап төшөп, имгәнеп ҡуйма...

Уның әйткәндәрен ихлас ҡына тыңлай инем, аҙаҡҡы һүҙҙәре һарыуыма тейҙе.

- Һәй, ат менгәнем юҡмы ни! - тинем артыҡ иҫем китмәй генә.

- Улай тимә, улым. Юҡтан ғына була ул, һыбай йөрөп өйрәнеп бөткән кеше лә осоп ҡала... Һәр эштең үҙ яйы бар.

Әсәйемдең был киҫәтеүе мине барыбер өркөтмәне. Сөнки туйғансы ат менеп йөрөү минең күптәнге хыялым ине. Икенсенән, Әхәткә менгәшеп булһа ла, Йәноҙаҡ бабайҙың атын тышарға, эсерергә йөрөгән бар бит инде. Ул ҡәҙәрем бер ни күрмәгән кешеме ни мин?!

Әсәйем менән апайым, салғыларын күтәреп, бесән сабырға, ә мин, ваҡ-төйәк һалынған тоғомдо алып, Йәноҙаҡ бабайҙарға - Әхәт эргәһенә киттем. Был минең, хәтеремдә ҡалыуынса, тәү тапҡыр әсәйемдән башҡа юлға сығыуым, улай ғына ла түгел, кәсеп итергә китеүем ине.

Барһам, ҡапҡа төптәрендә Йәноҙаҡ бабай әлеге Нажар тигән кеше менән һөйләшеп тора, икеһенең дә йөҙөндә борсолоу күренгән һымаҡ.

- Кәбәнде ос һәнәкһеҙ ваҡ-ваҡ итеп тә ҡойор инек. Ҡышын һеҙҙең яҡта ҡар ҙур була бит, көрт баҫып бөтөр. Унан, алырға килгәс, бесәнеңде эҙләп тә таба алмаҫһың, - ти Нажар, һаҡал төгө баҫҡан эйәген шытырҙатып тызый-тызый.

- Бесән ваҡыты булғас, һәнәк һәр кемдең үҙенә кәрәк шул. Әб-бәә, ни эшләп ҡарарға икән? - Йәноҙаҡ бабайҙың да танышына һәнәк табып бирә алмағаны өсөн эсе боша, ахырыһы. Ул миңә һораулы ҡарашын төбәй. Ошо мәлдә уға бик ярҙам иткем, уны был ауыр хәлдән ҡотҡарғым килеп китте. Башыма бер уй төшөүе булды, әйтеп һалыуым булды:

- Йәноҙаҡ бабай, беҙҙең һәнәкте биреп торайыҡ. Үҙем кире алып ҡайтырмын.

Бабайымдың сырайы яҡтырҙы, еңел һулап ҡуйҙы.

- Шулайтмай булмаҫ, улым. Кешеләр алыҫтан килгән бит. Уларға беҙ ярҙам итмәһәк, ҡайҙа барһындар? - Ул теге кешегә ҡарай боролдо. - Нажар ҡорҙаш, һиңә ышандырып ҡына бирәм. Ул бына был балаға атаһынан ҡомартҡы булып ҡалған. Һындырып фәлән ҡуйма, ипләп тотон. Һай, ул һәнәк! Һәнәк түгел ул - атып ебәрер уҡ ҡына.

Нажар бабай ҙа бик ҡыуанды.

- Малайҙарыңды ла, һәнәгеңде лә, ат егеп, үҙем кире килтерермен, һис тә хафаланма. Ҡайҙа, улым, һәнәгеңде килтер ҙә китәйек, - тип ҡабалана уҡ башланы ул.

Өй башынан төшөрөп, һәнәкте килтереп тотторғайным, Нажар бабай уны күтәреп, кәбән башына бесән ырғытҡан кеүек хәрәкәттәр яһап ҡараны, ҡәнәғәтләнеү һәм һоҡланыуын белгертеп, башын сайҡап ҡуйҙы.

Күп тә үтмәне, беҙ Уҡлытауға ҡарай юлға сыҡтыҡ. Ялан яғынан килгән бесәнселәр Уҡлытау һыртындағы иркен сабынлыҡтың бер яҡ ситтәге ҡултығына урынлашҡандар икән. Аҫтан туҙ ябып, уның өҫтөн ҡалын итеп бесән менән ҡаплап, ҙур ғына ике ҡыуыш эшләгәндәр. Береһендә - ирҙәр, икенсеһендә - ҡатын-ҡыҙҙар. Биш-алты аҙым ерҙә генә, өйкөм талдар ҡуйынында, ҡаран ағып ята. Ҡыуыштар артында ҡуйы урман башлана. Ундағы ҡайын, уҫаҡ ағастары, ҡышын ҡалын ҡар баҫып, һынып, имгәнеп бөткән. Һирәкләп күренгән имәндәр генә, тәбиғәт ҡырыҫлығына бирешмәйенсә, ирәйешеп, күкрәк киреп ултыра. Яландың үҙен иһә бесән күбәләре сыбарлаған. Танауға әскелтем бесән еҫе килеп бәреләлә бөтә тәнгә рәхәт итеп тарала.

Беҙ барып төшкәндә, ҡыуыштар алдына аҫылған ҙур ҡаҙан тирәһендә йөрөгән ике ҡатындан башҡа кеше күренмәй ине.

- Ҡарағыҙ әле, - тип уларға өндәште Нажар бабай, - ҡапҡыларға берәй нәмәгеҙ бармы? Булһа, йәһәт кенә тамаҡ туйҙырайыҡ та күбә тарттырырға тотонабыҙ. - Беҙҙең яҡҡа эйәк атып йылмайҙы. - Бына ниндәй егеттәр алып ҡайттым!

Апайҙар беҙҙең алға бер нисә киҫәк һалҡын ит, көрөшкәләргә сәй яһап ҡуйҙы. Мин иһә әсәйем бешереп һалған йомортҡаларҙы ни эшләтергә белмәй баш ватам. Бынауындай ит барҙа бер үҙем тамаҡ айырып, уларҙан башҡа ашап ултырып булмай ҙа инде. Ахырҙа төргәгемде теге апайҙарҙың береһенә алып барып бирҙем.

- Бына күстәнәс, - тигән булам бит әле. Апай миңә мут ҡына ҡараш ташланы ла:

- Был егетең, Нажар ағай, эште күстәнәстән башланы, хәйерлегә булһын, - тип йылмайҙы.

Әллә нимәһенә оялдым уның ошо һүҙҙәренә, битемде ялҡын ялмап алғандай булды. Шул йомортҡаларҙы ниңә алып барып биреп йөрөргә миңә? Ятһын ине тоҡ төбөндә.

**(Дауамы. Башы 15-18-се һандарҙа).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ӨЙҘӘ БЕСӘЙЕҢ БУЛҺА...

■ Йорт хайуандары булған өйҙәрҙә, ҡағиҙә булараҡ, бактериялар 20 тапҡырға күберәк. Таҙартыу саралары етештереүсе компаниялар өсөн тикшеренеү үткәргән Лидс университеты ғалимдары ошондай һығымтаға килгән. Улар бер нисә йорттоң аш бүлмәһенең таҙалығын тикшергән. Балалары булмаған ғаиләләрҙә таҙалыҡ - 167, балалы йорттарҙа 232 балл менән баһаланған. Әгәр ҙә өйҙә йорт хайуандары булһа, был һан 2844-кә еткән. Был 6 миллион бактерия, тигән һүҙ, был дөйөм туҡланыу урындарына ҡарағанда ла юғарыраҡ. Шул уҡ ваҡытта таҙа сепрәк менән бүлмәне йыйыштырып алыу бактериялар иҫәбен 10 мең тапҡырға кәметә.

■ АҠШ-тың Кеше геномы милли тикшеренеү институты ғалимдары иһә кеше тәненең ҡайһы өлөшөндә бактериялар күберәк икәнлеген асыҡлаған. Тикшереүҙә үҙ ирке менән ҡатнашыусылар бер аҙна буйы бер төрлө гелә һабын менән йыуынған. Һуңынан улар бер тәүлек буйы бөтөнләй йыуынмаған һәм ғалимдар уларҙың тәненең төрлө өлөшөнән анализ алған. Асыҡланыуынса, кеше тәнендә, ашҡаҙан-эсәк трактындағы кеүек, 1 мең самаһы төрлө бактерия йәшәй. Бактериялар беләктә күберәк (44 төрлө) табылған, ғалимдар фекеренсә, ҡулдарҙы тейешле итеп йыуыу беләктәрҙең дә бысраныуына килтерә һәм унда төрлө бактериялар йыйыла.

■ Австралия табиптары раҫлауынса, кеҫә телефоны аша оҙаҡ һөйләшеү ҡолаҡ шаулауына килтереүе ихтимал. Мәғлүмәттәр буйынса, ҡолаҡтың ишетеү һәләте боҙолоуы менән халыҡтың 10-15 проценты яфалана. Был ишетеү ағзаларының, мәсәлән, эске ҡолаҡтың йәрәхәте һөҙөмтәһе булыуы ихтимал. Антибиотиктар ҙа ҡолаҡ шауына килтереүе бар. Белгестәр әйтеүенсә, кеҫә телефондары ла ишетеү һәләтенә насар йоғонто яһай ала. Австралияның Экология медицинаһы институты тикшеренеүселәре асыҡлауынса, кеҫә телефондары менән ҡулланыусылар былдай сиргә йышыраҡ тарый, етмәһә, оҙаҡ һөйләшеүҙәр (көнөнә 10 минуттан артыҡ) был хәүефте тағы ла арттыра. Әгәр ҙә кеше 4 йыл дауамында даими кеҫә телефоны менән ҡулланһа, хәл тағы ла киҫкенләшә төшә.

■ Американың Йәмәғәт сәләмәтлеге ассоциацияһы мәғлүмәттәренә ярашлы, мәктәп йәшендәге балаларҙың яҡынса 11,5 проценты көнөнә өс сәғәт тирәһе ваҡытын социаль селтәрҙә аралашып үткәрә. Ғалимдар туплаған статистик мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, был үҫмерҙәр насар ғәҙәттәргә тиҙерәк бирелә. Улар араһында стресс, депрессия, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар, суицид осраҡтары йышыраҡ осрай. Ғәҙәттә, улар насарыраҡ өлгәшә һәм шуға ла атаәсәләре менән конфликтҡа инә. Бынан тыш, был үҫмерҙәрҙең 62 проценты тәмәке тарта һәм 79 проценты алкоголле эсемлек ҡуллана. Белгестәр әйтеүенсә, социаль селтәрҙәрҙә әүҙем аралашыусы үҫмерҙәр иртә енси тормош башлай һәм улар араһында наркомандар күберәк була.

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

**Борон башҡорттарҙа ырыу берҙәмлеге билдәләренең береһе оран булған. Батырҙар, азамат ирҙәр ҡан ҡәрҙәштәрен, йорт-илде яуға, көрәшкә, донъяуи ҙур эшкә саҡырып оран һалған. Урал батыр, Һәүбән, Салауат, Әхмәтзәки... Ил ағаларының ялҡынлы һүҙҙәре, ҡайнар өндәмәләре йөрәктәрҙә ҡуҙғытҡан, халыҡты бер уй, ниәт менән беректереп, изге эшкә ҡуҙғатҡан. Бөгөн дә бөтә башҡорт халҡына оран ташлар хәлдәр, яр ҡысҡырып иғлан итер хәбәрҙәр бар. Уларҙың иң-иң мөһимдәренең береһе - өйләнеү, ғаилә ҡороу, нәҫелнәсәпте ишәйтеү.**

# ХАЛҠЫБЫҘҘЫ ЙӘШӘТЕР ИМ-ӘМӘЛ



## Ғаилә ҡиммәттәрен тергеҙеү мөһимлеге

XX быуат аҙағындағы, XXI быуат башындағы йәшәйештәге үҙгәреш, ижтимағи тормош мөхәббәткә, өйләнеүгә мөнәсәбәтте ҡырҡа үҙгәртте. Әхлаҡ-әҙәпте әҙәпһеҙлек ҡыҫырыҡланы, уйнашлыҡ, кәнизәлек, кәнтәйлек, төрлө венерик ауырыуҙар ныҡ таралды. Бәғзеләр йөгөшлө сирҙән, бәғзеләр аборттан түлһеҙлеккә дусар. Ата улды, инә ҡыҙҙы белмәй. Йәпйәш ҡыҙҙарҙың эсеүе, үлән тартыуы, енси бәйһеҙлеге көсәйҙе. Аҙыу-түҙыу, аңтоң белмәй теләһә кем менән түшәккә тәгәрәү әҙһеҙ ҡалмай. Яман ҡылыҡ, өҫтәүенә яман экологик хәл, ыулы эсәр һыу һаулыҡты ала. Ауырыу ҡыҙҙарҙың һаны артҡандан-арта. Ауырға ҡалған ауырыу ҡатындарҙан ауырыу, зәғиф һәм хатта үле балалар тыуа. Был әҙәмдән бала тыумаҫ, тыуһа ла тормаҫ, тигәндәй, тыуып бер йәшкә лә етмәгәндәр бар. Һандарҙы һанауы ҡурҡыныс, һуңғы егерме йылда никахтан тыш донъяға килгәндәр өс тапҡырға артҡан.

"Аргументы и факты" яҙыуынса: "Рәсәйҙә тағы ла бәйһеҙерәк рәүештә ғаилә ҡиммәттәренә һөжүм бара. Үтә лә сәйер ҡапма-ҡаршылыҡ ҡуҙәтелә. Хөкүмәт бер ҡулы менән ғаиләне тергеҙеү, әсәлекте һәм балалыҡты һаҡлау маҡсатынан милли проектты ғәмәлгә ашырырға ынтыла, ә дәүләт телевидениеһы эскелекте, кәйеф-сафаны, типтереүҙе, ыҙғыш-тартышты, енси бәйһеҙлекте күрһәтә. Ҡайһылыр "йондоҙ"ҙоң айырылыуы, йәки сираттағы өйләнеүе, олигарх-казановаларҙың, модалы кумир-фигуристарҙың ғиш-ғишрәт мажаралары көнүҙәк яңылыҡ итеп танытыла. Ғөмүмән, күберәк аҙған-туҙғандар, боҙоҡлоҡ ҡылғандар беҙҙең заман геройы кимәленә күтәрелә..."

Рәсәй империяһында революцияға тиклем ғаилә бәйләнештәре дәүләт тарафынан яҡланған. Дин, йолалар, ҡанундар менән. Айрылышыусылар һаны теркәлгән никахтарҙың ни бары 0,4 процентын ғына тәшкил иткән. Хәҙерге Рәсәйҙә һәр икенсе никах айырылышыу һәм ғаиләнең тарҡалыуы менән тамамлана. Йәштәрҙә ғаилә ҡиммәттәренә, әхлаҡәҙәпкә енел ҡараш формалаша. Һорашылғандарҙың 50 проценты самаһы ир, ҡатын хыянаты мөмкин тип һанай, 73 проценты фәхишәлеккә йомшаҡ мөғәмәләлә. Тағы ла күберәктәр эскелекҡа күҙ йома. Инде шул характерлы күренеш: халыҡтың иң яҡшы тәьмин ителгән ҡатламы араһында урта хәллеләр менән сағыштырғанда айырылышыусылар, икенсе, өсөнсө, дүртенсе тапҡыр никахҡа инеүселәр һиҙелерлек күп. Сереп байыныың, танылдың - ҡатын алмаштыр, тигән принцип нормаға инеп бара...

Әүәл милли үҙенсәлектәрҙе һанға һуҡмау башҡорт ғаиләһе ҡоролошон, тотороҡлолоғоноң төп ҡағиҙәләрен, ынйығәүһәрҙәргә тиң йолаларын юҡҡа сығарҙы. Рухи һәм әхлаҡи тотанаҡһыҙлыҡ никах боҙоуҙарҙы, айырылышыуҙарҙы күбәйтте. Яңғыҙ ҡалған ҡатындар, әлбиттә, бала табырға атлыҡып тормай. Ир менән ҡатындың бер йән, бер тән булмауы, ҡатын кешенең ир ҡәҙерен белмәүе, утлы киҫәүгә өйләнеүе лә, ирҙәрҙең эскегә һалышыуы ла бергә йәшәүҙән биҙҙерә. Яҡшы ҡатын - йән аҙығы, донъя тотҡаһы икәндә һис кенә хәтерҙән сығарырға ярамай. Халыҡтың именлеге - тотороҡло, ныҡлы һәм әҙәпле ғаиләләрҙә. Әҙәп, әхлаҡ ҡанундары буйынса йәшәгән йәмғиәт кенә ҡотло һәм ҡөҙрәтле.

## Булмышыбыҙҙы һаҡлау саралары һәм бурыстары

Хәҙер тыуым кәмеүҙе баҙар мөнәсәбәттәре, иҡтисади үҙгәртеп ҡороуҙар, халыҡтың матди, финанс хәленең мешкөлләнеүе менән дә бәйләйҙәр. Ләкин булдыҡлы, йүнсел йәштәргә ғаилә ҡороуға был ғына кәртә була алмай. Донъя һәр саҡ ҡораманан йыйыла. Халыҡ әйтмешләй, өйләнеү - үҙе үк донъяң көйләнеү. Ике яҡшы өйләнешһә - уңыш була, бер яҡшы, бер яман өйләнешһә - дөрөҫ була, ике яман өйләнешһә - көнтөн һуғыш була. Беҙ халыҡ аҡылына, тәрбиәһенә таянып, йәштәребеҙҙе күҙлебашлы, һәр башҡорт ғаиләһен бәхетле итә, тарҡалыуҙан һаҡлап ҡала алабыҙ. Урындағы матбуғат, телевидение аша татыу ғаилә тормошон күрһәткән, ҡала, район, ауыл хакимиәттәре, ҡатын-ҡыҙҙар советтары, башҡорт ҡоролтайҙары йәштәр, йәрһеҙҙәр өсөн осрашыуҙар, кисәләр үткәргән, былдай сараларға төрлө ойошмаларҙы йәлеп иткән яҡтарҙа никахлашыусылар һаны арта. Атай-инәй әүҙем булған, балаларын нәҫел шәжәрәһе, абруйы, ҡаҙаныштары менән таныштырған, үҙ милләтендең фиҙаҡәр улы, ҡыҙы булырға өндәгән ғаиләләрҙә башҡорт рухы һүнмәй, тормош юлдашын табыу ҙа хәл иткеһеҙ мәсьәлә булып тормай.

Нәҫелебеҙҙең, халҡыбыҙҙың булмышын һаҡлау, дауамлығын тәьмин итеү, шул маҡсатта ҡан ҡәрҙәштәребеҙҙең һанын арттырыу - бурыстарыбыҙҙың да бурысы. Золом-йәбер аҫтында йәшәү, зәхмәт шауҡымы йылдарында ҡан ҡәрҙәштәребеҙ милли үҙаңынан, ғорурлығынан яҙыу сигенә етте, маңҡортҡа ла әйләнде. Тарихын, рухи ҡиммәттәрен, телен белмәгән һәм белергә лә теләмәгән, залимдар ихтыяры тәьҫирендә кемлеген онотҡан, бәғзеләре үҙ халҡына ҡәһәр ҡылған быуын ҡалҡты. Был яһилдарҙың иң ҙур яһиллығы - милләт сырхауы ине. Шул сырхауҙан беҙ әле лә арына алмайбыҙ.

Байтаҡ ҡәрҙәштәребеҙ тамырынан өҙөлөп, ел ыңғайына тәгәрләгән ҡамғаҡ рәүешендә. Улар үҙ илендә мөрхәт-ҡәнәғәтлек, рәхәтлек таба алмай, күрше өлкәләргә, Себер тарафтарына тәгәрләне, Башҡортостанда башҡорттар йылданйыл кәмене, һуңғы егерме йылда 120 мең самаһы башҡорт бәхет эҙләп ситкә киткән. Республикабыҙҙың башҡорттар күпләп йәшәгән көньяҡ-көнсығыш, төньяҡ-көнсығыш районларының социаль-иҡтисади үҫешенә иғтибар етмәү сәбәпле, тормош-көнкүреш шарттары түбән булды. Сәнәғәт нығыраҡ үҫешкән Силәбе, Свердловск, Пермь өлкәләрендә социаль мәсьәләләрҙе хәл итеүе анһатыраҡ, эш хаҡы юғарыраҡ, йәшәү ҙә еңелерәк ине.

Ауыл хужалығы бөлгәс, ауылда йәшәүе тағы ла ауырлашты: эш тә, эш хаҡы ла юҡ, фәҡәт - фәҡирлек. Ҡәрҙәштәребеҙ бер-береһенең мал-мөлкәтен урлау сигенә етте. Эскелек, аҙғынлыҡ көсәйҙе. Ауылда өйҙәре булған йәштәр ғаиләләре менән ҙур эш хаҡы эҙләп, Себер ҡалаларына һәм ҡасабаларына сығып китте, шунда төпләнде. Аҡса мул, тормош етеш булғас, ҡайтҡылары ла килмәй. Тик шуныһы аяныс: балалары урыҫлаша, үҙ асылынан айырыла. Башҡортостаныбыҙҙың башҡорт ауылдарында иһә балалар, мәктәптәрҙә уҡыусылар аҙайҙы. Балалар булмаһа, башҡорт мәғарифының киләсәге лә булмаясаҡ.

Беҙҙең заманда Башҡортостанда байтаҡ мәктәптәрҙең базаһы яңырҙы, белем һәм тәрбиә биреү шарттары яҡшырҙы. Ләкин йөрәкте өшөткән күренештәр ҙә күҙаллана. Ауылдарҙа балалар һаны аҙайып, бихисап мәктәп ябылды. Ә мәктәп бөткәс, ауыл бөтә. Барҙы юҡ итеү, әлбиттә, бик еңел (быға аҡыл кәрәкмәй), булмағанды булдырыу ҡыйын. Мәктәбе ябылғас, эшһеҙ ҡалған уҡытыусылар, балаларын йәшәгән урында уҡытырға мөрхәт ҡылмаған кешеләр был ауылдан китергә мәжбүр, һөҙөмтә аяныс - әлеге лә баяғы шул башҡорт ауылы тарала, тарҡала.

**Быға һис кенә лә юл ҡуйырға ярамай. Ауыл мәктәптәрен ябылыу хәленә еткергән, лидер була алмаған хакимиәт башлыҡтарының үҙҙәренең кабинет ишектәрен ябыу хәйерле. Хакимиәт башлыҡтарына мәктәптәрҙе бөтөрөү түгел, ә ауылдарҙа йәштәрҙе ҡалдырыу, уларҙы эш менән тәьмин итеү, кәсеп-шөғөлдәр булдырыу, халыҡтың көнкүрешен яҡшыртыу сараларын күрергә кәрәк.**

Башҡорттарҙың башҡа милләттәр тарафынан йотолоуын, кәмеүен туҡтатыу, демографик хәлде һауыҡтырыу, тыуымды арттырыу, башҡорт ауылдарының тарҡалыуына юл ҡуймау дәүләт әһәмиәтендәге мәсьәлә. Башҡорттар йәнтөйәгенән, бар булмышы, рухы, моңо менән бәйләнгән еренән айырылмаһын, шунда түл йәйһен өсөн, әйтәйек, Башҡортостаныбыҙҙың төньяҡ-көнсығыш, көньяҡ-көнсығыш райондарында предприятиелар асыу, эш менән тәьмин итеү, яҡшы эш хаҡы түләү үтә лә мөһим. Себерҙә ҙур эш хаҡы түләгән кеүек, Башҡортостанда ла түләп була бит! Был башҡорт ғаиләләренең матди хәлен, көнкүрешен яҡшыртырға, тыуымды ла арттырырға булышлыҡ итәсәк. Ғаиләнең абруйын, өйләнеүҙең, күп бала табыуҙың шөһрәтен күтәреүҙең дәүләт саралары даирәһен киңәйтеү, әйтәйек, әсәлек һәм балалыҡ культын тергеҙеү, мәктәп йәшендәгеләрен түләүһеҙ ашатыу, кейендереү, йәки был мәнфәғәттә пособиелар биреү, талиптарҙың стипендияларын арттырыу зарур.

Демографик хәлде һауыҡтырыу, генофондты һаҡлау, миграция күренешен көйләү күп яҡлы, киң даирәле, үтә лә мөһим вә әһәмиәтле, дәүләттең һәм йәмғиәттең һәр саҡ күҙ уңында торорға тейешле мәсьәлә... Рәсәй кимәлендә яңы тыуған балаға аҡса бүленеү демографик хәлде һауыҡтырыуға бер аҙ шифаһы тейерҙәй им-әмәл булды. Демографик хәлде һауыҡтырыу, ҡан ҡәрҙәштәребеҙ ойошоп йәшәгән урындарҙа кәсеп-шөғөлдәр булдырыу, ситкә киткән туғандарыбыҙҙы Башҡортостанға кире ҡайтарыу, тарихи илендә туплау буйынса иң һыҙғанып ғәмәли эште дауам итеү кәрәк.

Бөтә социологик һәм психологик тикшеренеүҙәр өйләнеүҙең, бала табыуҙың ғүмерҙе оҙайтыуын раҫлай. Яратышып ҡауышҡандар, йәндән артыҡ йән һөйгәндәр менән йәшәгәндәр, һис шикһеҙ, бәхетле. Әлбиттә, оҙон ғүмер кисергән буйҙаҡтар ҙа юҡ түгел. Мәгәр өйләнмәй йөрөгәндәрҙе, бала һөймәй ғүмерен зая үткәргәндәрҙе халыҡ хуп күрмәй, сөнки ундайҙарҙың тамыры ҡорой. Баланың ата-инәгә, ил-йортҡа алтын бағана, нәҫелдең дауамы, киләсәге булыуы бәхәсһеҙ.

* * *

Башлы-күҙле итеү, туй үткәреү - ата-инәйҙең, ҡан ҡәрҙәштәрҙең, йәғни ғаиләнең һәм йәмғиәттең иң мөһим хәстәрлектәренең һәм бурыстарының береһе, халыҡтың көнитмешенең һәм мәҙәниәтенең иң сағыу күренеше. Халыҡ аҡылынса, өйләнеү - көйләнеү! Ысын күңелдән һөйөшөп донъя көтөү, түлләнеү, бала бағыу, ғаилә татыулығы һәм ныҡлығы - бәхет, ҡот-ырыҫ! Ғаилә ҡороу һәм нәҫелде дауам итеү - халыҡтың үлемһеҙлек сығанағы һәм ғүмерҙең, йәшәүҙең мәғәнәһе лә шунда...

Кешелек донъяһының һәр мәлендә лә мөхәббәт, ғаилә темаһы көнүҙәк булып тора. Тормош, йәшәйеш, халыҡтың, йорт-илдең киләсәге ғаилә ҡотона, нәҫел-нәсәпте ишәйтеүгә бәйле. Был хаҡта борон-борондан әйтелгән, халыҡ ижадында аманат ҡылынған аҡыллы фекерҙәр халыҡты йәшәтер им-әмәл һымаҡ ҡабул ителә. Тупланған аҡыл, тәжрибә һөҙөмтәһендә башҡорт ғаиләһенең быуындан-быуынға бирелгән, хатта гендарға уйылған йолалары, үҙгәрмәй торған, даими үтәлгән ғәҙәттәре, милләткә хас һыҙаттары барлыҡҡа килгән: рухи ҡиммәттәрҙе белеү, әҙәп һаҡлау, иманлы булыу, ир менән ҡатын бөтөнлөгөнә өлгәшеү, күп бала табыу, нәҫел ишәйтеү...

Был мираҫтың хәҙер ҙә танып белеүҙә рухи, тәрбиәүи ҡөҙрәте ҙур. Шуға ла хәҙерге быуын ҡанбабаларҙың рухи асылдарына баға, боронғо йолаларға, ҡиммәттәргә урап ҡайта, уларҙы тергеҙеү хәстәрлеген күрә.

Башҡорт халыҡ ижадында, рухи мираҫта парлы булыу, бала бағыу, тереклек итеү, донъя көтөү буйынса һүрәтләнгән, әйтелгән күренештәр, мәғлүмәттәр "Урал батыр" эпосындағы йәншишмә, тере һыу һымаҡ. Әйтәйек, ата-бабалар нәҫелде ете быуынға тиклем тикшергәндән һуң ғына улын, ҡыҙын ишле иткән. Туған менән туған өйләнешеүенә юл ҡуймаған, яҡшынан яҡшы, аҡыллынан аҡыллы, батырҙан батыр, күркәмдән күркәм тыуыу, сәләмәт нәҫел ҡалдырыу хәстәрен дә күргән. Шуға ла аҫыл йолаларҙы, ғәҙәттәрҙе, аҡыллы фекерҙәрҙе, халыҡ педагогикаһы сараларын халыҡ ижады әҫәрҙәре аша йәштәргә һеңдереү зарур. Улар бик ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс, аңлайышлы. Ошо хеҙмәттә тупланған ғаилә ҡороуға бәйле сығанаҡтар мәктәптtәрҙә уҡытыу-тәрбиә эшендә, Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте, башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә ҡулланыу зарур.

Беҙҙең уйыбыҙса, илдә килеп тыуған демографик проблеманы хәл итеү, йәшәйеште һауыҡтырыу, йәшәртеү, йәнләндереү өсөн ғаилә культын тергеҙеү сараларын күреү үтә лә мөһим. Халыҡ ижадында, рухи мираҫта сағылған өйләнеү, ғаилә тормошо тәжрибәһен өйрәтеү балаларҙың, йәштәрҙең әхлаҡи үҫешенә, ҡанбабалар асылы һиҫкәндереп, сәмдәрен уятыуына, ата һүҙен тотҡан зат-азамат булып өлгөрөүенә булышлыҡ итәсәк. Ғөмүмән, ғаилә ҡороуға, уның именлегенә бәйле халыҡ аҡылын, һабағын тағы ла тәрәнерәк, киңерәк өйрәнеү, матбуғат саралары аша һәр кемгә еткереү зарур. Был беҙҙең заманда айырыуса мөһим.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**
**(Аҙағы. Башы 18-се һанда).**

*БАҠСА МӘШӘҠӘТТӘРЕ*

# МАЙ АЙЫНДА...

**Май - баҡсасы өсөн иң мөһим ай. Йәйҙең бер көнө йылды туйҙыра тигән халыҡ әйтемен үҙгәртеп, майҙың бер көнө ҡышты туйҙыра тип әйтергә мөмкин. Баҡсаңдан мул уңыш алыу өсөн майҙа нимәләр эшләргә кәрәк? Һәүәҫкәр баҡсасы Әмир Ҡунаҡҡужиндың 7 мөһим кәңәшен тәҡдим итәбеҙ.**



Емеш-еләк ҡыуаҡтарын тәрбиәләгеҙ. Ҡурай еләге, ҡарағат, крыжовник кеүек еләк ҡыуаҡтарын үрсетеү өсөн уңайлы ваҡыт. Быны төрлөсә эшләргә мөмкин, әммә иң ябай һәм һөҙөмтәле ысулдарҙың береһе - үҫентеләр менән үрсетеү. Ботаҡты алып, һындырмай ғына бөгөгөҙ һәм бәләкәй генә соҡор ҡаҙып, бөгөлгән урынды тупраҡ менән күмегеҙ. Йәй буйына ботаҡта тамырҙар барлыҡҡа килә һәм бәләкәй үҫенте үҫә. Киләһе йылда уны оло ҡыуаҡтан айырып, башҡа урынға ултыртырға мөмкин.

Баҡса еләге йомшаҡ ер ярата. Баҡса еләген тәрбиәләүҙә иң мөһиме - уның төбөн йомшартыу. Май башында беренсе йомшартыуҙы үткәрергә кәрәк. Уның ярҙамында еләк тамырҙарына һауаның үтеп инеүенә ҡамасаулаған тупраҡтың өҫкө тығыҙ ҡатламы емерелә. Етерлек күләмдә кислород булмауы еләк ҡыуаҡтарының үҫешен тотҡарлай. Бер аҙҙан уны ашлағыҙ. Май аҙағында тамырына теймәй генә тағы төбөн йомшартығыҙ, ҡоротҡостарға ҡаршы эшкәртегеҙ. Был йәһәттән һарымһаҡ төнәтмәһе бик яҡшы. Уны әҙерләү өсөн һарымһаҡты ваҡлап, һыу һалығыҙ ҙа йылы, ҡараңғы урында 7 көнгә ҡалдырығыҙ. Әҙер төнәтмәне еләк ҡыуаҡтарына һибегеҙ.

Ағастарҙы һәм ҡыуаҡтарҙы ҡоротҡосҡа ҡаршы эшкәртегеҙ. Көн йылыныу менән күп һанлы ҡоротҡостар әүҙемләшә. Уларға ҡаршы көрәште таралыуын көтмәйенсә үк башларға кәрәк. Май айында, сәскә атҡансы, ағастарға һәм ҡыуаҡтарға биологик препараттар һибергә кәрәк. Әгәр һеҙ ваҡытында эшкәртә алмайынса, бөжәктәр баҡсағыҙға һөжүм итһә, химик препарат һибергә тура киләсәк.

Баҡсағыҙҙы ҡырауҙан һаҡлағыҙ. Киләсәктә уңышты юғалтмаҫ өсөн һауа торошон иғтибар менән күҙәтегеҙ. Сәскә атҡан ағастарҙы һәм ҡыуаҡтарҙы ҡотҡарыу өсөн мөмкин булған бөтә ысулдарҙы ҡулланығыҙ: һыу һибеү һәм төтөн сығарыу. Температура 0° градустан түбән төшкәс, һиптергес шланг ярҙамында бөтә ботаҡтарҙы һыу менән һиптерегеҙ. Был процедураны 10-15 минут арауығында бер нисә тапҡыр ҡабатлағыҙ. Ағас боҙ менән ҡапланған ҡатлам уны һыуыҡтарҙан һаҡлай.

Һалҡын көндәр көтөлһә, баҡсала төтөн өйөмдәрен булдырығыҙ. Аҫта ҡоро материал урынлаштырығыҙ, ә өҫтән бөтәһен дә сей япраҡтар, дымлы үлән йәки бәләкәй генә ер ҡатламы менән ҡаплағыҙ. Маҡсат ут түгел, ә баҡсаны уратып алған һәм йылылыҡты һаҡларға ярҙам иткән төтөн булдырыу. Ағас төбөндәге тупраҡты ҡороуҙан, туңыуҙан һәм башҡа проблемаларҙан һаҡлау өсөн баҡсасылар мульча һала. Был ысул тупраҡтың уңдырышлылығын арттыра һәм уның структураһын яҡшырта. Мульча сифатында торф, һалам, сабылған үлән, ағас ҡабығы ҡулланырға мөмкин.

Ҡарағатҡа иғтибар итегеҙ. Ҡарағаттың иң етди ауырыуҙарының береһе - япраҡтарының ҡытыршылығы. Был сир йоҡһа, уңыш булмай. Ауырыуҙың тәүге билдәләре күренеү менән үҫентеләрҙе ҡырҡып яндырырға кәрәк, ҡыуаҡты тулыһынса алып ташлау яҡшыраҡ.

Емеш-еләк ҡыуаҡтарын даими рәүештә туҡландырығыҙ. Май айында, әүҙем сәскә атҡан осорҙа еләк ҡыуаҡтары үҫеү һәм быуындар барлыҡҡа килеү өсөн калий һәм фосфорҙың өҫтәмә дозаларына мохтаж. Был органик өҫтәмә аҙыҡ та, комплекслы минераль ашламалар ҙа булыуы мөмкин. Ҡош һыйыр тиҙәген әсетеп һибегеҙ, суперфосфат, калийлы ашлама һәйбәт.

Бал ҡорттарын баҡса еләге ҡыуаҡтарына ылыҡтырығыҙ. Сәскә атҡан ағас-ҡыуаҡтарҙан айырмалы, еләк көслө еҫкә эйә түгел, шуға күрә бал ҡорттары йыш ҡына уны урап үтә. Уларҙы йәлеп итеү өсөн 400 г шәкәрҙе 1 литр һыуға һалып, сироп эшләгеҙ. Иртәнсәк уны ҡыуаҡтарға һиптерегеҙ.

**Ләйсән СӘЛИХОВА яҙып алды.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Ни өсөн беҙҙе уңыш ылыҡтыра?

Уңыш - кешегә кәрәк нәмәләрҙең береһе генә. Күптәр уңыш тураһында хыяллана, әммә уның артынан баҫтырыу өсөн күп ваҡыт әрәм итергә кәрәкме һәм нимәне беҙ уңыш тип атайбыҙ? Ошо һорауҙарҙан уңышлы эш башларға мөмкин.

Иртәнге сәғәт алты. Торорға ваҡыт! Будильниктың төймәһенә баҫаһығыҙ һәм нескә генә тауыш ҡолағығыҙға, иртәнге аш ашап һәм сүп-сар сығарып түгеп өлгөрөү өсөн тороуҙың яҡшы булыуы тураһында шыбырлай. Балаларығыҙ кейенгән, ниһайәт, һеҙ машинаға сығып ултырып, тиҙлекте арттырып, трассаға сығып, юлығыҙҙы ҡыйған ахмаҡҡа барып бәрелмәҫ өсөн тормозға баҫып һәм бер үк ваҡытта эшлекле костюмығыҙға кофе түкмәҫ өсөн акробатик трюк эшләп өлгөрөргә әҙер.

Эш көнө башлана. Балалар иҫән-имен мәктәпкә алып барылды, эшкә килеп, коллегаларығыҙ менән дежур йылмайыу һәм сәләмләү алмашып, урынығыҙға ултырып, компьютерҙы тоҡандыраһығыҙ ҙа, электрон почтаға төн эсендә килгән хаттарҙы ҡарайһығыҙ. Уларҙың күптәре финанс пирамидаларында ҡатнашып, тиҙ арала байырға тәҡдим итә. Бынан тыш, әллә күпме тәҡдимдәр килгән. Сәғәткә ҡарайһығыҙ һәм радио тыңлап, көн дауамында башҡарырға тейешле эштәрҙе барлайһығыҙ. Шул арала ашҡаҙанығыҙ үҙенең ас булыуын белдереп, шаулап ҡуя. Әммә төшкә тиклем йыраҡ әле.

Бер сәғәт гәзит мәҡәләләрен күҙәтеп сыҡҡандан һуң, күҙегеҙгә йондоҙнамә салына һәм ул һеҙгә романтик мажара вәғәҙә итә. Ә, бәлки?.. Тиҙ генә көҙгө алдына баҫып, һыланып-һыйпанып алаһығыҙ. Сәғәт 10 ғына әле... Төш мәлендә банкка йәки банкоматҡа барып, тағы бер тапҡыр машинағыҙға айлыҡ түләү индерергә аҡсағыҙ етәме икәнлеген тикшерәһегеҙ.

Төштән һуң баҫып килгән йоҡо менән көрәшә-көрәшә иғтибарығыҙҙы эшкә йүнәлтергә тырышаһығыҙ, бер үк ваҡытта прокатҡа алған яңы фильмды йома көндө нисек ҡарауығыҙ тураһында хыялланаһығыҙ.

Ниһайәт, сәғәт 5! Өйгә ҡайтҡас, шунда уҡ телевизор ҡабыҙып, инде нисәнсе тапҡыр һуңғы яңылыҡтарҙы тыңлайһығыҙ. Тиҙ генә әҙерләнгән киске ашты ҡабалан-ҡарһалан ашап, балаларҙы өйгә эш эшләргә ултыртҡас, тағы ла телевизор алдына ултыраһығыҙ. Унда барыһы өсөн дә көйөп, сит илдәрҙә хәйерселектән, аслыҡтан интеккәндәрҙе күреп, насар йәшәмәйем әле, тип үҙ алдығыҙға һөйләнеп ҡуяһығыҙ. Шул уй менән йоҡлап китәһегеҙ. Ә иртән ҡабат будильник тауышы уята һәм тағы ла ҡулса буйлап йүгереү башлана.

Шәпме? Ниндәй тормош! Әкиәттәге кеүек. Тормошоғоҙға көнләшергә һәм ғорурланырға була. Әгәр тормошоғоҙ ошо сценарийҙың бер өлөшөнә генә оҡшаһа ла, бәлки, уңышҡа ынтылырға кәрәкмәйҙер, һеҙҙең бит барыһы ла бар!

**Пьер МОРАСИ.**



## 22 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 11.30, 12.05, 0.35, 1.15, 1.55, 2.35, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.45, 14.15, 18.05 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
22.00 Т/с Премьера. "Трейдер". [16+]
0.05 Премьера. "На футболе с Денисом Казанским". [18+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Земский доктор. Восемь лет спустя". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Пыльная работа". [16+]

### БСТ
**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз).**
**14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00 "Это моя профессия". [12+]**
**16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 Специальный репортаж. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 Т/с "Все возрасты любви". [16+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 "Бай". [12+]**
**21.00 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Донбасс: Битва за Дебальцево". [16+]**
**0.00 Х/ф "Днепровский рубеж". [12+]**
**2.30 Спектакль "Кодаса или Полснохи меньшему брату". [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**

## 23 МАЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 23.00 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
22.00 Т/с Премьера. "Трейдер". [16+]
0.35, 1.15, 1.55, 2.35, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Земский доктор. Восемь лет спустя". [16+]
21.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 2.55 Т/с "Московская борзая". [16+]
3.45 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45, 23.45 "Курай даны". [12+]**
**11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.00 "Автограф". [12+]**
**17.30 Т/с "Все возрасты любви". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Елкән. [6+]**
**21.00 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**0.00 Х/ф "Кадет". [12+]**
**1.30 Спектакль "Зятек". [12+]**
**3.45 Д/ф "И снится мне сцена". [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

## 24 МАЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 23.00 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
22.00 Т/с Премьера. "Трейдер". [16+]
0.35, 1.15, 1.55, 2.35, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Земский доктор. Восемь лет спустя". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 2.55 Т/с "Московская борзая". [16+]
3.45 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Әлләсе... [6+]**
**10.45, 23.45 "Курай даны". [12+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.30 Новости спорта (на рус. яз).**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 МузКәрәҙ. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]**
**16.45 История одного села. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 Т/с "Все возрасты любви". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Тормош. [12+]**
**21.00 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Автограф". [12+]**
**0.00 Х/ф "Чудо-остров, или Полесские Робинзоны". [12+]**
**1.45 Спектакль "Гильмияза". [12+]**
**3.30 Бәхетнамә. [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 25 МАЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 23.00 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
22.00 Т/с Премьера. "Трейдер". [16+]
0.35, 1.15, 1.55, 2.35, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Земский доктор. Восемь лет спустя". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 2.55 Т/с "Московская борзая". [16+]
3.45 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Сулпылар. [0+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Этно-краса. [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Специальный репортаж. [12+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**17.30 Т/с "Все возрасты любви". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Башҡорттар. [6+]**
**21.00 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Чаклун и Румба". [16+]**
**1.45 Спектакль "Шауракай". [12+]**
**3.30 Бәхетнамә. [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**

## 26 МАЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.20, 18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
18.00 Вечерние новости.
19.05 "Поле чудес". [16+]
20.20, 21.45 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
22.45 "Вызов. Первые в космосе". [12+]
23.45 Премьера. "ГОЛОС" весны в обновленном составе. Прямой эфир. [12+]
1.50, 2.30, 3.10, 3.50, 4.25, 5.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Удивительные люди. Новый сезон. [12+]
23.35 Истории Большой Страны. [12+]
0.35 Х/ф "Холодное сердце". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**10.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Слово Земли. 2.0. [12+]**
**12.45 Наши годы. [12+]**
**13.15 "Курай даны". [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз).**
**13.45 "Дочь Агидели". [12+]**
**15.00 Лит-ра. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Патриот РФ. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**16.45, 19.45 История одного села. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 Д/ф "Юра. Дворник с обложки". [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**21.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.00, 6.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Правила геймера". [6+]**
**2.30 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.30 Тормош. [12+]**

## 27 МАЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Спасение в космосе". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Выбор агента Блейка". [12+]
14.20 Т/с "Щит и меч". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
19.15 "ГОЛОС" весны в обновленном составе. [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.50 Д/ф "Основной инстинкт: секс, смерть и Шэрон Стоун". [18+]
0.50, 1.30, 2.10, 2.50, 3.30, 4.05, 4.45, 5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.40 Доктор Мясников. [12+]
12.45 Т/с "Паромщица". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Горько-соленое море любви". [12+]
0.40 Х/ф "Не отпускай меня". [12+]
4.10 Х/ф "Семейное счастье". [12+]
5.51 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 Башкирские каникулы. [12+]**
**9.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Елкән. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Этно-краса. [6+]**
**11.00 Лит-ра. [6+]**
**11.30 МузКәрәҙ. [0+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Д/ф "Актриса". [12+]**
**17.45 Д/ф "Последняя высота". [12+]**
**19.00 Территория женского счастья. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Х/ф "Вот это любовь!" [16+]**
**2.15 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]**
**4.00 Д/ф "Король сцены". [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Мистический Башкортостан. [12+]**

## 28 МАЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.20, 0.55, 1.35, 2.10, 2.50, 3.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.00 Д/ф "Жизнь на большой скорости". К 70-летию Александра Абдулова. [16+]
15.00 Х/ф "Гений". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Две звезды. Отцы и дети". Новый сезон. [12+]
21.00 "Время".
22.35 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. [16+]
23.45 Д/ф Премьера. "Арт и Факт". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
6.10, 1.30 Х/ф "Простить за все". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.40 Большие перемены.
12.45 Т/с "Паромщица". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.15 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [12+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Курай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 "Дорога к храму". [0+]**
**15.30, 4.45 Историческая среда. [12+]**
**16.00 "Честно говоря". [12+]**
**16.45 100 лет - журналу "Агидель". [12+]**
**19.00 Әлләсе... [6+]**
**19.45 Патриот РФ. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Атайсал". Детский репортаж с форума "Сила землячества". [12+]**
**21.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Д/с "Герои". [12+]**
**0.30 Х/ф "Волки". [18+]**
**2.30 Спектакль "Скупой". [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**

✓ 41-50 йәштәгеләрҙе эшкә саҡырыу осраҡтары 41 процентҡа артҡан, ә 50 йәштән өлкәнерәктәр 49 процентҡа. "Был нимә менән бәйле? Төп сәбәп - демографик ҡартайыу һәм эмиграция.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# МАЙ ЮБИЛЯРҘАРЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнә.

**18-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Һеңле. Кәркәле. Ҡусты. Ҡайны. Сирек. Лифт. Ми. Ҡайнаға. Килен. Ҡәйнеш. Аҡбаш. Ҡыҙ. Кейәү. Еңгә. Апай. Бикәс. Ейән. Кәмә. Бүләсәр. Ноҡом. Ау. Инәй. Ҡоҙағый.

**Вертикаль буйынса:** Ҡоҙа. Беҙ. Ҡәйенбикә. Абышҡа. Кран. Үт. Аяҡ. Ылаҡ. Һарыҡ. Ҡәйнә. Сатира. Сатин. Әрәмә. Ете. Йөй. Сик. Кәбән. Илле. Еҙнә. Көн. Үлсәм.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 май "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**24 май "Ҡыҙыл паша"** (Н. Асанбаев), драма. 12+
**26 май Премьера! "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов), музыкаль комедия. 12+
**27 май "Һиңнеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23 май "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00 6+
**24 май "Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 11.00 0+
**25 май "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 11.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23 май "Быуаттар төпкөлөнән - Урал легендалары"** БР Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры концерты. 6+
**24 май "1+1"** Орган залында ижад миҙгелен ябыу концерты. 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*
**27 май Премьера! "Храбрая куница"** (С. Чураева). 12.00, 14.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**20 май "Считаю до пяти..."** әкиәт. 13.00 0+
**25 май** 90-сы ижад миҙгелен ябыу **"Ынйыкай менән Юлдыкай"** (Х. Ғәбитов, Г. Саламатова инсц.), шиғри драма. 18.00 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**22 май** Билал ауылында **"Һинән - фатир, минән - ир!"** (Н. Ғәйетбай), гротеск-комедия. 20.00 16+
**25 май** Әхмәр ауылында **"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 20.00 12+
**26 май** Юлдыбай ауылында **"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 20.00 12+

## БР Милли музейы

**25 май "Археологик Өфө"** баш ҡаланың тарихи урындары буйлап. 18.00 6+
**26 май "Башҡортостан урыҫтары"** Конгресс-холда күргәҙмә. 6+
**"Матбуғат хазиналары"** күргәҙмә асыла. 15.00 6+
**27 май "Уралдың ер аҫты байлыҡтары"** балалар сараһы. 14.00 0+
**28 май "Музей һәм 1000 велосипедсы көнө"** акция. 6+

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Май (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (2) дүшәмбе | 3:31 | 5:01 | 13:30 | 18:55 | 21:24 | 22:54 |
| 23 (3) шишәмбе | 3:29 | 4:59 | 13:30 | 18:55 | 21:26 | 22:56 |
| 24 (4) шаршамбы | 3:28 | 4:58 | 13:30 | 18:56 | 21:28 | 22:58 |
| 25 (5) кесе йома | 3:27 | 4:57 | 13:30 | 18:57 | 21:29 | 22:59 |
| 26 (6) йома | 3:25 | 4:55 | 13:30 | 18:57 | 21:31 | 23:01 |
| 27 (7) шәмбе | 3:24 | 4:54 | 13:30 | 18:58 | 21:32 | 23:02 |
| 28 (8) йәкшәмбе | 3:23 | 4:53 | 13:30 | 18:59 | 21:33 | 23:03 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ӨЛКӘНДӘРГӘ КӨН ҠАЛАМЫ?



**Башҡортостан эш биреүселәре йышыраҡ 50 йәштән өлкәнерәк эш эҙләүселәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу белдерә башланы.**

Башҡортостанда эш эҙләүсе 19 йәштән 30 йәшкә тиклемге ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙҙар эңгәмәгә йышыраҡ саҡырыла - 2023 йылдың мартында бөтөн саҡырылған кешенең 49 проценты улар өлөшөнә тап килә. Икенсе урында 31- 40 йәшкә тиклемгеләр (30 процент). 41 - 50 йәшкә тиклемгеләр 12 процент тәшкил итһә, 14 - 18 һәм 51 йәштән алып унан өлкәнерәктәргә 4 процент саҡырыу ҡағыҙы ебәрелгән. Был, былтырғы ошо осор күрһәткестәре менән сағыштырғанда, өлкән йәштәгеләргә ҡыҙыҡһыныу артыуын күрһәтә. Мәҫәлән, 41- 50 йәштәгеләрҙе эшкә саҡырыу осраҡтары 41 процентҡа артҡан (12,9 меңдән 18,1 меңгә тиклем), ә 50 йәштән өлкәнерәктәр 49 процентҡа (3,9 меңдән 5,9 меңгә тиклем).

"Был нимә менән бәйле? Росстат мәғлүмәттәре буйынса, 2022 йылда 35 йәштән кесерәк хеҙмәткәрҙәр һаны 1,3 миллионға кәмегән. Төп сәбәп - демографик ҡартайыу һәм эмиграция. Был кадрҙарға ихтыяж артҡан һәм уларға ҡытлыҡ кисерелгән осорҙа ҡуҙәтелә. Ындай хәл Рәсәйҙең хеҙмәт баҙарында структур үҙгәрештәргә килтерә. Элек йәш белгестәргә ыңғай ҡараште булған эш биреүселәр хәҙер 50 йәштәге һәм унан өлкәнерәк эш эҙләүселәргә йышыраҡ мөрәжәғәт итә башлаясаҡ", - тип аңлатма бирә "Башинформ"ға "hh.ru Урал"дың матбуғат хеҙмәте етәксеһе Анна Осипова.

**Галина БАХШИЕВА.**

ИЖАДХАНА

# ЯҢЫ ӨМӨТТӘР МЕНӘН...

## аяҡ баҫам яңы үргә



**Юҡҡа ғына Нәғим тигән исем "муллыҡ, именлек, бәхет, байлыҡ" тигәнде аңлатмай икән. Уңыш, дан-шөһрәт, тамашасы һөйөүе уның артынан үҙе эйәреп йөрөй, ул бары сәхнәлә рәхәтләнеп уйнай ғына. Ошо арала күркәм генә юбилейын билдәләүсе, М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры, Башҡортостандың халыҡ артисы Нәғим НУРҒӘЛИН менән уның ижадына бер аҙ байҡау яһап, театр сәнғәте тип аталған мөғжизәүи донъя тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

**Нәғим ағай, ошо арала матур ғына юбилейығыҙҙы билдәләнегеҙ, сәхнәлә бабайҙарҙы уйнай башланығыҙмы әле?**

- Башланым, бына "Аҡмулла" (З. Бураҡаева) спектаклендә уның атаһы Камалетдинды уйнайым. "Хужа Насретдин мажаралары"нда (Л. Соловьев, В. Виткович) бик үк оло булмаһа ла, барыбер бабай роле. З. Биишеваның "Мөхәббәт һәм нәфрәт" спектаклендәге Юламан ҡартты яратам. Театрҙы ла бит төрлө быуын актерҙары тотоп тора. Хәҙер ошо дәрәжәгә лә еттек, Аллаға шөкөр, Башҡортостандың халыҡ артистары - Мәғәфүр Усманов, Илсур Хәбиров, Венер Камалов, Зифа Дәүләтбаевалар - беҙ хәҙер оло быуын иҫәпләнәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта, "Диләфрүзгә дүрт кейәү"ҙә (Т. Миңнуллин) 16-17 йәшлек егетте, Амурҙы уйнап йөрөйөм һаман. Ниндәй генә роль булманы - этен дә, бесәйен дә, ҡошон да, ҡуянын да уйнаным, тигәндәй.

Быйыл театр 33-сө ижад миҙгелен ябырға әҙерләнә, беҙ ҙә театрҙа шунса ваҡыт хеҙмәт итәбеҙ. Заманында мине үҙенә саҡырмаған театр ҡалманы. Камал театры ла, һинең юмор беҙҙеңсә, тип, мине үҙенә алырға тырышты. Әммә мин ошо театрға ереккәнмен. Беренсенән, холҡом шулай - йән-яҡҡа ташланып йөрөшәй торған кеше түгелмен. Икенсенән, театрҙың беренсе көнөнән эшләгәс, беҙ уның тәүге битенә яҙылғанбыҙ инде. Коллектив матур, театрыбыҙ матур, ошо театрҙың тарихы инде беҙ. Йәштәр театрынан китеү - уға хыянат итеү һымаҡ минә. Театр һинә дан килтермәй ул, актер үҙе театрға танылыу һәм абруй килтерә ала. Эшләгәс, бер ерҙә яҡшы итеп эшләргә кәрәк, тигән фекерҙәмен.

Юбилейға килгәндә, мин тыуған көндәрҙе яратмайым. Дөрөҫөрәге, үҙемә иғтибар яратмайым. Ә бына сәхнәне яратам. Сәхнәнән төшһәм, кеше күҙенә күренмәскә, башҡаларға бәлә һалмаҫҡа тырышам. Сәхнәлә инде бар донъямды онотам.

**Тормошта бөтөнләй башҡа булған кеше сәхнәлә нисек икенсегә әүерелә ала һуң? Актерлыҡ һөнәренең төп асылымы был?**

- Был тап артиска хас һыҙат. Әгәр һин ысынлап та сәхнә кешеһе булһаң, ул һинең бөтөн донъяңды оноттора ала. Үҙең булыуҙан туҡтайһың бер мәлгә, геройыңдың тормошо менән йәшәп алаһың. Сәхнәнән төшкәндә инде күңелең бушай, ҡайтҡас, 1-2 сәғәттән хәл инә башлай. Залдағы тамашасыларҙың да тәрләһә бар, шул тиклем бирелеп ҡарағандары бар - улар ҙа көстә ала. Бәләкәй сәхнәлә уйнағанда тамашасы ныҡ яҡын ултыра, унда ысынлап та хәл бөтә.

Унан һуң, сағыштырып ҡараһаң, беҙҙең халыҡ хислерәк. Башҡорт йырҙары, мәҫәләһ, моңлораҡ. Башҡорт бейеүенә лә ана шул эстәге хисендә ҡушып бейегәнгә лә һәр хәрәкәттән моң тамған кеүек. Башҡорт театры ла йәнлерәк, беҙҙең уйнауыбыҙ ул йөрәктән сыға, беҙҙекен ҡарауы ҡыҙығыраҡ. Башҡорт театры - ул тәрәнерәк, унда эмоция, хис-тойғо күберәк, ә театр ул тере сәнғәт.

**Йәштәр бөгөн актер һөнәренең асылын аңлап киләме театрға?**

- Бөгөнгө йәш актерҙар башҡараҡ түгел, улар замансараҡ. Ә театр, сәхнә ул һәр заманда ла шул килеш ҡала. Уны нисек кенә борорға маташма, ниндәй генә режиссер килмәһен, ниндәй генә яңылыҡтар индереп ҡарамаһын, артист - артист, сәхнә - сәхнә булып ҡала. Ни тиһәң дә, кеше бит ул, ролдәргә кеше тыуҙыра. Образды интернеттан алып булмай, ул йә бар, йә юҡ. Әйтәләр бит, талант йә бирелә, йә бирелмәй.

**Һеҙ кинола ла уңыш яулаған актер, кинола уйнап, танһығығыҙ ҡанғанмы?**

- Кинола күп уйнаным, төп ролдәр ҙә булды. Ролем өсөн сит илдәрҙә лә призлар алдым. Әммә кино сәнғәте театрҙан ныҡ айырыла. Кинола уйнап, танһығыңды ҡандырып булмай. Унда, әйтәйек, һауа торошона ҡарап, башта фильмдың финалын төшөрөргә мөмкин. Йәғни, тулылыҡ, бөтөнлөк юҡ. Ә сәхнәлә спектаклде башлап ебәрһәң, яйлап образға инеп китәһең, ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнап йөрөп, уның юғары нөктәһен кисереп, финалға етәһең. Шунан ҙур ҡәнәғәтләнеү тойғоларын кисерәһең. Актер өсөн ошо хистәр ныҡ мөһим. Кино минең өсөн түгел, уны үҙ итә алманым. Шуға хәҙер киноға төшөүҙән баш тартам, былтыр йәй ике Мәскәү фильмына саҡырғайнылар, риза булманым.

**Булат Йосоповтың "Сөмбөлдөн етенсе йәйе"ндәге Таһир Юлдашев ролендә һеҙ актер булараҡ бөтөнләй башҡа яҡтан асылдығыҙ...**

- Минең өсөн ауыр роль булды ул. Заманында уны фестивалдәргә күп йөрөттәләр, Төркиәлә "Иң яҡшы ир-егет роле" призын да алғайным.

Роль эшләһәм, сәхнәләме ул, кинолалы, уның айышына төшөнөргә тырышам. Сәхнәгә сығып, һүҙ һөйләһәң, ул берәүгә лә ҡыҙыҡ түгел. Ул һүҙҙең артында мәғәнә ятырға тейеш. Әйтәйек, мин сәхнәлә Нәғим Нурғәлинды уйнайым икән, ти. Тимәк, артист белергә тейеш, ул Әбйәлил районы Ташбулат ауылында тыуған, бәләкәйҙән шуҡ булған, күршеләрен, әбейҙәрҙе-бабайҙарҙы, уҡытыусыларын йонсотҡан. Шулай-шулай булған да, артист булып киткән. Образдың характеры булмай тороп, яҙылған материалды бөгөнгө көн менән генә уйнаһаң, уның ҡыҙығы юҡ. Һинең, актер булараҡ, төптән, тәрәндән нигеҙең булырға тейеш. Шуға ла кинола ла ныҡ соҡона торғайным. Ә Юлдашев тураһында мәғлүмәт әҙ генә бирелгән. Уйлап, байытып, образды үҙемсә эшләп алдым. Таһир шундай кеше, уға карьера ла түгел, ә совет власы ваҡытындағы үҙенең табынған идеялары хатта ғаиләһенән, балаларынан өҫтөнөрәк булған. Ул минең тәбиғәтемә ҡапма-ҡаршы булған роль ине. Ә артист өсөн үҙенде һындырыуы ауыр. Шуныһы менән хәтерҙә ҡалды ла тамашасының. Юғиһә, артист, теләйме ул, юҡмы, бер ҡалыпҡа һалына барыбер.

**Бөгөнгө юғарылыҡтан ҡарағанда, ижади, шәхси тормошоғоҙҙан ҡәнәғәтһегеҙме?**

- Ҡәнәғәтмен, шөкөр. Балалар үҫеп, үҙҙәренең юлын, тәғәйенләнешен тапты. Улыбыҙ актер һөнәрен үҙләштереп, театрҙа эшләп ҡараны ла, ир кеше өсөн башҡараҡ шөғөлдәр бар, тип, китте, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә. Ҡыҙыбыҙ журналист, хәҙер инде ейәндәр уңыштары менән ҡыуандыра.

Һөнәргә килгәндә, күп эшләнем, әле лә ролһеҙ ултырмайым. Төрлө режиссерҙар менән эшләргә мөмкинлек булды. Хәҙерге йәш актерҙарға ошо етешмәй тип уйлайым, һәр режиссер бит актерҙы үҙенсә аса, үҫтерә. Кинола ла күп төштөм. Хәҙер олпатланылды инде. Аҙымыңды йәшеңә ҡарап баҫаһың. Эстәге шул уҡ шуҡ Нәғим тыпырсынып сығып киткәндә лә тыштағы ошо йәшкә еткән Нәғим: "Әҙерәк кенә туктап тор", - тип туҡтата. Олпатлыҡ бар, тәжрибә бар. Тәжрибә, ысынлап та, йылдар менән килә икән ул. Яңы ролдәр, яңы өмөттәр менән сираттағы үргә аяҡ баҫам, шөкөр.

**Ләйсән ВӘЛИЕВА әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИМӘ БЕЛГӘН ҠОЛОН...

## ике инәнең һөтөн бөтөргән

Ҡолаҡтан ингән һалҡын һүҙ йөрәккә барып етеп боҙ була.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәлә).**

Яуызлыҡ һәр саҡ эргәлә йөрөй, изгелекте генә табыу ҡыйын.

**(Илья Шевелев).**

Кешене бер ҡарауҙан һынап булмай. Уның дәрәжәһенең етдилеккә тәрөнгән булыуы, етешһеҙлектәре икейөҙләлөк битлеге аҫтында булыуы бик ихтимал.

**(Ж. Лабрюйер).**

Кешенең ниндәйҙер сифатына баһа биреү өсөн... үҙең дә ошондай сифаттарға эйә булыу кәрәк.

**(В. Шекспир).**

Ҡатын-ҡыҙҙың матур булыу өсөн - бары бер генә, ә һөйкөмлө булыу өсөн мең төрлө мөмкинлеге бар.

**(Ш. Монтескье).**

Бары тик матур булыу менән генә сикләнгән ҡатын-ҡыҙҙың тормошо... заяға үткән.

**(Б. Фонтенель).**

Бер кеше лә үҙен бәхетле тип һанамай тороп, бәхетле була алмай.

**(Марк Аврелий).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ир менән ҡатын 30 йыл бергә йәшәгән. Ошо юбилейҙы билдәләргә булғандар былар һәм ҡатын, ғәҙәттәгесә, аҡ күмәс бешергән. Күмәсте мейестән алғас, уны, ғәҙәттәгесә, арҡырыға урталай бүлгән, ике өлөшөнә лә май яҡҡан. Ғәҙәттәгесә, күмәстең аҫҡы өлөшөн үҙенә ҡалдырып, өҫкө яғын иренә һонған да... ҡулын тиҙерәк кире тартып алған: "30 йыл буйына һәр иртә күмәс бешерәм, уның өҫкө яғын бер генә тапҡыр булһа ла үҙем ашап ҡарау тураһында 30 йыл хыялландым. Ошо йылдар буйына иремә өлгөлө ҡатын булдым, бынамын тигән балалар үҫтерҙем, ғаиләмде аяҡҡа баҫтырыу өсөн күпме көс һәм энергиямды һалдым..." - тип уйлаған ул. Һәм бер ҡарарға килеп, 30 йыл буйы килгән ғаилә традицияһын боҙған: ҡулдары ҡалтырай-ҡалтырай, иренә аҡ күмәстең аҫҡы өлөшөн биргән, үҙенә өҫкөһөн ҡалдырған. Ә ире күмәсте алған да, йөҙө яҡтырып, былай тигән: "Һин, һөйөклөм, беҙҙең юбилей көнөндә шундай ҡиммәтле бүләк эшләнең миңә. Мин 30 йыл буйы күмәстең үҙем яратҡан аҫҡы өлөшөн ашауҙан мәхрүм булып йәшәнем, уға бары тик һин генә хоҡуҡлы тип иҫәпләнем..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 23019

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
19 май 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3267
Заказ - 651

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.